✓ ***Дуҫлыҡ күрһәтеүсе бөтәһе менән дә дуҫ булмағыҙ. Дошманлығы бар, тип шөбһәләнгән кешеләрҙең барыһын да дошманым тип иҫәпләмәгеҙ. Мөхәббәте саф булмаған заттар менән дуҫ булмағыҙ. Дуҫлығының дөрөҫлөгөнә шөбһәләнгән кешеләр менән дуҫ булыуҙан һис дуҫһыҙ тороу яҡшы икәнен онотмағыҙ.***

***РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы иреклә

www.kiskeufa.ru

28 НОЯБРЬ - 4 ДЕКАБРЬ (ҠЫРПЫҒАЙ - АҠЪЮЛАЙ) 2009 ЙЫЛ

№48 (362)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яңы йылға бүләк булһын**
**һәр бер өйҙә "Киске Өфө"**



2

**Ғүмер көҙөндә...**
**йә матурлай, йә насарлай балаларын**



6

**Өфөләрҙе яуланыҡ та,**
**Сибайҙарҙа йәшәйбеҙ...**



8-9

**Мөхәмәтша мулла**



12

**ТВ программа**

14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ни өсөн динле кешегә фани донъяла йәшәүе еңелерәк?

***Асия ИҘРИСОВА, "Сәләм" магазины директоры:***

- Динһеҙ кеше, күп аҡса эшләһәм, матди байлыҡ туплаһам, эшемдә хужама ярап торһам, башҡаларҙан яҡшыраҡ йәшәрмен, тип өмөтләнһә лә, ауырлыҡтар килгән мәлдә терәктаянысһыҙ ҡала. Ә Аллаһы Тәғәләгә ышаныу әҙәм балаһы тормошон бар яҡлап та еңеләйтә, бының өсөн уға Аллаһтың ризалығына өлгәшергә тырышып йәшәү фарыз. Тормошон Ислам ҡанундарына, иманға ярашлы ҡора алғандар ауырлыҡтарҙы еңелерәк үтеп сығыу мөмкинлегенә эйә. Ниндәй генә хәлдәр килеп сыҡмаһын, Аллаһыбыҙҙың мәрхәмәтенә инанған иманлы кеше сабырлыҡ күрһәтә, ауырлыҡтарҙы үҙенә ебәрелгән һынау сифатында ҡабул итә. Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ сәхәбәләре лә, тормоштары еңеләйә башлаһа: "Аллаһыбыҙ беҙҙе оноттомо икән, яңы һынауҙарын ебәрмәй башланы", - тиер булған.

Был һорауға яуап сифатында бер фәһемле вә хикмәтле хикәйәтте иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Бер бик тә диндар кеше, тормошонда ни генә булмаһын - яҡшымы ул, насар хәлме, һәр саҡта ла: "Әлхәмдүлилләһ!" - тип әйтә икән. Бер саҡ һаҡһыҙлыҡ арҡаһында хужаһының бармағы өҙөлөүен күргәс, ул тағы ла: "Әлхәмдүлилләһ!" - тип әйткән икән, асыуы ҡабарған бай уны зинданға ябып ҡуйырға бойорған. Күп тә үтмәй, сәфәр ваҡытында был бай ҡырағай кешеләргә әсирлеккә эләккән, ә улары уны ҡорбан итергә булған. Тик ҡорбанлыҡ өсөн бөтә ағзалары ла теүәл кеше генә ярай икән был ҡырағай ҡәбиләлә. Бармағы юҡлығын күргәс, үҙ яйына ебәргәндәр байҙы. Тик шул саҡта ғына хужа әлеге диндарҙың "Әлхәмдүлилләһ!" - тип әйтеүенең ғилләһенә төшөнөп, тотҡонон зиндандан азат итеп, ризалатып ебәргән, ти. Был донъяға мәңгелеккә килмәгәнбеҙ, шуның өсөн Аллаһыбыҙға шөкөр ҡылып, әҙәп-әхлаҡ һаҡлап йәшәй алһаҡ, тормошобоҙ еңел дә, ғәмле һәм йәмле лә булыр.

***Сәлмән ЯРМУЛЛИН, "Аманат" журналының баш мөхәррире:***

- Йәш кеше үҙенән-үҙе тормошто еңел ҡабул итә, донъяның асылына артыҡ илтифат итмәй генә йәшәй бирә. Көйҙөң дә моңлоһон түгел, шәберәген, ырғанлап-һикерәнләп бейеп була торғанын үҙ итә. Ат аҙғыны тайға эйәрер, тигәндәй, әҙәм балаларының вайымһыҙы, үйһыҙы ғына ғүмерен еңел-елпе йәшәп уҙғара. Башлыса, олоғая бара, һәр ҡайһыбыҙ үткәндәре, үҙе ҡылған яҡшы йәки үкенесле ғәмәлдәре тураһында уйлана башлай. Уйсан кешенең динһеҙ ҡалыуы икеле. Дин тотоу - дөрөҫ йәшәү рәүеше, ти дин әһелдәре. Дингә, иманға ҡайта алыу кешене выждан ғазаптарынан арындырып, күңел тыныслығын булдырыу өсөн берҙән-бер дөрөҫ юл ул. Бөгөнгә донъяла тупланған бар байлыҡ та, билгән юғары вазифа ла, терәктаяныстай булып тойолған дуҫиштәр ҙә тормошонда хәүефһеҙ итә алмай. Ғөмүмән, матди донъяға тотороҡһоҙлоҡ хас, ә кешене киләсәккә булған ышаныс, өмөт йәшәтә. Йәшәйешеңде, рухи донъяңды тотороҡло итерлек бер генә көс бар, һәм ул Ислам тәғлимәтенә инаныу аша һәр кешенең күңелендә ярала. Динле кешенең ябай күҙгә күренмәгән, әммә бик ҡеүәтле ҡурсалаусыһы бар. Артыҡ ныҡ өҙгөләнмәй, хафаланмай, эске күңел тыныслығын һаҡлап йәшәйек, тиһәгеҙ, үҙ хәлегеҙҙән килмәгәнде һәр саҡта ла Аллаһ ҡарамағына тапшырығыҙ. Тик Ул ғына һеҙгә ышаныс һәм өмөт бирәсәк. Динле кешенең тормошо ла оло мәғәнәгә эйә, һәм быны аңлағанға Хоҙайҙан бирелгән ғүмере матур, иманлы һәм еңел булып тойоласаҡ.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕБЕҘ...

## һандыҡ төбөндә ятмаһын

**Күптән түгел Өфө ҡалаһында һәләтле йәштәрҙең "Быуаттар алышынғанда - милли костюм" I асыҡ конкурсы булып үтте. Конкурстың төп бурысы - оҫталарҙа һәм йәш модельерҙарҙа милли костюмдарға ҡыҙыҡһыныу уятыу, талантлы оҫталарҙы асыҡлау һәм уларға ярҙам итеү. Тәүге тапҡыр уҙғарылһа ла, Өфөнән һәм Саранск ҡалаһынан 34 йәш оҫта-модельер конкурста ҡатнашырға теләк белдергән. Проектта шулай уҡ Өфө ательеһы, "Ағиҙел" предприятиеһы, Өфө трикотаж фабрикаһы, "Иман" мосолман кейемдәре, "Салауат", "Сәләм" ательелары, "Алина Ҡаҙаҡбаева" салон-ательеһы, "Ете ҡыҙ" магазин-ательеһы һәм Саҡмағош балалар ижады үҙәге ҡатнашты.**



(Дауамы 5-се биттә).

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# РУХЫМА ИЛҺАМ БИРӘ

**"Киске Өфө" гәзитен сыға башлаған мәленән башлап алдырып, башынан аҙағына тиклем бөтә мәҡәләләрен дә уҡып барам. "Киске Өфө" минең иң яратҡан, мауығып уҡый торған гәзитем.**

Олоғайғас ни, ҡолаҡтар радио, телевизор хәбәрҙәрен әллә ни дөрөҫ ишетмәй. Илебеҙ һәм республикабыҙ яңылыҡтарын "Киске Өфө"нө уҡыһам ғына аңлайым, сөнки гәзит халыҡсан тел менән асыҡ һәм ябай итеп яҙа. Шуға күрә гәзиттең мөхәрририәт ағзаларына, башҡа хеҙмәткәрҙәренә оло рәхмәтлемен. "Диалог", "Тарихи хәтер", "Аҙна шаңдауы", "Ишара" рубрикаларындағы аңлайышлы, йөкмәткеле, тәрбиәүи әһәмиәткә эйә хәбәрҙәрҙе уҡыу рухыма илһам бирә, аңымды байыта. Рухиәтебеҙҙе, милли сәнғәтебеҙҙе, туған телебеҙҙе һаҡларға һәм яҡларға ярҙам иткән "Киске Өфө" үҙ бурысын намыҫ менән еренә еткереп үтәй. Был гәзит тап беҙҙең кеүек, аңлайышлы, боронғо йырҙарыбыҙ кеүек моңло, күңелгә яҡын, йөрәгебеҙ, тойғоларыбыҙ яратып ҡабул итә уны.

Гәзит тағы ла шуныһы менән әһәмиәтле. Илебеҙҙең миллионлаған кешеләренең ғүмере иҫәбенә яулап алынған Бөйөк Еңеүҙең дөрөҫлөгөн, ҡан менән яҙылған тарихын боҙоп күрһәтергә теләүселәргә ҡаршы көрәшә. Ватансылыҡ менән һуғарылған ҡартыраҡ быуындың тойғоларын яҡлаша, ситкә этәрмәй. Йәштәрҙең аңын томаларға тырышыусы демагогтар менән килешә алмай, уларға ҡаршы тора. "Киске Өфө" милли телебеҙҙең, милләтебеҙҙең һәм республикабыҙҙың киләсәген ҡайғыртыусы ла, киләсәгебеҙҙе дөрөҫ күҙалларға ярҙам итеүсе лә.

**Вилдан ШӘРИПОВ,**
**Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды.**
**Ғафури районы Сәйетбаба ауылы.**

* * *

**"Киске Өфө" - күңелдәребеҙгә рухи аҙыҡ ҡына булып ҡалмай, ул беҙҙе тормошта дөрөҫ йәшәргә, хаталарыбыҙҙы нисек төҙәтергә, аҡты ҡаранан айырырға ла өйрәтә. Һәр саҡ шулай халҡыбыҙҙың яратҡан баҫмаһы булып ҡал!**

Киске Өфө, балҡый ҡала,
Мең -мең төҫлө уттарында...
"Киске Өфө" - шундай гәзит,
Алдым әле ҡулдарыма.

Уҡымлы уның һәр бите,
Йөрәккә етә һүҙе.
Темалары ла күп төрлө,
Иң шәбе "Сәйләү гәбе".

Табаһың уның битендә,
Һин фәһемле хикәйә.
Аҡыллы һүҙҙәр табаһың,
Тағы ла бер битендә.

Ә мөхәббәт...Ошо бите,
Хәтирәне яңырта.
Һине хыялға ултыртып,
Йәшлеккә алып ҡайта.

Сәйәсәтте һөйләй беҙгә,
Таһирҙың төртмә теле.
"Киске Өфө" шундай гәзит,
Уҡыуы ла күңелле,
Яулап алды күңелде!

**Зәйтүнә АЙЫТБАЕВА,**
**Бөрйән районы, Ҡолғана ауылы.**

ИҒТИБАР!



Хәйбулла районы башҡорт теле уҡытыусылары.

# ЯҢЫ ЙЫЛҒА БҮЛӘК БУЛҺЫН

## һәр бер өйҙә "Киске Өфө"

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы иғлан итеүебеҙ тураһында хәбәр иткәйнек инде. Уҡыусыларыбыҙҙы, шулай уҡ туған телендә уҡый белмәгәндәрҙе, йә булмаһа, туған телдә уҡый белеп тә, гәзит тоторға ваҡыты булмағандарҙы ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәһе, туғандары, дуҫтарына бүләк итеп, "Киске Өфө"нө яҙҙырырға саҡырғайныҡ.**

Ысынлап та, бөгөн милли матбуғат баҫмаларының иң күп уҡыусылары - ауыл кешеләре. Айҙан-айға эш хаҡы алып эшләү бәхете лә бик аҙҙарына ғына тейә уларҙың, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу мөмкинлеген, рухи аҙыҡтан айырылмау яйын табалар. Ҡала кешеләре кеүек, аңды томалай, фекерләүҙе үлтерә торған телевизорға, компьютер уйындарына алыштырмаған әле улар гәзитте, китапты. Шуға ла, Яңы йыл бүләге тураһында алдан хәстәрләп, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итһәк, яҡындарығыҙ алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын, һеҙҙе хәтеренә төшөрөр һәм рәхмәт уҡыр.

Беҙҙең ошолай тип саҡырыуға был арала ғына байтаҡ кеше ҡушылды. Беренселәрҙән булып Өфөлә йәшәүсе эшҡыуар Фәниә Йәнбирҙина Ишембай һәм Бөрйән райондарында йәшәүсе туғандарына, һуғыш ветерандарына 25 "Киске Өфө" бүләк итте. "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы етәксеһе Рәйлә Фәсхетдинова ла Ишембай районында йәшәүсе туғандарына, ауылдаштарына 15 дана гәзит яҙҙырҙы. "Салют" санаторийы етәксеһе Наилә Усманова тиҫтәгә яҡын туғанын Яңы йыл бүләге менән ҡыуандырасаҡ. Шулай уҡ Хәмзә хәҙрәт - Белорет районындағы, Сәғит хажи Исмәғилев Көйөргәҙе районындағы мәсеттәргә, Миҙхәт Мәмбәтов -Хәйбулла районында йәшәүсе туғандарына, Айрат Искәндәров - Ҡырмыҫҡалыла йәшәүсе ата-әсәһенә, Айгөл Иглекова -Баймаҡта йәшәүсе ата-әсәһенә, Барый Салауатов - Ғафури районындағы туғандарына, Динир Хәсәнов Әбйәлил районындағы туғандарына "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып бүләк итте. Былары - беҙ белгәндәре генә. Беҙгә хәбәр итмәйенсә, хатта беҙ акция иғлан итмәҫтән алда уҡ гәзитебеҙҙе дуҫтарына, ата-әсәләренә бүләк итеүсе уҡыусыларыбыҙ бихисап икәнен ишетеп беләбеҙ һәм уларҙың барыһына ла рәхмәтлебеҙ. Акция дауам итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

- **2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**
- **Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.**
- **Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Юғары советы ағзаһы Мортаза Рәхимов "Берҙәм Рәсәй" Бөтә Рәсәй партияһының Санкт-Петербургта үткән ун беренсе съезында ҡатнашты. Республика башлығы партия эсендәге дисциплинаны көсәйтеү өсөн сығыш яһай:"Мин партия лидеры Владимир Путиндың сафтарыбыҙҙы таҙартырға кәрәклеге тураһындағы фекере менән тулыһында килешәм, - ти Мортаза Ғөбәйҙулла улы. - Партияла коррупцияға йәки закон менән башҡа төрлө проблемалар кеүек күренештәргә юл ҡуйырға ярамай".

✓БР Президенты Мортаза Рәхимов патронат, тәрбиәгә алыусы һәм опекундар республика конкурсында ҡатнашыусыларға премиялар тапшырыу тураһында Ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Быйыл иң яҡшылар исемлегенә Бүздәк районы Никольское ауылынан Вәсилә һәм Айҙар Ғәзиевтар, Өфөнән Галина һәм Валерий Семеновтар, Учалы районы Ғәлиәхмәр ауылынан Рәмилә һәм Таһир Мөхәмәткилдиндар инде.

✓РФ Президенты Дмитрий Медведев федераль мөлкәт һаналған "Өфө" Халыҡ-ара аэропорты"ның акцияларын 100 проценты менән Башҡортостан ҡарамағына бирергә бойорҙо. Милек хужаһын алыштырыу маҡсаты - "Өфө" аэропортын комплекслы реконструкциялауға инвестициялар йәлеп итеү. БР Хөкүмәте был маҡсатта 24,7 млрд һум күләмендә инвестициялар йәлеп итеүҙе күҙҙә тота.

✓Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙа республикала бөтәһе 18 меңгә яҡын хеҙмәткәр ҡатнашасаҡ. Әле Башҡортостанда йорттар иҫәбе алынған, тораҡ пункттарҙың ентекле пландары әҙерләнгән. Ҡалаларҙа һәм райондарҙа халыҡ иҫәбен алыу пландары төҙөлгән. Быға тиклемге халыҡ иҫәбен алыу 2002 йылда үткәрелгәйне.

✓Р. Нуриев исемендәге Башҡортостан хореография училищеһының буласаҡ балет артистары Германияға гастролдәргә юл тотто. Улар Лейпциг, Дрезден ҡалаларында Чайковскийҙың "Аҡҡош күле" балетын күрһәтәсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# МИЛИЦИЯ КЕМГӘ КӘРӘК,

## йәки Ниңә "ғәҙел батша" тулғағы тота беҙҙе?

**Ҡабаттан иҫкә алырға мәжбүрмен был кешене. Хәтерләйһегеҙҙер, 7 ноябрь көнө Новороссийск эске эштәр идаралығының хеҙмәткәре майор Дымовский Интернетта үҙенең видеомөрәжәғәтен урынлаштырғайны. Теләһә кемгә түгел, Владимир Владимирович Путиндың үҙенә төбәлгән ине ул мөрәжәғәт.**

Егерме көндән ашыу ваҡыт үтеп китте. Дымовскийҙы эштән ҡыуып сығарҙылар. Нахаҡ һүҙ һөйләп йөрөгәне өсөн. Ул Мәскәүгә килде. Журналистар менән осрашты. Ваҡытлы матбуғат сараларында уның хаҡта төрлө нәмәләр яҙып сығарып өлгөрҙөләр. Ул аҡылдан яҙғандыр, тип тә фаразланылар. Сит ил ижтимағи ойошмалары менән дә бәйләнеләр. "Ҡыҙыл-һары" революция ойошторорға маташыуҙа ғәйепләнеләр. Шуныһы ғәжәп, уны ҡулға алыу, йәки махсус дауаханаға ябыу тураһында берәү ҙә уйламаны ла, шикелле. Әллә Дымовский берәүгә лә кәрәкмәй булып сыҡты инде? Уның ҡарауы, уға эйәреүселәр, уның Интернеттағы "батырлығын" ҡабатларға маташыусылар табылды. Күп түгел, әлбиттә, ни бары һигеҙ кеше генә. Шуларҙың алтыһы - милиционерҙар, икәүһе - прокуратуранан. Исемдәрен, йәшәгән, эшләгән урындарын атарға мөмкин. Уларҙы берәү ҙә йәшермәй. Тырышмай ҙа хатта. Асыҡтан-асыҡ үҙҙәре хаҡында һөйләйҙәр, түрәләре ҡылған ҡырын эштәр тураһында бәйән итәләр. Эске эштәр органдарын фашлайҙар. Төрлө төбәктәрҙән улар. Бары тик вазифаларынан, яуырындарындағы погондарындағы йондоҙҙарҙан ғына айырып була үҙҙәрен. Ә һөйләгән һүҙҙәре бер үк тиерлек. Маҡсаттары ла бер үк. Һәр хәлдә, күҙгә ташланып торғандары. Өҫтәгеләргә (иң өҫтәгеләргә, властың иң башында, пирамиданың осонда ултырыусы бер нисә кешегә, тимәк) хоҡуҡ һаҡлау органдарының эшмәкәрлеге хаҡында ниндәйҙер мәғлүмәт еткереү.

Был күренеш бер бөгөн түгел. Олораҡ йәштәгеләр "Ходоки у Ленина" тигән рәсемде хәтерләйҙер. Емереклектәрҙә ятҡан Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән Бөйөк Октябрь революцияһының башлығына үҙ тормоштарынан зарланырға килгән крәҫтиәндәр һүрәтләнә унда. Урындағы власҡа ышанмаусанлыҡтан килә микән ул хәл? Ғәҙеллеккә сарсауҙанмы әллә? Революцияға тиклем дә бит халыҡта тигеҙ батшаға ышаныс көслө булған. Батшаға барайыҡ, баш эйәйек, хәлебеҙҙе уға еткерәйек, уның эргәһендәге ярандары беҙҙең хәлебеҙҙе батшаға дөрөҫ еткермәй, мәғлүмәтте боҙоп бирә, ялған һөйләп ултыра, тигән фекер крәҫтиәндәр һәм эшселәр араһында ифрат көслө булған. Поп Гапон да бит 1905 йылдың 5 ғинуарында тап "ғәҙел батшаға" ышаныусыларҙы Санкт-Петербургтағы Ҡышҡы һарай ҡаршыһына эйәртеп алып килтереп аттыртҡа түгелме? Йәйәүле Мәхмүт тә батша ҡаршыһына ҡурай уйнарға ғына түгел, ә башҡорттарға ҡарата булған ғәҙелһеҙлектәр хаҡында һөйләргә барған бит.

Ғәҙеллек бармы һуң был донъяла, тигән риторик һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ һуң, булмаһа. Хәйер, аңлашылалыр, риторик һорауҙарҙы уларға яуап табыр өсөн ҡуймайҙар. Эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре араһынан ғәҙеллек эҙләүселәр күп түгел дә баһа. Ни бары һигеҙ кеше генә. Тимәк, ҡалған 300 мең милиционер үҙ эше менән ҡәнәғәт булып сығамы? Күҙ алдына ғына килтерәйек әле - ғәҙеллек эҙләүселәрҙең һүҙҙәрен иғтибарға алып, уларҙың тәҡдиме менән милицияла, прокуратурала тәртип урынлаштырырға тотонһалар, башҡалар, ҡәнәғәттәр, ни эшләргә тейеш? Ул ваҡытта бит ҡәнәғәт булмаусыларҙың һаны бермә-бер артасаҡ. Эйе, һүҙ юҡ, милициялағы тәртипһеҙлек, боҙоҡлоҡтар хаҡында көн һайын тиерлек яҙып торалар. Һуңғы миҫал - 23 ноябрь кискеһен Мәскәүҙә өс иҫерек милиционер резина сүкмарҙары менән бер кешене үлтергәнсе туҡмап китә. Улар бит үҙҙәренең бөгөнгө хәле менән ҡәнәғәт булып сыға? Улар өсөн урамда кешене туҡмау - ғәҙәти, күнегелгән хәл, тимәк? Тағы ла бер нисә миҫал. Фамилияларын, вазифаларын килтереп тормайым. Был мәғлүмәттәр Бөтә донъя селтәрендә лә, ваҡытлы матбуғат биттәрендә лә бар. Түмәндә 26 йәшлек иҫерек милиционер 58 йәшлек пенсионер ҡатынды көсләгән. Ямал-Ненец автономия округында иҫерек милиционер бер кешенең күҙен сығара һуҡҡан. Волгоградта өс милиционер бер ҡыҙыҡайҙы ҡулға ала һәм наркотиктар таратыуҙа ғәйепләү маҡсатында уның сумкаһына наркотик матдәле төргәк һалған. Мәскәүҙә Кутузов проспектында иҫерек милиционер 15-се ВАЗ-да иномаркаға килеп бәрелгән. Ул идара иткән машинаның номерҙары, ә хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәренең автомобилгә бер ниндәй ҙә документтары булмаған. Беҙҙең милиция беҙҙе һаҡлаған саҡтар үтеп киттеме хәҙер?

Хәйер, һүҙем икенсерәк юҫыҡҡа йүнәлде, буғай. Ғәҙел батша хаҡында һөйләшә инек бит. Быға тиклем ғәҙеллек эҙләүселәр, Мәскәүгә юлланыусылар араһында кем генә булманы. Улар тураһында китаптар яҙып ҡына ҡалманылар, кинофильмдар ҙа төшөрҙөләр. Тик милиционерҙар һәм, ғөмүмән, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре улар араһында осрағаны юҡ ине әле. Нишләп бығаса тиклем тәртип һаҡлаусылар үҙҙәренең эш шарттарына зарланмаған икән? Әллә улар бығаса тиклем ожмахтағы кеүек йәшәгәнме? Әллә бығаса тиклем уларҙың эш хаҡтары олигархтарҙыҡы кеүек булғанмы, ә енәйәтселәр ҡылған ҡырын эштәре хаҡында үҙҙәре үк һөйләп биргәнме? Ай-һай! Шулай булғас, ни өсөн бығыл эске эштәр органдарындағы тәртипһеҙлектәр хаҡында ваҡытлы матбуғат саралары айырыуса ототро һәм ауаһыҙ яҙа һәм һөйләй башланы әле? Әллә, ысынлап та, "демократия" һәм "һүҙ ирке" тигән төшөнсәләр тормошҡа аша башланымы? Әллә инде "кәстрүлдәге парҙы" (йәғни, йәмғиәттә эске эштәр органдарының ҡырын ҡылыҡтарына ҡарата тупланған ризаһыҙлыҡты) сығара торған мәл килеп еттеме? Әллә инде милиция хеҙмәткәрҙәре ваҡытлы матбуғат саралары менән берлектә Рәсәйҙә революция ойошторорға йыйынамы? Әллә, ысынлап та, Евсюковтың ҡылығы, милиция хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында булған башҡа енәйәттәр Эске эштәр министрлығы эшмәкәрлегенә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға мәжбүр иткән бер катализатор булды инде?

Үткән аҙнала ғына тағы ла бер, тәү ҡарашҡа парадоксаль бер ваҡиға булды. Дәүләт Думаһы депутаты һәм (иң аптыратҡаны) "Берҙәм Рәсәй" партияһының генераль советы ағзаһы, был партияның Думалағы фракцияһы ағзаһы һәм Думаның һалымдар һәм бюджеттар буйынса комитеты рәйесенең урынбаҫары Андрей Макаров Эске эштәр министрлығын реформалап (йәғни үҙгәртеп ҡороп) булмаясаҡ, уны юҡҡа сығарырға ғына кәрәк, тип белдерҙе. Ул нимә тәҡдим итә һуң? Беренсенән, Эске эштәр министрлығының штатын ике тапҡырға кәметергә кәрәк, тип һанай депутат. Бынан тыш, уның фекеренсә, тикшереү аппаратын министрлыҡ составынан сығарыу мотлаҡ. Ул милицияның бар хеҙмәткәрҙәрен штаттан сығарырға һәм яңынан тупларға, яңы Рәсәй милицияһына тик намыҫлыларҙы ғына йыйырға тәҡдим итә. Ризамын. Риза булмағандарҙы күрергә теләр инем. Тик ул намыҫлыларҙы ҡайҙан алырбыҙ икән?

Был тәҡдимдең власть партияһының вәкиле ауыҙынан яңғырауы ҡыҙыҡ тойола. Билдәле, "Берҙәм Рәсәй" партияһы етәкселәренең береһе Борис Грызлов 2001 йылдың мартынан 2003 йылдың декабренә тиклем Рәсәй эске эштәр министры вазифаһын биләгәйне. Тап шул саҡта ул "погонлы әүермәндәр", йәғни енәйәтсе милиционерҙар менән көрәш асты ла инде. Хатта Мәскәүҙә юғары вазифалар биләгән бер төркөм әүермәндәр ҡулға алынғайны. Дәүләт Думаһына килгәс, Борис Вячеславович бер килке тынып ҡалған һымаҡ ине. Әле бына Андрей Макаровтың белдереүенә ҡарағанда, Дәүләт Думаһы рәйесе әүермәндәр менән көрәште дауам итергә булған. Хәйер, үҙе генә түгелдер. Был партия ағзалары үҙ белдеге менән бер нәмә лә һөйләмәй бит.

Тимәк, дәүләт етәкселеге Эске эштәр министрлығын үҙгәртеп ҡорорға ниәтләнгән, тип фаразларға мөмкин. Бының өсөн ваҡытлы матбуғат сараларында шау-шыу ойоштороу, эске эштәр органдарын, ябай ғына итеп әйткәндә, бысраҡҡа болғау кәрәк ине микән һуң? Теләһәләр, Президент Дмитрий Медведевтың да, Премьер-министр Владимир Путиндың да эске эштәр органдарын реформаларға ғына түгел, юҡҡа сығарып, туҙҙырып ташларға көстәре лә, рухтары ла етерлек бит. Бының өсөн йәмәғәтселекте әҙерләргә түгел. Кешеләр күптән инде етәкселектән милицияға ҡарата ниндәйҙер ҡәтғи ҡарарҙар көтә. Тимәк, эш күпкә тәрәнерәк һәм ҡатмарлыраҡ.

Башҡа былай йәшәргә ярамай, тигән өндәү менән эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре асыҡтан-асыҡ юғары етәкселеккә мөрәжәғәт итте. Уларҙың видеоларын йөҙәрләгән мең кеше ҡарап өлгөрҙө. Ҡыҙғаныска ҡаршы, түрәләребеҙҙең был мөрәжәғәттәргә ниндәйҙер (ыңғай йәки кире, уныһы мөһим түгел) мөнәсәбәттәрен белдерергә мәлдәре лә, әмәлдәре лә табылманы. Ҡыҙыҡ, улар үҙ министрлығын тәнҡитләгән милиционерҙарға ғына шундай ҡараштамикән? Әллә бөтәбеҙгә ҡарата микән?

Ғәҙел батшаларға ышаныс ҡалманы.

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала йыл башынан алып 4 мең 23 янғын сыҡҡан, утта 264 кеше һәләк булған. Быltыр ошо уҡ ваҡыт эсендә 4 мең 292 янғын булып, унда 313 кешенең ғүмере өҙөлгәйне.

✓Туймазы ҡалаһында булып үткән "Оҙон көй" төбәк-ара бәйгеһендә быйыл республиканың 46 районынан 142 кеше көс һынашты. Гран-приға Балтас районынан Рәзидә Әхмәтова лайыҡ булды. Ун алты йәштән алтмыш йәшкә тиклемгеләр араһында беренсе урынды Баймаҡтан Юнир Һағынбаев, Йылайырҙан Ләйсән Моталапова, икенсе урынды Кушнаренконан Рәүиә Рамаҙанова, Мәскәүҙән Зилара Бикбова, өсөнсө урынды Ейәнсуранан Лилиә Әркәнбаева, Ырымбур өлкәһенән Флүзә Хәлитова, Туймазынан Марс Төлкөбаев, Дәүләкәндән Рәлиә Әйүпова яуланы.

✓Үткән аҙнала республикала һалҡын тейҙереп ауырыусылар һаны 36 процентҡа кәмегән. 16 ноябрҙән 22-нә тиклем барлығы 63405 кеше ауырыған, уларҙың 66 проценты - 17 йәшкә тиклемге балалар. Өфөлә һалҡын тейҙереп ауырыусылар 44 процентҡа кәмегән. 24 ноябргә Башҡортостанда 43 сусҡа киҙеүе менән ауырыусы теркәлгән, уларҙың 6-һы донъя ҡуйған.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов мосолмандарҙы изге Ҡорбан ғәйете менән ҡотланы.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты республикала Яңы 2010 йылды байрам итеү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Сауҙа нөктәләрендә байрамға әҙерлек башланыуы һиҙелә лә инде. Урман хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Яңы йыл байрамына ике йөҙ мең шыршы әҙерләнәсәк. Уларҙың хаҡы бейеклегенә ҡарап билдәләнәсәк.

✓"Иммунопрепарат" етештергән "Пандефлю" препаратына сифат паспорты алынған. Был вакцина сусҡа киҙеүенә ҡаршы прививка эшләү өсөн файҙаланыласаҡ.

✓Республика йортонда 60 әсә Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡулынан "Әсәлек даны" миҙалы алып шатланды. Президент тантанаға йыйылыусыларҙы, шулай уҡ республикалағы барлыҡ әсәләрҙе Әсә көнө байрамы менән дә ҡотланы.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ХӘЛӘЛ МЕНӘН ХАРАМ...

**Ҡөрьән-Кәримдә һәм Мөхәммәт бәйғәмбәр хәҙистәрендә мосолмандар өсөн тыйылған өммәттәр аныҡ билдәләнә. "Үләкһә, ҡан, сусҡа ите, шулай уҡ мосолманламайынса (асып, бәреп үлтерелгән, бейектән ҡолап, һөҙөләп, йыртҡыстан тамаҡланып үлгән мал) һуйылған ит ашау тыйыла. Әгәр ҙә кеше гонаһ ҡылыу өсөн түгел, ә аслыҡтан был тыйылған итте ашарға мәжбүр икән, Аллаһы Тәғәлә уны үҙе ярлыҡар..." - тиелә Ҡөрьәндә.**

Рөхсәт ителгән мал билдәле бер йола буйынса, изге ниәт менән һәм "бисмиллаһ" әйтеп һуйылырға тейеш. Был йоланы үтәгән кешенең мосолман булыуы фарыҙ. Ит таҙа булһын өсөн һуйған малдың ҡаны ағып бөтһөн.

Бәйғәмбәр хәҙистәрендә кеше сәләмәтлегенә зыян килтереүсе ризыҡ менән туҡланған һәм кешелә ерәнеү тойғоһо уяткан йәнлек-хайуандар харам тип иҫәпләнә. Улар - йылан, ҡомаҡ, сысҡан, ташбаҡа, һуҡыр сысҡан, терпе, себен, селәүсендәр. Саранчанан тыш, башҡа бөжәктәр ҙә хәрәм.

Хәнәфи мәзһәбенә ярашлы, йыртҡыстар - айыу, бүре, шәшке, һуҫар, эт, бесәй, төлкө ите лә харам һанала. Сөнки улар үҙҙәре шикелле йылы ҡанлы йәнлектәр менән туҡлана.

Шәфиә мәзһәбендә кеше сәләмәтлегенә зыян килтерерҙәй хайуан-йәнлектәрҙең итен ашау тыйыла. Был исемлеккә төлкө менән сул бүреһе инмәй. Мәликә мәзһәбе буйынса иһә, был хайуандарҙың ите мәкрух тип иҫәпләнә һәм уларҙы ашау тыйыла.

Хәнәфи мәзһәбе буйынса, ҡарға менән ябалаҡ йыртҡыс ҡоштарға инә. Мәликә мәзһәбенә ярашлы, бөтә йыртҡыс ҡоштарҙың да ите мәхруҡ ите тип һанала.

Ә Шәфиә мәзһәбендә тырнаҡлы һәм үләкһә менән туҡланған ҡоштарға ҡарсыға, ҡоҙғон, өкө, ҡарға, төйләгән, бөркөт һәм башҡалар инә.

Бөтә дүрт мәзһәб буйынса ла, ишәк менән мул ите харам һанала. Мәзһәбтәргә нигеҙ һалыусыларҙың күбеһе ат итен ашауҙы рөхсәт итә.

Диңгеҙ хайуандарының итен файҙаланыуға килгәндә, мәзһәбтәрҙә төрлө ҡараш. Хәнәфи мәзһәбе буйынса, балыҡтан башҡа, диңгеҙҙән алынған бөтә ризыҡтар харам һанала. Мәликә мәзәһәбе буйынса иһә, диңгеҙ дуңғыҙынан башҡаһын ашарға мөмкин. Шәфиә мәзһәбе буйынса диңгеҙ йәнлектәре таҙаға һәм таҙа булмағанға инә.

Аңды томалаған, ағыулаған һәм сәләмәтлеккә башҡа төрлө зыян килтергән эсемлектәр ҙә харам һанала. Шул иҫәптән иҫерткес эсемлектәр ҙә. Наркотиклы матдәләр ҙә - гашиш, опиум, героин, морфий, кокаин да тыйыла. Донъя медиктары ла уларҙың сәләмәтлеккә зыян килтереүен таный. Уларҙы ҡулланыу мосолманға лайыҡ түгел гәмәл. Бынан тыш, спиртлы эсемлектәрҙең милләт генофондына, уның киләсәгенә насар йоғонтоһо тураһында ла оноторға ярамай.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СПОРТСЫЛАРҒА БҮЛӘК

**Башҡортостанда өс объект "2006-2015 йылдарға "Рәсәй Федерацияһында физик культура һәм спортты үҫтереү" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә төҙөләсәк.**



Яңыраҡ БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев РФ Спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте министры Виталий Мутко менән осрашты һәм киләсәктә төҙөләсәк өс мөһим объектты: Сибайҙа яһалма боҙло һәм 1500 тамашасыға иҫәпләнгән ябыҡ каток, Өфөлә "Өфө-Арена" спорт аренаһында каток һәм 900 урынлыҡ трибуна менән физкультура-спорт үҙәге төҙөләшөн федераль программаға индереүгә өлгәште. Осрашыуҙа республика федераль бюджет ярҙамына хоҡуҡлы тип табылды. Һуңғы өс йылда ғына Башҡортостан физик культура һәм спорттың матди-техник базаһын үҫтереү һәм нығытыу өсөн 4,5 миллиард һум бүлгән. 2008 йылда Башҡортостан спортсылары рәсми старттарҙа 1002 призлы урын алған, ошо уҡ йылда Олимпия һәм Паралимпия уйындарында 12 миҙал яулаған. Премьер-министр һүҙҙәренә ҡарағанда, Сибайҙағы ябыҡ каток олимпия спортсылары әҙерләйәсәк спорт лицейы өсөн майҙан буласаҡ.

# ҒАИЛӘЛӘРГӘ ЯРҘАМ

**Ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләр менән эшләү өсөн баш ҡалала ведомство-ара совет булдырылғайны. Уның эше тураһында яңыраҡ ҡала округы хакимиәтендә уҙғарылған матбуғат конференцияһында һүҙ барҙы.**

Өфө ҡалаһы округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфирә Баҡыева әйтеүенсә, бөгөнгө көнгә ҡалала хәүефле социаль хәлдә ҡалған 474 ғаилә иҫәпләнә, унда 1024 бала тәрбиәләнә. Был ғаиләләр барыһы ла советта теркәлгән. Бындай ведомство-ара совет БР Хөкүмәте янында ла булдырылған, улар муниципалитеттар кимәлендә лә эшләй. Әлфирә Миннулла ҡыҙы һүҙҙәре буйынса, улар өс этапты: ойоштороу-диагностикалау, реабилитициялау һәм контролдә тотоуҙы үҙ эсенә ала. Элек әгәр ҙә социаль хеҙмәтләндереү комплексы үҙәктәре оло йәштәге кешеләргә ярҙам итеү менән генә шөғөлләнһә, бөгөн уларҙың төп бурысы - ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләр менән эш алып барыу. Советтың тағы ла бер мөһим тармағы булып йәмыш ҡарамағында ҡалған йәш әсәләргә реабилитация үткәреү тора. Бала табыу йорттарында ла әүҙем эш алып барыла. Әгәр ҙә 2007 йылда 161 ҡатын сабыйынан баш тартһа, 2008 йылда бындай әсәләр һаны - 68, ә быйылғы йылдың 10 айы эсендә 33-кә кәмегән.

Ведомство-ара совет торлаҡ-коммуналь хеҙмәтен түләү буйынса бурыстары булған ғаиләләргә ярҙам итеү менән дә шөғөлләнә. 2009 йылдың 1 ноябренә Өфөлә бындай 1182 ғаилә теркәлһә, уларҙың 7535-енә субсидия юлланған, 134 ғаиләгә матди ярҙам күрһәтелгән.

# ЙОРТТАР АРТАСАҠ

**Республикала "Үҙ йортом" аҙ ҡатлы төҙөлөш программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Өфө районында тағы ла биш участка бүленгән. Был турала БР Төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министры Рауил Ибәтуллин белдерҙе.**



Шулай итеп, аҙ ҡатлы социаль торлаҡ төҙөү өсөн баш ҡала янында барыһы 8 ер майҙаны бүленде. Әлеге ваҡытта Шамонин, Жуков һәм Дорогин ауылдарында төҙөлөш бара. Министрҙың һүҙҙәре буйынса, Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов ҡарарына ярашлы, 2010 йылда Йоматау, Базилевка, Нагаево, Алексеевка һәм Максимовка ҡасабаларынан тағы ла 100 - 300 гектар ер бүленәсәк. Рауил Ибәтуллин быйыл 1000 йорт, 2010 йылда 2 мендән ашыу торлаҡ файҙаланыуға тапшырыласаҡ, тип белдерҙе.

Әйткәндәй... Был үҙенсәлекле программа торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаждарҙың ғына түгел, ә түләүле нигеҙҙә үҙҙәренең хеҙмәтен тәҡдим итеүсе төрлө аралашсылар һәм риэлторҙарҙың иғтибарын йәлеп итә. Аҙ ҡатлы төҙөлөш идаралығы был программала ҡатнашыусыларҙың исемлеген төҙөүҙә урындағы үҙидара органдарынан тыш, сит ойошмалар ҡатнашмауын белдерә. Мохтажлыҡ критерийҙары РФ Торлаҡ кодексына нигеҙләнеп билдәләнә. Ғариза биреү өсөн йәшәгән урын буйынса урындағы үҙидара органына мөрәжәғәт итергә.

# НАРКОМАНДАР КҮБӘЙӘМЕ?

**Башҡортостанда наркотик ҡулланыусылар һаны артыуы күҙәтелә, әммә белгестәр был күрһәткестең үҫеүен наркотик ҡулланыусыларҙы асыҡлау эшенең әүҙемләшеүе менән бәйләй.**

Республикала 2006 йылда - 6614, 2007 йылда - 7228, 2008 йылда - 7329 наркоман теркәлгән. Наркологик иҫәптә тороусыларҙың 92 проценты 20-39 йәшлек йәштәр. 2009 йылдың өсөнсө кварталы мәғлүмәттәре буйынса, наркотиктарҙы даими ҡулланыусы һәм һаулыҡ һаҡлау системаһында иҫәптә тороусыларҙың артыуы (8086 кеше) күҙәтелә. "Статистика буйынса, наркомандар һәм наркотик ҡулланыусылар Өфө, Туймазы, Нефтекама, Күмертау ҡалаларында артҡан, - ти 1-се Республика наркологик диспансерының баш табибы Илдар Байков. Әммә был рәсми һандар наркомания таралыуы масштабын билдәләй алмай, эксперт баһаһы буйынса, наркотик ҡулланыусылар республикала һәм Рәсәйҙә лә был һандарҙан 4-5 тапҡыр юғарыраҡ". Былтырғы йылдан Башҡортостандың наркологик хеҙмәте экспресс-тест ҡуллана, район хакимиәттәре, наркоконтроль, наркологтар әүҙем эшләй - һөҙөмтәлә наркотик ҡулланыусылар күберәк асыҡлана.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡалала, Рәсәйҙә беренселәрҙән булып, ер үлсәүсегә һәйкәл ҡуйылды. Ул БР буйынса Рәсәй реестр идаралығы бинаһы алдына ҡуйылған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә матбуғат баҫмаларына яҙылыу барышы тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнелеүенсә, баш ҡалала республика баҫмаларын да, Өфө гәзит-журналдарын да алдырып уҡыу кәмей бара. Павел Рюрикович кәңәшмәлә ҡатнашыусы район хакимиәттәре башлыҡтары, ойошма-предприятие етәкселәрен гәзит-журналдарға яҙылыу эшенә шулай уҡ етди ҡарарға саҡырҙы.

✓Баш ҡалабыҙҙа Һамар-Силәбе автотрассаһы эргәһендәге Жилин һәм Зинин ауылдары араһында "Зинино"- "Экологик агромаркет" ауыл хужалығы йәрминкәһенең икенсе объекты асылды. Бер үк ваҡытта Өфөлә ит һатыу йәрминкәләре эшләй башланы. Ул 31декабргә тиклем дауам итәсәк. "Зинино" сауҙа-йәрминкә комплексына Көньяҡ автовокзалдан - 124-се, "Дан бульвары" туҡталышынан - 24-к һәм 163-к, "Сипайлово" һауыҡтырыу комплексынан 278-се маршрут автобустары менән барырға була.

✓Рәми Ғарипов исемендәге - 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында республика гимназия-лицей уҡыусылары араһында ойошторолған спартакиада булып үтте. Бында уҡыусылар милли көрәш һәм гер күтәреү буйынса көс һынашты. Милли көрәш буйынса беренселекте Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт гимназия-интернаты, икенсе урынды - Дыуан республика лицей-интернаты, өсөнсө урынды Сибай гимназия-интернаты яуланы.

✓Өфөнөң 35 предприятиеһы "Эшләүсе әсә өсөн иң яҡшы предприятие" конкурсы дипломанты булыуға өлгәште. Улар Әсә көнө байрамы алдынан эксперт комиссияһы рәйесе, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡулынан диплом һәм бүләктәр алды.

✓Башҡортостанда күргәҙмә-йәрминкәләр эшмәкәрлеге үҫә бара. Бына Нефтселәр мәҙәниәт һарайында тағы бер матур сара - "Ростекстильэкспо. Кожа. Обувь. Меха - 2009" махсуслаштырылған күргәҙмәһе асылды. Унда Рәсәйҙең 17 төбәгенән 120 етештереүсе предприятие ҡатнаша. Күргәҙмә 28 ноябргә тиклем дауам итәсәк.

ҠОТЛАЙБЫҘ!



# ҠОРБАН БАЙРАМДАРЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Дин Исламда ғәзиз ҡәрҙәштәрем, ватандаштарым, замандаштарым! Әс-сәләмү ғәләйкүм үә рахмәтул-лаһи үә бәрәкәтүһ! Башҡортостан мосолмандары диниә назараты һәм уның мәхәлләләре исеменән һеҙҙе Ибраһим ғәләйһис-сәләм ваҡытынан быуаттар аша беҙҙең көндәргә тиклем еткән ошо оло, бөйөк байрам менән ихлас күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ.**

Аллаһы Тәғәлә изге Ҡөрьән Кәримдә "Раббыңдың ризалығы өсөн намаҙ уҡы һәм ҡорбан сал", - тип бойора. Аллаһы Тәғәләнең ризалығын өмөт итеп ҡорбан салыу Зөлхизә айының 10-сы, 11-се, 12-се көндәрендә башҡарыла. Салған ҡорбандарыбыҙ ҡан ҡойоу түгел, Аллаһы Тәғәләнең биргән ниғмәттәренә шөкөр итеү, йыл буйына ҡылған гонаһтарыбыҙҙың юйылыуына сәбәп, фәҡир мөъмин-мосолмандарға ярҙам ҡулы һуҙыу.

Байрам - ул донъя именлегенә һөйөнөү, иман яңыртыу, игелекле ғәмәлдәрҙе ишәйтеү, ишәйтергә өйрәнеү көндәре. Аллаһы Раббыбыҙ бөтәбеҙгә лә тәүфиҡ-истиҡәмәт биреп, ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәүебеҙҙе насип итһә ине. Рәсәй һәм ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙың киләсәген яҡты һәм нурлы, ғаиләләребеҙҙең бәхетле, илкөндәребеҙҙең тыныс булыуын күреп ғүмер итергә яҙһын.

Мөбәрәк Зөлхизә айы - хаж ҡылыу айы. Хаж - ул Ислам диненең бишенсе нигеҙе. Ошо көндәрҙә ер йөҙөндә йәшәгән бер миллиард ярым мосолмандың вәкиле булып йөҙләгән милләттән торған бер нисә миллион мосолман изге Ҡәғбәтулла янында хаж ғибәҙәтен үтәй. Аллаһы Тәғәлә уларҙың сәфәрҙәрен еңелдәрҙән итеп, ҡылған хаж ғәмәлдәрен ҡабул ҡылып, ватандарына һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтып, рухи тәрбиә юлында оло тырышлыҡтар күрһәтергә насип итһен. Амин.

Донъяларҙа - именлек, араларҙа - татыулыҡ, ил көндәребеҙҙә тынyслыҡ булып ҡына торһон. Киләһе байрамдарҙы ла шатлыҡ-ҡыуаныстар менән ҡаршы алырға насип итһен.

Ҡорбан байрамдары мөбәрәк булһын!

**Башҡортостан мосолмандары диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘРЕБЕҘ...

## һандыҡ төбөндә ятмаһын

**(Аҙағы. Башы 1-се биттә).**

Киров районы хакимиәте башлығы Юлай Ильясов конкурсҡа ҡарата ошондай фекерҙәрен әйтеп уҙҙы: "Башҡортостаныбыҙҙа бик күп милләт йәшәй. Һәр халыҡтың милли кейеме шул тиклем үҙенсәлекле, матур. Бөгөн сәхнәлә күрһәтелгән кейемдәр ҙә миңә бик оҡшаны. Әгәр тарихыбыҙҙы өйрәнеп, ололарҙан һорашҡанда, эҙләнгәндә, беҙҙең тағы ла бик күп орнамент-биҙәктәребеҙҙе табырға, киренән ҡайтарырға мөмкин. Милли кейемдәр үҙе үк йәштәрҙе тәрбиәләү ысулылыр, тип уйлаймын. Шуға күрә киләсәктә был конкурстың традицияға әйләнеп китеүенә өмөт итәм".

Еңеүселәр "Этнография костюмы", "Сәхнә костюмы", "Замана костюмы", "Милли кейемдәге ҡурсаҡ", "Эскиздар конкурсы", "Дефиле" номинациялары буйынса билдәләнде. Ә гран-прины Өфө дәүләт технология һәм дизайн колледжынан "Царь девица" коллекцияһы менән Динә Закрина яуланы.

**Хәҙисә АРҒЫНБАЕВА, башҡорт милли кейемдәре коллекцияһы авторы, "Этнография костюмы" номинацияһында I урын яулаусы:** Нәфирә Ихсанова етәкселегендәге өләсәйҙәр клубы ағзалары минең башҡорт милли кейемдәре коллекцияһын күрһәтергә ярҙам итте. Өфө ағинәйҙәренә минең кейемдәремде кейеп, халыҡҡа матур итеп күрһәткәндәре өсөн ҙур рәхмәтлемен. Был минең генә түгел, уларҙың да еңеүе. Беҙ конкурсҡа еңер өсөн генә ҡатнашманыҡ, төп бурысыбыҙ - киләһе быуынға, балаларға ата-бабаларыбыҙҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен еткереү. Үҙем көндәлек тормошта ла башҡорт милли кейемдәрен кейергә яратам. Мин тәүҙә үҙемдең ейәнсәрҙәремә, килендәремә, ҡыҙҙарыма тип тегә башлағайным, хәҙер инде халыҡ өсөн тегәм, тиһәм дә яңылышмаҫмын. Минең теккән кейемдәр араһында сәхнә өсөн дә, көндәлек кейеүгә ярашлылары ла бар. Ололар ҙа, йәштәр ҙә үҙебеҙҙең кейемдәребеҙҙе кейеп йөрөһөн, биҙәү кейемдәренә һөйөү тәрбиәләйек, тип тырышабыҙ. Йәштәр хәҙер сулпы, ҡашмау, сәсмәү, селтәр, ынйы нимә икәнде лә белмәй бит. Әгәр беҙ шулай милли кейемдәребеҙҙе күрһәтеп, йәштәрҙе өйрәтеп йөрөмәһәк, быуындар бәйләнеше өҙөләсәк.



**Альбина ИСХАҠОВА, ҡатнашыусы:** Бында ҡатнашыуыбыҙҙың төп маҡсаты - халҡыбыҙҙа рух тәрбиәләү, милли кейемгә мөхәббәт, хөрмәт уятыу. Ниңә беҙгә ошолай милли кейемдәребеҙҙе кейенеп йөрөмәҫкә? Беҙ, ололар, йәштәргә үрнәк булырға тейешбеҙ. Иншалла, ошо изге маҡсаттарыбыҙға ирешһәк, был беҙҙең өсөн ҙур ҡыуаныс буласаҡ. Ошо сарала ҡатнашырға шул тиклем ҡыуанып йыйылдыҡ. Төркөмөбөҙҙә лә рухлы апайҙар ғына йыйылған. Оло булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, йәштәр кеүек елкенеп торабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Асылыбыҙға, рухиәтебеҙгә тап килгән матур кейемдәребеҙ ниңә һандыҡ төптәрендә, йә музейҙарҙа ғына эленеп торорға тейеш һуң әле? Был конкурс милли кейемдәребеҙҙе яңынан халыҡҡа еткерергә, модельерҙарға был йүнәлеш буйынса тағы ла дәртләнеп эшләргә этәргес булғандыр.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# КИТАПХАНА ЙӘШӘЙ ИКӘН...

## китап уҡыусы ла бар, тигән һүҙ

**Хәҙер мәғлүмәт алыу юлдары күп. Әммә шуныһы ҡыуаныслы, заман технологиялары киң үҫеш алған ваҡытта ла китапханаларҙың эше туктап ҡалманы. Һәр китапханасы уҡыусыны кәрәкле мәғлүмәт менән тәьмин итергә бурыслы, тик китапхана - кешеләргә мәғлүмәт биреүсе генә түгел, ә сәнғәтте үҫтереүҙә, халыҡ араһында илһөйәрлек тойғоһон, рух ныҡлығын, тарихи һәм мәҙәниәт ҡомарткыларын һаҡлауға ла ҙур өлөш индерә.**

Күптән түгел баш ҡалала "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы китапханаһы - 2009" конкурсына йомғаҡ яһалды. Сарала муниципаль китапхана хеҙмәткәрҙәре, район китапханалар үҙәге директорҙары сығыш яһаны. Конкурстың маҡсаты - республикалағы китапханаларҙың ижади эшмәкәрлеген үҫтереү, үҙидара органдарының иғтибарын йәлеп итеү, халыҡты китаптар менән тәьмин итеүҙе яйға һалыу.

Быйыл был конкурс БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт һәм Мәғариф министрлыҡтары тарафынан 5-се тапҡыр уҙғарыла. Ошо сарала китапхана хеҙмәткәрҙәре бер-береһенең эше менән таныша, тағы ла яҡшыраҡ эшләргә көс-дәрт алып ҡайтып китә. Быйыл бигерәк тә Яңауыл, Аҫҡын, Мишкә, Тәтешле балалар китапханаһы, Өфө ҡалаһының 13-се, 29-сы китапханалары проект эштәрен яҡшы әҙерләгән.

Ҡатнашыусылар 17 номинацияла көс һынашты. Ейәнсура, Тәтешле, Баймаҡ, Ауырғазы, Борай, Мәләүез һәм башҡа муниципаль район китапханаларының эше иң уңышлыһы, тип табылды. Күмертау ҡалаһының үҙәкләштерелгән китапханалар селтәренең 1-се филиалы "Китапхана - йәштәр үҙәге" номинацияһында еңеп сыҡты. Яңауыл үҙәкләштерелгән китапханаһы иһә йәштәрҙә толерант ҡараш тәрбиәләүҙәге уңышы өсөн бүләкләнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Китапханаларҙың эшен яйға һалыу өсөн ошондай конкурстарҙың әһәмиәте бик ҙур. Бары тик тәжрибә уртаҡлашҡанда, уҙ-ара көс һынашҡанда ғына белемде һәм эшеңде камиллаштырыу сәменә өлгәшергә мөмкин.**

**Зөһрә ҠУНАФИНА.**

Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

## Йөҙөм, инжир, күрәгә - яҡшы дауа

**Көнөнә бер йәки ике тапҡыр тура эсәктең ирекле бушатылып тороуы мөһим, югиһә бөтә организмдың ағыуланыуы башлана. Был проблеманы организмға зыян килтермәй генә төрлө үләндәр һәм емештәр яйға һала.**

❖ Бер балғалаҡ етен орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 4-5 сәғәткә таҫтамалға урап ултыртырға ла кис йоҡлар алдынан бөтҡәнсе эсеп ҡуйырға.

❖ Алоэ гөлөн 2 аҙна буйы һыу һипмәй тотҡас, ботаҡтарын ҡырҡып алып сайҡағыҙ һәм 150 грамм һут һығып алығыҙ. 300 грамм бал ҡушып болғатҡас, көнөнә ике тапҡыр 1 ҡалаҡ эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ эт муйылын (крушина ломкая)1 стакан ҡайнар һыу һалып, 20 минут талғын ғына ҡайнатығыҙ. Иртән һәм кисен яртышар стаканлап эсергә.

❖ Түбәндәге сәйҙәр ҙә эсте яҡшы йомшарта: 1 ҡалаҡ эт муйылы, 1-әр балғалаҡ меңъяпраҡ һәм кесерткән үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә. Йоҡлар алдынан эсергә. Шулай уҡ сенна үләне, әнис орлоғо, ҡандала үләне (донник), миләш емешенең эс йомшарта торған сифаттары бар, уларҙан да төрлө сәйҙәр эшләү файҙалы. Эт муйылының емештәрен түгел, ҡайырыһын ҡулланырға кәрәк, сөнки бешеп етмәгән емештәр һөйәгендә сапонин һәм амигдалин ҡаты ағыуланыуға килтереүе ихтимал. Үҫемлектән ҡайырыһын да дөрөҫ киптереү мөһим, шуға ла уны дарыуханан һатып алыу хәйерлерәк.

❖ Бик шәп эс йомшарткыс булып кишер һәм уның һуты тора. Уларҙы ҡулланғанда (яртышар балғалаҡтан да күп түгел) саҡ ҡына үҫемлек майы ҡушып ебәреү кәрәк, шул саҡта кишер составындағы А витамины яҡшыраҡ үҙләштерелә.

❖ 1 балғалаҡ ваҡ итеп туралған бәпембә тамырын 1 стакан һыу менән бешекләп, 20 минут төнәтергә һәм 45 минут буйы һыуытҡас, һөҙөп алып, ашарға 15 минут ҡалғас көнөнә 3-4 тапҡыр 1/4 стаканлап эсергә.

❖ Ваҡлап туралған 2 ҡалаҡ аҡтамыр тамырына 1 стакан һыу өҫтәп, 20 минут талғын ғына ҡайнатырға ла көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ 100-әр грамм йөҙөм, күрәгә, ҡара емеш, инжирҙы бешекләп йыуып ит турағыс аша үткәргәс, 100 грамм вазелин майы (дарыуханала һатыла), 100 грамм бал һәм сенна үләнен ҡушып болғатырға. Көн һайын кис йоҡлар алдынан балаларға 1-әр балғалаҡ, ололарға 1-әр ҡалаҡ ашарға ла, йылы сәй эсеп ҡуйырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Дуҫтарың

● Әҙәм балаһының шатлыҡлы һәм ҡайғылы ваҡыттарында таянасаҡ урыны, файҙа күрһәтеп, файҙа күрәсәк урыны, дуҫтары булырға тейеш. Шуның өсөн дуҫтарығыҙҙы йәше һәм башҡа яҡтан үҙегеҙгә тура килгән кешеләр араһынан һайлағыҙ.

● Дуҫлыҡ - күңелдәр араһында йөрөгән илсе, ауыр ваҡыттарҙа бер-беренә ярҙамлашыуға сәбәп булған нәмә, аралағы яҡшы мөнәсәбәт. Әгәр яҡшы мөнәсәбәт ике яҡтың ихласлыҡ һәм мөхәббәте бер-беренә иш булғанда тыуһа, ул даими була. Ваҡытлы файҙа күреү өсөн генә булһа, алдау була. Шуның өсөн мөхәббәтегеҙҙең ысын булыуы өсөн тырышығыҙ һәм дуҫтарығыҙҙы камил һәм яҡшы кешеләр араһынан һайлағыҙ. Дине бөтөн, аҡылы камил, нәсәбе аҫыл, фекере дөрөҫ, әҙәбе урынында булған кешеләрҙе табығыҙ. Бындай кешеләр ауырығанығыҙҙа дауа, сәләмәт булғанығыҙҙа зиннәт, мәшәҡәтле ваҡытығыҙҙа таяныс, бойоҡҡан сәғәттәрегеҙҙә рәхәтләндереүсе кеше булыр. Бындай кешеләр йыраҡҡа киткәнегеҙҙә доға ҡылыусы, яҡын торғанығыҙҙа хәлегеҙҙе белеүсе булыр, байлыҡҡа ирешһәләр, араны өҙмәҫ, ауырлыҡҡа төшһәгеҙ, айырылмаҫ. Дуҫтың ысын дуҫ булыуы һүҙҙәренән, фиғел һәм ғәмәлдәренән күренә. Улар ҙур изгелекте бәләкәй иҫәпләй, аҙ ғына изгелегегеҙҙе ҙур күрә.

● Әгәр яҡшы дуҫтарығыҙ булһа, уларҙы юғалтмағыҙ. Һеҙҙән шикәйәт итерлек кәмселек булдырмағыҙ. Уларға ысын күңелдән ҡарағыҙ. Һеҙҙе, уларҙан әхирәттә осрашыу шарты булған үлемдән башҡа, бер нәмә айырмаһын.

● Дуҫлыҡ күрһәтеүсе бөтәһе менән дә дуҫ булмағыҙ. Дошманлығы бар, тип шөбһәләнгән кешеләрҙең барыһын да дошманым тип иҫәпләмәгеҙ. Мөхәббәте саф булмаған заттар менән дуҫ булмағыҙ. Дуҫлығының дөрөҫлөгөнә шөбһәләнгән кешеләр менән дуҫ булыуҙан һис дуҫһыҙ тороу яҡшы икәнен онотмағыҙ.

● Кәрәккәндә генә вәғәҙә итеүсе кешеләргә ихлас күңелле булыуҙарын тикшереп ҡарамайынса ышанып, дуҫ булмағыҙ. Тел күп ваҡытта күңелгә ҡаршы һөйләй. Ихтимал ки, бындай кешеләр маҡсаттарына етер өсөн төрлө вәғәҙәләр бирә. Маҡсаттарына еткәс, һеҙҙең менән эштәре лә бөтә.

● Дуҫтарығыҙҙы шелтәләргә ашыҡмағыҙ, туған һәм ҡәрындаштарығыҙ менән асыуланышыуҙы еңел күрмәгеҙ. Бындай эштәрҙә сабырлы булығыҙ. Асыуланышырға ниәт иткән кешеләр менән асыуланышмай һәм араларығыҙҙы боҙмай бер-ике көн сабыр итеп тороғоҙ. Күп ваҡытта бындай ниәттең хаталы икәне асыҡлана, сабыр иткәнегеҙ өсөн үҙегеҙ шатланырһығыҙ.

● Бик ҙур сәбәптәр булмаһа, дуҫтар менән араны боҙоу әҙәпһеҙлек була. Шуның өсөн юҡ сәбәптән дуҫығыҙҙан айырылмағыҙ.

● Һәр ваҡыт хөрмәт күрһәтеп тороу, хоҡуҡтарын ихтирам итеү дуҫлыҡты нығыта. Шуның өсөн дуҫтарығыҙға һәр ваҡыт ярҙамсы һәм таяныс булығыҙ. Инсан бер үҙе аҙ булһа, дуҫтары менән күп була. Дуҫтар ауыр һәм мәшәҡәтле көндәрҙә ярҙамсы булыу өсөн кәрәк.

*ӘЙ, ЯҘМЫШ...*

**Ап-аҡ һаҡаллы, үткер ҡарашлы Григорий бабайҙы ҡалала күптәр белә. Етәкселәр ҙә килеп хәлен белешә. Ергә сүгеп барған өйҙә йәшәгән бабай йыш ҡына тупһаһында ултыра йә урамда баҫып тора. "Һауа һуларға сыҡтым", - ти ул. Ямғыр ҡойоп яуғанда ла йортона теләр-теләмәҫ кенә инеп китә. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла: "Саф һауаға сыҡтым", - тип оҙаҡ ҡына юлға төбәлеп тора.**

# ҒҮМЕР КӨҘӨҢДӨ...

## йә матурлай, йә насарлай балаларың

Алдай. Күңел кисерештәрен, йөрәк хәсрәтен йәшереп, һис ни булмағандай йылмайып, эскерһеҙ ҡарашын һиңә төбәп алдай. Балаларын көтә ул. Әбейе Анастасия менән бәпләп, яратып, өрмәгән ергә ултыртмай тәрбиәләгән улы менән ҡыҙын көтә. Улар сит илдә лә, ер сигендә лә түгел, ә Магнитогорск ҡалаһында йәшәй. Өйҙәге буяуы уңып бөтөп барған шкафҡа теҙелгән фотоларын ҡарап, улар менән һөйләшеп, балаларын көтә бабай. Күршеләре әйтеүенсә, ҡыҙы һәм улы алты йыл килгәне юҡ. Григорий бабай быны йәшерә, "Хат яҙышабыҙ, ҡуҫтәнәс, аҡса ебәреп торалар", - тип шыттыра.

Әсәләре вафат булғас, ашыҡ-бошоҡ ерләп, уны иҫләргә йыйылған туғандары менән бер өҫтәл артына ла ултырмай, ҡабаланып ҡайтып киткән улы менән ҡыҙын күптән ғәфү иткән инде ул. Өйөндә ейәндәре өсөн әҙерләп ҡуйған кәнфит-прәниктәрен урамда уйнаған балаларға таратып бөтә лә, тағы магазинға йүнәлә. Иң ҡиммәтле тәмлекәстәрҙе һайлап ала ла, тағы балаларын көтә.

Был юлы көтөүҙән, һағыштан арыған бабайҙың күңел пәрҙәһе әҙерәк асыла төштө: "Мине ерләргә киләрҙәрме икән? Бәлки, ейәнсәр донъяға килер, Анастасияға оҡшап, матур, аҡыллы булыр... Киләрҙәрме икән? Бәлки, тере саҡта күреп ҡалырмын, эйе бит?" Уның өмөт һәм ялбарыу менән тулы ҡарашын күтәрә алмай, "Киләрҙәр, киләрҙәр", - тип кенә ҡуям һәм тиҙерәк уның әргәһенән китеү яғын ҡарайым.



Күңеленә өмөт сатҡылары һалып, балалары өсөн гонаһ алғы килмәй шул. Шуға ҡарамаҫтан, Григорий бабайҙың аяныслы тормошон бәхетләләр рәтенә индергән ололар ҙа бар.

* * *

Әсмә әбей өс ул тәрбиәләп үҫтергән әсә. Бабайы вафат булған. Ул бәләкәй генә йортта улдары менән бергә йәшәй. Әзмәүерҙәй ирҙәр бер ҡайҙа ла эшләмәй. Әсәһенең пенсияһын түҙемһеҙләнеп көтөп алалар. Был аҡса кәмешкәгә китеп бөтөп тора. Әбейҙең ыҙалап үҫтергән картуфы, йәшелсәләре, тауыҡтары ла ошо ағыуға алмаштырыла. Икмәккә, тип йәшереп һалып ҡуйылған аҡса, ҡурҡытып, талап алына. "Ситтә йәшәһәләр, үҙ йүнен үҙҙәре күрһәләр ине. Был малайҙар урынына фәхишә ҡыҙҙарым булһа ла, был хәтлем этлекте, оятһыҙлыҡты күрмәҫ инем", - тип илай Әсмә әбей.

* * *

Ҡаланың ситендә урынлашҡан өйҙә икенсе бер әсә ҡыҙының эсеп ҡайтып, үҙен туҡмай башлауынан йә берәй ир эйәртеп алып ҡайтып, үҙен һыуыҡҡа ҡыуып сығарыуынан ҡурҡып ултыра. Әсәһенең пенсияны күпме алыуын белгән ҡатын уны тиненә тиклем тартып ала. Әбейҙең кәфенлеккә, ерләүгә тип йыйылған аҡсалары ла күптән кәмешкәгә китеп бөткән. Уның хәлен белгән күршетирә ҡарсыҡты ашата, мунсаға алып ҡайтып йыуындыра. Тик ул да, Әсмә әбей ҙә милиция саҡырыуҙы түгел, таныш-тоноштарына зарланырға ҡурҡа, ояла. "Ултыртып ҡуйһалар, бала бит. Хәҙер бөтә донъя боҙолған бөткән. Вафат булғас, тейешенсә ерләһәләр - булды", - ти улар.

Эйе, бала ата-әсә өсөн һәр саҡ ҡәҙерле, ғәзиз. Уның тормошо яҡшы барһа, бәхетен тапһа - булды. Ауыҙынан өҙөп биргән аҙыҡ-түлек тә, һуңғы аҡсаһы ла тик улы, ҡыҙы өсөн генә. "Ярай, беҙгә артыҡ нәмә кәрәкмәй. Өйҙә ултырған кешегә ни..." - тип, ата-әсәләр инде үҙҙәре ҡартатайөләсәй булырға йөрөгән йә булған балаларын хәстәрләй.

...Кеше мәңге йәш булып ҡала алмай. Ишегендә ҡартлыҡ шаҡығанда, күҙ алдында ата-әсәйендең бәхетле йөҙө сағылһа, һинең дә ғүмер көҙөң матур килер. Шуға күрә ғәзиз кешеләрендә йылы һүҙең, ҡарашыңдан айырмаҫҡа ине.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Ҡартайырға теләгән кеше юҡтыр ул. Шулай ҙа һәр ғүмер миҙгеленең үҙ үҙенсәлеге, үҙ шатлығы, үҙ матурлығы. Оло йәштәге кешеләр ниндәй уйҙар менән йәшәй? Ҡарт кеше үҙенең көндәрен нисек үткәрә? Ғөмүмән, ҡартлыҡ - шатлыҡмы, әллә, киреһенсә, тик хәсрәткә төрөлгәнме? Айырыуса ҡатын-ҡыҙҙар ҡартлыҡты, йәғни йөҙөндәге һәр һырҙы һиҙланыу менән ҡабул иткәнгә күрә, ошондай һорауҙар менән гүзәл зат вәкилдәренә мөрәжәғәт иттем.**

**Миңниса КИЛМӘКОВА, 68 йәштә:**

-Хаҡлы ялдамын. Пенсия аҡсаһын ваҡытында килтерәләр, шуны ай буйына еткерәм, Аллаға шөкөр. Алты балам бар. Хәҙер ейән-ейәнсәрҙәр тиҫтәнән ашып китте. Бар бәхетем - балаларҙа. Әлбиттә, һыҙланам, ауырыйым - ҡартлыҡ бит. Шул саҡта балаларың янында булһа, башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй. Дауаханаһы күп тапарға тура килә. Ҡул эшкингән саҡта бейәләй-ойоҡбаш бәйләп көн үткәрә торғайным. Хәҙер күберәк ял итергә тура килә.

**Резедә ЮЛЫЕВА, 59 йәштә:**

- Кемдең ҡартайғыһы килһен инде! Урамда берәйһе "инәй" тип өндәшһә лә ҡыйын. Үҙеңде һаман йәш тип уйлайһың, шулай хис итәһең. Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң түҙә ауыр булды. Ниңәләр, үҙемдең кәрәгем бөткән һымаҡ тойолдо. Әкренләп күнектем. Баҡса үҫтерәм, ҡош-ҡорт көтәм, балаларым ҡайтҡанын бешеренеп көтөп алам. Хәҙер ейәнсәремде ҡалдырып киткәстәр, бигерәк тә рәхәт. Уның менән китаптар уҡыйбыҙ, мәсетҡә йөрөйбөҙ. Әлбиттә, йәштәр үҙенсә йәшәй. Шулай ҙа уларға балаларынан айырылырға кәңәш итмәҫ инем. Үҙебеҙ эш тип, ҡыҙҙарыбыҙҙың үҫкәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Бәлки, тейешле тәрбиә булһа, әллә ниндәй үрҙәргә етерҙәр ине. Әлбиттә, ҡартаймай, оҙағыраҡ йәш булғы килә. Тик был тормош ҡануны бит. Шулай ҙа ҡартайғас, донъя туҡталып ҡала, тип әйтмәҫ инем. Һәр көндө шатлыҡ менән ҡаршы алам. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙемде ҡарттар иҫәбенә лә индермәйем әлегә...

**Люциә ХӘСӘНОВА, 26 йәштә:**

- Әбейҙәрҙе күреп: "Мин дә шулай булырмынмы икән?" - тип уйлап, ҡурҡып китәһең. Шулай ҙа беҙҙең быуын үндай булмаҫ, тип уйлайым. Хәҙерге өлкәндәр һуғыш михнәттәрен, аслыҡты күргән кешеләр. Ҡартлыҡты ла шатлыҡта үткәреп була. Быны өсөн йәштән сәләмәтләгендә ҡайғыртырға, күберәк аҡса эшләргә кәрәк. Хаҡлы ялдағы кеше өйҙә мал көтөп кенә ятырға тейеш түгел. Сәйәхәт итергә, ниндәйҙер махсус клубтарға йөрөргә була. Шуға күрә ҡартлығымды ҡурҡмайынса ҡаршы алырмын, тип уйлайым.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

***✓ Павел Аносов булат ҡоросон эшләүҙе нигеҙҙә яҙып ҡалдырһа ла, Булат үлгәс, башҡа ҡороссолар менән күп тәжрибәләр эшләп ҡараһа ла, Булат эшләгән ҡорос кеүек ҡоросто башҡа эшләй алмаған.***

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БУЛАТ ҠЫЛЫС ОҪТАҺЫ...

## башҡорт улы Булат булыр

Салауат һәм Пугачев яуы үтеп, ун биш - егерме йыл үткәс, Әбей батшаға Урал заводтары хужалары һәм приказчиктары өҫтөнән ялыу килеп төшә. Унда Златоуст, Һатҡы, Мейәс һәм башҡа заводтарҙа башҡорт ихтилалдарында ҡатнашҡан башҡорт, урыҫ һәм башҡа милләт кешеләре йәшеренеп, крепостнойға яҙылып эшләп йөрөйҙәр. Араларында хатта тамғалылары ла күп, тип әйтелә. Батша Екатерина Икенсе күптән дә түгел булып үткән болаларҙа завод мужиктары ниндәй урын алғандарын иҫләп, ҡәтғи бойороҡ сығара. Һәр завод эшселәренең исемлеген төҙөргә, барлыҡ шикләләрҙе тикшерергә. Әгәр хужалары батшаға ҡаршы сыҡҡандарҙы эшкә алған икән, ул саҡта уларҙың хужаларын, управляющийҙарын ҡаты язаға тарттырырға...

Был хәбәр Уралға тиҙ килеп етә. Завод эшселәренең күбеһе аҙ-маҙ ғына хаҡҡа эшләп йөрөүсе ҡасаҡтар, каторжандар булғанлыҡтан, хужалар алдына ҙур мәсьәлә килеп тыуа. Әгәр батша әмерен иғлан итһәк, барлыҡ эшселәр тау-урман араһына ҡасасаҡ, заводтар туҡтаясаҡ, күп килем юғаласаҡ. Шуға ла улар тамғаһыҙҙарға, ҡул-аяҡтары, танау-ҡолаҡтары, бармаҡтары һәм башҡа ағзалары теүәл кешеләргә айырым исемлек төҙөй. Был бик йәшерен эшләнә. Барлыҡ тамғалылар, ғәриптәр, билдәле ҡасаҡтар икенсе исемлеккә эләгә. Шуныһы билдәле: иң оҫта мастеровойҙар йә тамғалы, йә ҡолаҡһыҙ, йә тупыс булып сыға. Был тамғалы оҫталар тураһында Кәрим бабайҙың бәйетендә бик килештереп һамаҡлана ине.

Икенсе исемлектәге кешеләрҙе төндә приказчик йортона берәмләп саҡырып булғандар. Хужаларҙың ҡушыуы буйынса уларҙы бәйләп, таш һалынған тоҡҡа һалып, уйылған мәкегә, Әй йылғаһына ташлағандар...

Был шөғөл һәр төн унлаған ғәриптең, тамғалының, ғәйепһеҙҙең ғүмерен киҫкән. "Там свались!" - коротко приказывалось вознице, посвященному в секрет содержимого куля. "Знаю уж, ваша милость", - отвечал исполнитель страшного приказания. Затем живую кладь взваливали на сани и отправляли в прорубь Ая". Шулай тасуирлана был хәлдәр Г. Ф. Гудковтың "Из истории южноуральских горных заводов XVIII-XIX веков" китабында. Әммә был вәхшилеккә Булат эләкмәгән булырға тейеш, әгәр был ваҡытта тере булһа. Сөнки ул аҙмы-күпме П. П. Аносов менән бергә эшләп ҡалған булырға тейеш.

П. П. Аносовтың яҙыуынса, 1820-1821 йылдарҙа Алтынтамаҡ заводтары йыл һайын утыҙ мең ҡылыс, хәнйәр сығарған. Тимәк, Булаттың алымдарын ул йылдарҙа киң ҡулланғандар. Булат был ваҡытта тере булмағандыр. Булатты ерләүҙә урыҫтар ҙа, боронғо ҡыпсаҡ украиндар ҙа, әле бәләкәй дәрәжәләге Аносов та ҡатнашып, Табын ҡәбиләһенең боронғо йолаһы буйынса, ул тау башына текә түшлеккә ерләнгән. Күрәһең, Булат бик ҙур ихтирамға лайыҡ булған.

Рәсәй Фәндәр академияһының Рус теле институты сығарған "Толковый словарь русского языка" (авторҙары С. И. Ожегов һәм Н. Ю. Шведова) китабында булат һүҙенә былай тип аңлатма бирелә: "Старинная твердая и упругая, с узорчатой поверхностью сталь для клинков. Стальной клинок булатный". Башҡаса бер аңлатма ла юҡ.

Ғәҙәттә, барлыҡ нәмәне лә урыҫтыҡы, тип дәғүәләшкән урыҫ тарихсылары булат ҡоросон урыҫтыҡы тип әйтә алмай! Икенсенән, тарих буйынса Алтынтамаҡ ерҙәренә империя тарафынан сит өлкәләрҙән, хатта Германиянан һәр төрлө оҫталар, һөнәрмәндәр, белгестәр килтерелеүе һәм был кешеләрҙең крепостнойлыҡта булыуы тураһында китаптарҙа яҙыла. Тимәк, Булаттың Германияла әсирлектә булып, Рәсәйгә немец оҫталары менән килеүе ихтимал. Әгәр улай түгел икән, әсир Булаттың башҡа металл эшкәртеүсе оҫталар менән урыҫ казематтарынан Алтынтамаҡ заводтарына килтерелеүе лә мөмкин.

Нисек кенә булмаһын, Алтынтамаҡ заводтарында Павел Петрович Аносовҡа булат ҡоросон эшләү серҙәрен яҙҙырыусы башҡорт тимерсеһе Булат була! Иван Михайлович Кочубейҙың һөйләүе буйынса, "булат ҡоросо" тигән ҡорос элек, ғөмүмән, булмаған. Бик ҡаты, һығылмалы, бөгөлмәле ҡорос эшләү алымын Булат үҙендә ҙур сер итеп һаҡлаған. Булат Ғәрәбстан, Сирия, Фарсы, Көнбайыш Европа илдәрендә йөрөгәндә шул серҙәрҙе белгән һәм уны Алтынтамаҡ заводтарында үҙ алымдарын ҡулланып эшләгәндер, тигән фараздамын. Павел Аносов тәүҙә бик бәләкәй чинда шихтмейстер булып эшләгән. Хеҙмәтенең тәүге көндәренән үк ҡылыс һуғыу тимерлегендә була. Рәсәй империяһынның баҫҡынсы һуғыштары киңәйгәндән-киңәйә барыуы күп ҡорал талап иткән. Ҡоралға ҙур мохтажлыҡ тыуғас, Аносов етәкселек иткән ҡылыс һуғыу тимерлеге фабрикаға әйләндерелә. Күрәһең, шул осорҙа ул Булат менән осрашҡандыр, ә бәлки, дуҫлашҡандыр. Юғиһә, Булат уға ҡорос эшләү серҙәрен асмаҫ, Павел Аносов был ҡоросто "булат ҡорос" тип атап, документтар төҙөмәҫ ине. Үкенес, булат ҡоросоноң серҙәрен Рәсәйҙә, рәсми тарихта Павел Аносов асҡан, тигән фекер нығынған. Ә ысынбарлыҡта Аносов былай ҡорос эшләү алымдарын Булаттан отоп яҙып ҡалдырған һәм яҙмаларында ул ҡоросҡа "булат ҡоросо" тигән исем биргән.

Иван ағайҙың һөйләүе буйынса, булат ҡоросо кеүек ҡаты ҡоросто "Дамаск ҡоросо" тигән исем аҫтында Рәсәйҙең ҡайһылыр заводында бер немец белгесе эшләп ҡараған. Әммә ул ҙур билдәлелек һәм ҡулланылыш таба алмай. Күрәһең, уның сифаты булат ҡорос кеүек булмағандыр. Немец белгесе эшләгән ҡорос сифаты яғынан булат ҡоросонан түбән була. Бөгөлмәлелеге, һығылмалылығы, ҡатылығы, үткерлеге менән Рәсәйҙә булат ҡоросонан эшләнгән ҡылыстың, хәнйәрҙең тиңе булмаған. Көнсығыш белгестәре уны Тәмәскә (Дамаск) ҡоросо менән генә тиңләй алған. Булат ҡоросонан эшләнгән шәшке һәм тартым ҡылысы менән күбәләк ҡанаты йоҡалығындағы ефәк туҡыманы һауаға ташлағандар ҙа, ул осҡанда бер тартымда урталай өҙә сапҡандар. Ул ҡылысҡа ла, тартымсыға ла ҙур баһа булған! Павел Аносов булат ҡоросон эшләүҙе нигеҙҙә яҙып ҡалдырһа ла, Булат үлгәс, башҡа ҡороссолар менән күп тәжрибәләр эшләп ҡараһа ла, Булат эшләгән ҡорос кеүек ҡоросто башҡа эшләй алмаған. Аносов ҡороссолары ул өйрәткән алымдарҙы ҡулланһа ла, нимәләрҙендер эшләп еткерелмәүе арҡаһында ҡылыстың йә үткерлеге, йә бөгөлмә-һығылмалылығы Булаттыҡыса камил булмаған.

***Алтынтамаҡ заводтарында Павел Петрович Аносовҡа булат ҡоросон эшләү серҙәрен яҙҙырыусы башҡорт тимерсеһе Булат була! Иван Михайлович Кочубейҙың һөйләүе буйынса, "булат ҡоросо" тигән ҡорос элек, ғөмүмән, булмаған. Бик ҡаты, һығылмалы, бөгөлмәле ҡорос эшләү алымын Булат үҙендә ҙур сер итеп һаҡлаған.***

Шулай итеп, булат ҡоросоноң төп серен Булат үҙе менән мәңгелеккә алып киткән. Булат йәйҙең бик эҫе көнөндә тимерлегендә үлгән. Үлгән йылы билдәһеҙ. Завод хужаһы эшселәрҙе эштәренән айырып, Булатты ерләр өсөн ваҡыт бирмәгән. Өс көн Булат тимерлектә ятҡан. Яҡын-тирәлә мосолман ҡәберлеге булмаған, ә башҡорттар уны крепостнойҙар ҡәберенә күмергә ризалашмаған. Завод хужаһы шуға үсегеп, ерләргә ваҡыт бирмәгән дә инде. "...Там работающие металлурги, мой прапрадед, сам Аносов, ночью, тайком, увезли Булата на телеге и похоронили в заранее приготовленной могиле на вершине одной из высот, не то на Косотуре (Ҡыятүр), не то на мысе Уренга (Өрәңге) во время восхода солнца. Это, видимо, там, где сейчас проходит асфальтовая магистраль Транссибири.

Даже на камне арабскими буквами написали его имя. На похоронах участвовал сам Аносов, за что получил величайшее порицание от архимандрита Златоустовского. Мой прадед еще знал могилу Булата. Они ходили туда в день праздника "Святого духа", тип һөйләгән ине Иван Кочубей. Шул тауҙарҙың күркәм, иң күренмәле урынына Булатҡа булат ҡоросонан бик ҙур һәйкәл ҡуяһы ине лә, ул һәйкәлгә "Слава могучему башкиру Булату - создателю булатной стали! Нижайший поклон П. П. Аносову, описавшему сие", - тип яҙаһы ине.

Иҫке ҡағыҙҙарҙы ҡарап ултыра торғас, Иван Кочубейҙың һөйләгәндәрен өҙөк-һырыҡ яҙған яҙмалары килеп сыҡты. Ул булат ҡоросон эшләү алымдарын аҙаҡтан теркәгән ҡағыҙ биттәре булып сыҡты. Бик көсәнеп иҫләй торғас, түбәндәгеләрҙе тергеҙә алдым.

Минең дә алтынсы быуын ҡарттайым Ҡужәхмәт үҙенең Ҡорама ауылында үрге яҡ аймаҡтың көнсығыш үрлегендә йәшерен тимерлек тота. Шунда бысаҡ, һөңгө, ҡылыс, һуҡаға төрән, тырма теше һуҡҡан, өҙәңге, эйәр дуғаһы, йүгәнгә ауыҙлыҡ, ат дағаһы эшләгән. Батша хөкүмәте башҡорттарға тимерлек тоторға ҡәтғи тыйғанлыҡтан, старшина, губерна хеҙмәтсеһе, йә булмаһа, берәй шымсы килмәйме, тип тимерлек түбәһе өҫтөндә ҡарауылда һәр саҡ улы Ильяс ултырыр булған. Ҡужәхмәт ҡарттайҙың бысаҡтары үткерлеге менән халыҡта дан ҡаҙанған. Бысаҡ һуғыр өсөн күмерҙе ул айырым оҫталарҙан, ҡылыс күмере һүндереүселәрҙән, Ҡуҙай, Аҙнаш ауылдарынан Аҙнабай, Ҡунаҡбай, Мөхәмәтшаһ тигән оҫталарҙан килтергән, тип һөйләгәне хәтеремдә атайымдың. Беҙҙә, халыҡ телендә, күмер яндырыусылар тип түгел, ә күмер һүндереүселәр, тип һөйләйҙәр. Сөнки күмер янғас, уны һүндерер өсөн тишеген ҡаплау ваҡыты бик мөһим булған. Мәғдәндән тимер иретеү өсөн ҡайын күмере яраһа ла, тимерҙән ҡорос һуғыу өсөн ҡарағас күмерен ҡулланғандар. Ул күмер тик айырым бер кимәлгә тиклем генә яндырылып һүндерелгән. Күмер яндырған соҡорҙо, кәҫле өйөмдө ҡутарғас, ҡул менән берәмләп сүпләп кенә алыр булғандар. Минең аңлауымса, ҡарағас ағасының янмаһы (күмере) тулыһынса үтәнән-үтә йомшарғансы янып бөтөргә тейеш түгел, ә күмерҙең уртаһы янып, ағастың структураһы боҙолоп бөтмәҫкә тейеш. Тимер иретмәһенән ҡорос ҡойғанда шул күмер һәм уға өҫтәп ҡайын ағасының ваҡ сыбығын ҡулланғандар.

Тимәк, ҡорос иретеүҙең бер алымы күмерҙең айырым төрөндә, сифатында булған.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

**(Дауамы. Башы 44-47-се һандарҙа).**

*БЫЛ - ГОНАҺ!*



## СИХЫРСЫЛЫҠ

**Сихырсының иманһыҙ булыуына шик юҡ. Ҡөрьәндә әйтелә: "Шайтандар кафыр булды. Улар Һарут менән Марут исемле ике фәрештәгә индерелгән сихырҙарҙы Бабил илендәге кешеләргә өйрәтте" (Әл-Баҡара, 102). Шайтан, кешеләрҙе сихырсылыҡҡа өйрәтеп, бер генә маҡсатты күҙ уңында тота - Аллаһтан баш тарттырыуға өлгәшеү.**

Ҡөрьән-Кәримдә Харут һәм Марут фәрештәләре тураһында былай тиелә: "Сөләймәндең хөкөмдарлығы ваҡытында улар шайтандарҙың ялғанына эйәрҙе. Сөләймән кафыр түгел ине. Әммә шайтандар кафыр булды. Сөнки улар Һарут менән Марут исемле ике фәрештәгә индерелгән сихырҙарҙы Бабил илендәге кешеләргә өйрәтте. Гәрсә, был ике фәрештә бөтөн кешегә: "Беҙ бары тик кешеләрҙе вәсүәсәгә һалып һынау өсөн төшөрөлдөк. Һаҡ булығыҙ, яңылышып, беҙҙән сихыр өйрәнеп, кафыр була күрмәгеҙ", - тип киҫәтеүҙән башҡа һис кемгә сихыр өйрәтмәне. Кешеләр ошо ике фәрештәнән ир менән ҡатын араһын боҙа торған сихырҙар өйрәнде" (әл-Баҡара, 102).

Беҙҙең көндәрҙә лә ошо юл буйлап барыусы кешеләрҙе күрергә мөмкин. Үҙҙәре шөғөлләнгән нәмәне улар тик харам тип кенә уйлай һәм бының ысын ширк икәнен аңламай. Улар алхимияны өйрәнергә һәм ҡулланырға тырыша. Кемдәр туйын боҙор өсөн, йә ир ҡатынын яратһын өсөн сихырлайҙар. Кемдер берәүҙән икенсене яраттырырға тырыша. Былар бөтәһе лә ширк һәм аҙашыуға инә.

Сихырсылыҡ өсөн язалауҙың киҫкен сараһы - үлем, сөнки сихырсылыҡ - ул Аллаһтан баш тартыу. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) һәләкәтле ете гонаһты һанағанда сихырсылыҡты ла иҫкә ала.

Кеше үҙенең Хужаһынан - Аллаһтан ҡурҡырға тейеш һәм уның был донъялағы, шулай уҡ киләсәк тормошон боҙған дөрөҫ булмаған юлдан бармаҫҡа тейеш. Аллаһ илсеһенең былай тип әйткәне еткерелә: "Сихырсыға яза - ҡылыс менән һуғыу".

Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Өс төркөм кешеләр ожмахҡа инмәҫ: эскесе, туғанлыҡ ептәрен өҙөүсе һәм сихырсы һүҙҙәренә ышанған кеше", - тигән. Шулай уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) былай тип әйткәне еткерелә: "Ысынында, әпсен-төпсөн һүҙҙәре, бетеүҙәр тағыу һәм сихырлауҙар - ширк".

***✓ Тик башҡорттар ғына ҡатнашҡан туйҙарҙа ла был күренеш ғәҙәтигә әүерелеп бара. Бар ғәм алдында ике йәш кешене үбештереү, шунан һуң шулар өсөн төп күтәреп эсеү - ошонан да ҙурыраҡ мәғәнәһеҙлек бармы икән?***



**Үҙенсәлекле фекер йөрөткән кешенең йорто ла башҡаларҙыҡына оҡшамаған була, тиҙәр. Биология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты профессоры, кафедра мөдире Сәфәрғәли Искәндәр улы Йәнтүриндың йортонда, мәҫәлән, тарихи музей бар. Йорттарының эске биҙәлешендәге үҙенсәлекле зауыҡ та был йортта үҙенсәлекле фекерле ижад кешеләре йәшәүе хаҡында һөйләй. Тағы ла уларҙың йортондағы иң ҙур байлыҡ - ихласлыҡ. Ә ихласлыҡ бар ергә Аллаһы Тәғәлә үҙенең нурын һибеп тора, тиҙәр. Йорт хужалары Сәфәрғәли ағай һәм Вилүрә еңгәй менән сәй янындағы әңгәмәбеҙ ҙә үҙенән-үҙе ялғанып китте. Әйткәндәй, йорт хужалары икеһе лә ошо яҡта, йәғни Баймаҡ районында, ағай - Татлыбай ауылында, еңгәй Ишбирҙелә тыуып үҫкән.**

# "Сибайҙарға ҡайтып, ирешер инем,"



**▸ Элек ҡыҙ йәрәшкәндә "бер һыу буйы" принципы һаҡланған. Был юҡҡа ғына булмаған, сөнки бер һыуҙы эсеп үҫкән кешеләрҙә берләштереүсе сифаттар ғаилә ныҡлығына булышлыҡ иткән. Фәндә лә был хәлгә аңлатма табырға була. Әйтәйек, кеше организмының 70-80 проценты һыуҙан торғанын иҫәпкә алғанда, мәғлүмәт сығанағы булған һыуҙың кешеләрҙә бер уйлы, бер маҡсатлы иткәнен аңлауы ҡыйын түгел. Ошо принциптан сығып ҡарағанда, һеҙҙең бер район кешеләре булыуығыҙ үҙ-ара мөнәсәбәтегеҙҙә ниндәй роль уйнаны?**

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Ауылдан тәүге тапҡыр ҡалаға килгәс, яҡташтарыңа күңел үҙенән-үҙе тартыла. Ул саҡта һәр бер яҡташың яҡын туғаның кеүек була бит инде. Мин Башҡорт дәүләт педагогия институтының математика факультетында уҡыным. Сәфәрғәли менән беҙҙең яҡтар күрше генә урынлашҡайны. Уның менән саңғы ярышына китеп барғанда таныштыҡ. Шул саҡта ул минән: "Һеҙ беҙҙең яҡтанмы ул?" - тип һораны. "Эйе, беҙ һеҙҙең яҡтан", - тип яуап бирҙем. Һуңынан тимер юл вокзалы янындағы яҡташта үткән кисәлә Сәфәрғәли мине вальсҡа саҡырҙы.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Ул саҡта Баймаҡ районынан Өфөлә барлығы 45 студент уҡый инек. Берҙәм булғасыбыҙ, һан буйынса әҙ генә көйө лә бик көслө ойошманы тәшкил иттек. Әле яңыраҡ үҙебеҙҙең Сибай институтында уҡыған Бөрйән егетенән һорай ҡуйҙым. Баҡтиһәң, уларҙың ауылынан ғына Сибайҙа һәм Өфөлә 62 студент уҡый икән. Был бер ниндәй сағыштырыуға бармай. Улай булғас, бер районнан нисә студент килеп сыға инде? Беҙ 30 йыл элек бер районнан Өфөлә шунсама кеше уҡыһаҡ, хәҙер юғары һәм махсус уҡыу йорттарында белем алыуға беҙҙең ҡалыҡҡа юл киңерәк асылған, тимәк.

Яҡташ студенттарҙың иң ойошҡаны баймаҡтар була торғайны. Мәҫәлән, Салауат һәйкәле янындағы бейеүҙе беҙ башлап ебәрҙек. Әлегеләй хәтеремдә, 1967 йылда беҙ район студенттары менән һабантуй үткәрҙек һәм шунда иртәгәнән Салауат һәйкәленә сығырға һүҙ ҡуйыштыҡ. 9 майҙа булды был хәл. Шул көндән башлап Салауат һәйкәле янында "пятачок" тип аталған ҡурайға бейеүҙәр башланды. Хәҙер был байрам Конгресс-холда дауам итә, тиҙәр.

"Бер һыу буйы" принцибына килгәндә, бер райондағы мөхиттә тәрбиәләнеү, бер үк тәбиғәтте күреп үҫеү әҙһеҙ үтмәгәндер, тип уйлайым. Һуңынан белеүебеҙсә, беҙ Вилүрә менән бер үк мәктәптә, Темәс интернатында уҡыған булып сыҡтыҡ. Ул минән өс класс түбән уҡыған. Шуныһы ҡыҙыҡ: бер үк мәктәптә бер үк ваҡытта уҡыһаҡ та, баш ҡалаға барып таныштыҡ.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Бер үк һыуҙы эсеп үҫмәһәк тә, "ивановса", бер үк һыу менән ҡойонабыҙ хәҙер. Алдағы йылдың ғинуар айында минең һыу менән ҡойонғанға 20 йыл тула. Сәфәрғәли 10 йыл ҡойона. Ул минең ҡойонғанды 10 йыл буйына күҙәтеп йөрөнө лә, ҡойона башланы. Мин иртәнсәк торам да, яңы көн бүләк иткәне өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт әйтеп, гонаһтарым өсөн ғәфү үтенеп, иремә, балаларыма һаулыҡ, эштәрендә уңыш теләп, ике биҙрә һыуыҡ һыу менән ҡойонам. Һәр көнөм шулай башлана. Ҡойона башлағас, һаулығым яҡшырҙы, проблемаларым һыу менән йыуылып төшкәндәй булды.

**▸ Туйығыҙ нисек үтте, иҫләйһегеҙме?**

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Иҫләйбеҙ, боронғоса, йолалары урынерenә еткерелеп, өс көн барҙы ул. Өс көн буйы ҡойоп ямғыр яуҙы. Батҡаҡлы көн булды. Загсҡа пар атта күрше Крепостной Йылайырға барҙыҡ. Барып еткәнсе, ҡайтып еткәнсе, аттарҙың көрәгән биреп ҡыуҙылар. "Нишләп улай ҡыуаһығыҙ?" - тип күсерҙәрҙән һорағайныҡ: "Ошо көнөгөҙ иҫегеҙҙә ҡалһын өсөн ҡыуабыҙ", - тип яуап бирҙеләр. Ысынлап та, был көн иҫебеҙҙә ҡалды, ап-аҡ күлдәктәребеҙ ҡап-ҡараға әйләнде.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Ул саҡтарҙың туйҙары хәҙергеһенән ныҡ айырыла ине. Беҙҙә туйҙың башында индереп, бер мөйөшкә ултырттылар ҙа, онотолар. Артабан туйҙағыларға беҙ кәрәкмәнек. Хәҙер генә ул, кейәү менән кәләште уртаға ултыртып ҡуялар ҙа, бер туҡтауһыҙ "горько" ҡысҡырып, үбештерәләр. Тик башҡорттар ғына ҡатнашҡан туйҙарҙа ла был күренеш ғәҙәтигә әүерелеп бара. Бар ғәм алдында ике йәш кешене үбештереү, рисуай итеү, шунан һуң шулар өсөн төп күтәреп эсеү - ошонан да ҙурыраҡ мәғәнәһеҙлек бармы икән донъяла? Инсафлылыҡ, нәзәкәтлек тормошобоҙҙа бик дефицит күренешкә әүерелеп бара һәм ул туйҙарҙа уҡ башлана. Ә ул саҡтағы туйҙарҙа үбешеп ҡара, үбешмәй ҙә ни, хатта кәләш менән берберебеҙгә ҡарашырға оялышып ултырҙыҡ.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Үбешеү генә түгел, ул ваҡытта өлкәндәр араһында йәш кешегә мәжлестә ултырыуы, ғөмүмән, оло уңайһыҙланыу тойғоһо тыуҙыра торғайны. Мин үҙебеҙҙең туйҙа ныҡ уңайһыҙланып ултырғанымды хәтерләйем. Мәжлестә әҙ генә булдыҡ та, икенсе йортҡа сығып, туй бөткәнсе шунда ултырҙыҡ. Тегендә барған хәлваҡиғаларға бөтөнләй хәбәрҙар түгелбеҙ.

**▸ Өфө халҡы Сәфәрғәли ағайҙың "Аҡ тирмә"лә өҙҙөрөп ҡурай тартҡанын, еңгәйҙең талпынып бейегәнен әле лә хәтерләй. Һүҙ юҡ, ҡатын кеше иренең ҡурайына бейергә тейеш, хатта бурыслы ла. Ә быйна, шартына ҡарап, ағай еңгәйҙең "ҡумыҙына" тыпырҙатып алғаны бармы?**

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Тураһын әйтәм: уның яңылыш ҡына бейеүе мөмкин. Ә былай уны минең "ҡумыҙға" бейетеп булмай.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Ҡатын-ҡыҙҙың күңелен уйлаһаң, фекерен һанға һуҡһаң, бейемәһәң дә, бер-ике тапҡыр тыпырлатҡан булып ҡыланаһың инде...

**▸ Һеҙҙең тормоштоң ике осорон бүләбеҙ: Өфө һәм Сибай осорҙары. Өфөнө яулау, унда үҙеңде раҫлау еңел түгел беҙҙең халыҡ вәкилдәренә. Һеҙ Өфөнө яулағандан һуң, ныҡҡа арҡа терәгәс, кире Сибайға ҡайтыуығыҙҙы сигенеү тип ҡабул итмәнегеҙме?**

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Өфө тормошонда, әлбиттә, йәшәүе ҡыҙыҡ, уның төрлө мөмкинлектәре күп. Икенсе яҡтан, эске тауышың барыбер тыуған яҡты көҫәй. Ғөмүмән, баш ҡалаға килгән һәр кешелә ҡасан да булһа тыуған яҡта ғүмер һөрөү хыялы йәшәй. Беҙ ана шул хыялға ысынбарлыҡ күҙлегенән ҡарай алдыҡ, минеңсә.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Беҙ бит тәүҙә институтты тамамлағандан һуң Сибайға ҡайтҡайныҡ. Йыл ярым мәктәптә эшләп алдыҡ. Өфөгә китер алдынан Сәфәрғәли: "Алла бойорһа, 15-20 йылдан Сибайҙа институт асыласаҡ, шул саҡта беҙ бында кире ҡайтырбыҙ, беҙгә үҙебеҙҙең төбәктең балаларын уҡытырға кәрәк", - тигәйне. Мин ул саҡта рәхәтләнеп көлгәйнем. Ә Сәфәрғәлинең һүҙҙәре күрәҙәсенеке кеүек ысынбарлыҡҡа тура килде һәм беҙ кире Сибайға ҡайттыҡ.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Сибайҙа эшләгәндә бер комсомол конференцияһында, беҙҙең төбәк йәштәренең Өфөгә уҡырға бара алмауы сәбәпле, Сибайҙа институт асырға кәрәк, тип сығыш яһағайным. Ул саҡта комсомол секретары Сәғәҙәт Хәлимов ине. Уға был сығышты үткәргән өсөн ҡаты шелтә биргәндәр. Шундай замандар булды бит инде, ләкин ул идея тормошҡа ашты. Беҙ Сибайға ҡайттыҡ. Фәнни тикшеренеүҙәр өсөн Сибайҙа икенсе һулыш асылды. Өфөлә был мөмкинселек самалы ине. Сибайға ҡайтып, институтта биология факультеты асып ебәреүгә, перспективалы егеттәрҙе эшкә саҡырып алып килеүгә, үҙебеҙҙең яҡтың егеттәрен һәм ҡыҙҙарын фән кандидаты, докторы кимәленә үҫтереүгә бәйле ине ул икенсе һулыш.

Баш ҡаланы һағыныуға килгәндә, кисереш түбәндәгесә: "Сибай-Өфө" поезына ултырып, Белорет районының Ғәбдүк ауылы янындағы тоннелде үтһәк, үҙебеҙҙә - Өфө кешеһе, кире килгәндә шул уҡ тоннелде үтһәк, Сибай кешеһе итеп тоябыҙ хәҙер.

**▸ Сибайҙың бер яҡ осонан икенсе осона 15 минутта йәйәү атлап сығырға була. Мәғлүмәти-мәҙәни мөхит тарлығын тойманығыҙмы?**

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Хәҙер Сибайҙа институт, аграр университеттың филиалы, үҙебеҙҙең Фәндәр Академияһының филиалы, 2 театр, филармония һ.б. бар. Ошо уҡыу йорттарына йыйылған уҡытыусылар һәм студенттар ҡалала яңы типтағы башҡорт интеллигенцияһы ҡатламын барлыҡҡа килтерҙе лә инде. Беҙ аралашып йәшәйбеҙ, ҡышҡыһын аҙнаһына ике тапҡыр спортзалда волейбол уйнайбыҙ, йәйгеһен Ҡыҙыл йылғаһы, Талҡаҫ күле, Ирәндек тауҙарына сығып китәбеҙ.

✔ ***Минеңсә, ғаиләлә баланы тәрбиәләүҙең иң яҡшы юлы - атай культын булдырыу һәм шул культты һаҡлау. Был йәһәттән ирем һәр яҡлап та өлгөлө булды.***



# ДОКТОР БУЛҺАМ,
## Вилүрәм, моратҡа...”

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Беҙ, Сибайҙағы башҡорттар, үҙ балаларыбыҙҙы индивидуаль күҙ алдында үҫтерә алыу мөмкинлегенә эйәбеҙ. Һәр бер баланың, ғаиләһендәге хәлдәрен белеп торабыҙ, һәр баланы контролдә тотабыҙ. Өфө кеүек ҙур ҡалала был мөмкин түгел.

▸ **Берәүгә лә сер түгел: башлыса башҡорт техник интеллигенция йәшәгән Сибайҙа 80-се йылдарға тиклем бороңғо феодаль ҡылыҡтар хас булды. Шундай күренештәр менән осрашҡанығыҙ булдымы?**

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Мәсьәлә бында бик дөрөҫ ҡуйыла. Беҙ Сибайға килгәс тә, милли тормошобоҙҙо биҙәмәгән бындай күренештәр менән осраштыҡ, әммә ул мөхиттән ситтә торорға тырыштыҡ. Ундай ҡатламға ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ, һүҙ күтәрә белмәү, бала кеүек үсегеү, ҡунаҡ саҡырыу менән мауығып китеү сифаттары хас.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Беҙ күберәк коллегалар менән аралаштыҡ. Беҙҙә эштән һуң балалары менән спорт залдарына, художестволы үҙешмәкәр түңәрәктәренә йөрөгән ғаиләләр күбәйҙе. Әйтәйек, улар кис "Йәштәр үҙәге"нә баралар. Ире - хорҙа йырлай, ҡатыны ҡумыҙ, балалары бейеү түңәрәктәренә йөрөй. Аҙаҡтан улар бер-береһен көтөшөп, өйҙәренә ҡайтып китәләр. Мәҫәлән, беҙ Өфөлә күпме йәшәп тә, бындайҙы күргәнебеҙ булманы. Балалары үҙәккә үҙҙәре үк ынтылып торғас, ата-әсәләрҙең балаларын унда алып бармай хәле юҡ.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Был күренеште ҡала башҡорто ғаиләһенең телевизорҙан айырылған яңы идеаль ғаилә формаһы тип тә атарға була хатта. Хәҙер ҙур спортзалдары булған ауыл мәктәптәре, мәҙәниәт үҙәктәре бар. Шул уҡ сараны ауылдарҙа ла ойошторорға тәҡдим итер инем.

Ҡалала формалашҡан яңы башҡорт общинаһы һәр йәһәттән өлгөлө, бында бер-береһе, дөйөм маҡсат өсөн яуаплылыҡ тойғоһо үҙ принцибы итеп алынған. Бында, бәлки, ҡаланың ҙур булмауы ла роль уйнайҙыр. Ни өсөн тигәндә, барыһы ла күҙ алдында. Бер тапҡыр ғына сайҡала-сайҡала урамдан үтеп ҡара! Хәҙер көлкөгә ҡаласаҡһың һәм абруйыңдың шкалаһы шунда уҡ 0-гә тиклем төшәсәк. Был бәләкәй ҡаланың ҙур ҡаланан иң төп айырмаһылыр.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Сағыштырыр өсөн Рәсәйҙе алайыҡ. Шул тиклем ҙур ил, бер осонан икенсе осона барып етерлек түгел. Шуға күрә тәртип тә юҡ.

▸ **Үҙегеҙҙең атай-әсәйегеҙҙең ниндәй сифаттарын үҙләштерҙегеҙ? Ә үҙ балаларығыҙҙы тәрбиәләү мәсьәләһендә демократмы, либералмы, авторитарисмы, әллә...**

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Атай-әсәйҙәребеҙҙең бик күп файҙалы яҡтарын үҙебеҙгә алдыҡ. Мәҫәлән, баланы барыбер тыйырға кәрәк. Икмәктең ҡәҙерен белергә кәрәк. Шашырға ярамай йәки башҡаларҙы ихтирам итергә кәрәк, кешегә ауыр һүҙ әйтергә ярамай. Икенсенән, мин ҡайҙа йөрөһәм дә, балаларымды үҙем менән алып йөрөнөм. Өфөлә уларҙы концертҡа алып бара инек. Сәскә тотторабыҙ ҙа, оҡшаған артистарын билдәләп, сығып сәскә бүләк итергә ҡуша инек. Фәндәр Академияһында "Ҡобайыр" ансамбле була торғайны. Шунда ла ҡатнашып йөрөнөләр. Урал улым үҙем менән бергә һәр ваҡыт ҡурайҙа уйнаны. Бер мәл Уралды Ҡаҙағстанға фестивалгә алып барҙым. Ҡаҙаҡтар уға сат йәбеште. "Беҙҙә ҡал, ҡаҙаҡ ҡыҙына өйләндерәбеҙ, фатир алып бирәбеҙ", - тиҙәр. Уны урлап алып ҡалмаһындар өсөн бикләп ҡалдырырға тура килде. Гөлнәзирә ҡыҙымды Мәскәүгә, Ленинградҡа, Тольяттиға алып барҙым. Балаға: "Һин шулай бул, былай бул", - тип тәрбиәләүгә ҡарағанда, үҙеңдең өлгөңдә үҫтереүҙән дә яҡшы ысул юҡтыр ул, тип уйлайым.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Минең әсәйем уҡытыусы, атайым ҡул оҫтаһы булды. Улар беҙҙе китапса, барыһы ла дөрөҫ һәм яҡшы булырға тейеш, тип тәрбиәләне. Улар беҙҙе яратып-ҡосаҡлап-һөйөп тәрбиәләмәне. Баланы асыҡ-ярыҡ һөйөргә, иркәләргә ярамағанлығын мин уларҙан өйрәндем. Үҙ балаларыбыҙҙы режимға өйрәттек. Сәғәт туғыҙ булдымы, йоҡларға һала инек. Быны өсөн хәҙер балаларыбыҙ беҙгә рәхмәт әйтә. Улыбыҙ көн һайын башҡара торған эштәрен пунктлап, дәфтәренә яҙып барҙы. Йөрөгән ҡыҙы менән осрашыуҙы ла ул 4-се пункт итеп яҙа ине, тимәк, уҡыуҙы һәм башҡа файҙалы эштәрҙе барыһынан өҫтөн ҡуйғанын белдерә ине. Аспирантурала уҡыған ҡыҙыбыҙ Айһылыу көндәлек эштәрен яҙып бара, тик ул ваҡыт еткерә алмай.

Ҡайһы саҡ аталары балаларыбыҙға ҡатыраҡ ҡағыла башлаһа, мин өҫтәлдең аҫтынан ғына аяғына баҫа торғайным. Миненсә, ғаиләлә баланы тәрбиәләүҙең иң яҡшы юлы - атай культын булдырыу һәм шул культты һаҡлау. Был йәһәттән ирем һәр яҡлап та өлгөлө булды. Балам яҡшы тәрбиә алһын, тигән әсә, ире матур өлгөнән ҡайтышыраҡ булһа ла, яҡшы атай образын уйлап сығарып булһа ла, шуны файҙаланырға бурыслы.

▸ **Ғүмерегеҙҙең ниндәйҙер һығымталар яһай торған миҙгеленә еттек, тип уйлайһығыҙмы? Етһәгеҙ, ниндәй һығымталар яһайһығыҙ? Әйтәйек, яңынан йәшәргә тура килһә, икенсе төрлөрәк йәшәр инем, тигән уйҙар биләмәйме һеҙҙе?**

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Миндә үҙ-үҙемә ышаныу тойғоһо көслө булғас, яңынан йәшәргә тура килһә, ошолай уҡ булыр ине, тип уйлайым. 40 йыл йәшәгән ҡатынымдың образы миңә шул тиклем һеңгән һәм мин ысын ҡатын кеше Вилүрә кеүек булырға тейештер, тигән һығымта яһайым.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Мин икенсе кешене ирем итеп күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Берҙән-бер үкенесем бар: нишләп балаларҙы күберәк табып ҡалманым икән?

▸ **Сәфәрғәли Йәнтүрин исем-шәрифе яңғырау менән беҙ иң тәүҙә биология фәнен, "Аҡ тирмә" клубын һәм ҡурайҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Һеҙҙең ғаиләлә ҡурай ниндәй урынды биләй?**

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Әле Өфөлә йәшәгән ейәнем төрлө музыка ҡоралдарында уйнап ҡараны. Флейтала ла, саксофонда ла, торбала ла, тубала ла, тағы әллә ниндәй музыка ҡоралдарында ла. Шунан бер ваҡыт уларҙы филармонияға ҡурай-шоуға алып барҙым. Шунан ҡайтҡас, теге ҡурайға күсте. Тәләт ейәнемдең йөрөгәндә, бактиһән, үҙемдеке кеүек ҡурай булған икән дә. Училищеға барып, дәрестәр ҙә ала, нота грамотаһын үҙләштерә.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Айһылыуыбыҙ бәләкәй сағында илаһа, бәүетмәнек, ҡурай уйнай ҙа ҡуя торғайныҡ. Ҡорһаҡта саҡта уҡ ҡурай тыңлағанға күрәлер инде. Ғөмүмән, аталары эштән ҡайтһа, һәр ваҡыт ҡурай уйнаны, уның уйнағанына балаларыбыҙ бейеп йөрөй торғайны. Ҡыҫҡаһы, балаларыбыҙҙы тәрбиәләү өсөн ҡурай беҙгә ныҡ ярҙам итте. 1991 йылда японлар беҙҙең ғаилә хаҡында фильм да төшөрҙө. Унда Урал улыбыҙ Салауат һәйкәле янында, атаһы ауылы янында тороп ҡурай уйнанылар һәм икеһен бергә яңғыраттылар. Шул тиклем синхронлы булды ул.

Шул да иҫтә ҡалған: ул саҡта ҡурайҙа уйнаусылар һирәк ине. Кис булһа, Сәфәрғәли "ҡурай бөтә", тип ҡулына ҡурайын ала ла, сығып китә торғайны. Мәктәп-интернатта һәм башҡа түңәрәктәрҙә Юлай Ғәйнетдиновтар менән осрашып, бергәләшеп ҡурай уйнап, күңелдәре булып ҡайтырҙар ине.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Ҡурайсылар бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына ине ул заман. Ҡурайға бер уҡыу йортонда ла уҡытмайҙар ине. Хәҙер генә ул ҡурайсылар күбәйҙе.

▸ **Һәр кем үҙ яҙмышын үҙе яҙа, тиҙәр. Тәҡдиреңдә Аллаһы Тәғәлә билдәләй тип тә әйтәләр. Ә бына һеҙ яҙмышҡа ышанаһығыҙмы?**

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Ышанам, әммә барыбер күбеһе кешенең үҙенән торалыр, тип уйлайым. Үҙеңде бәхетле тойор өсөн тормоштоң күп кенә күренештәренә, бәлки, күҙҙе йоморға ла кәрәктер. Ни өсөн тигәндә, бәхетле булыу күп осраҡта үҙеңде бәхетле итеп тойоуға бәйле.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Мин үҙемде бер ваҡытта ла бәхетһеҙ итеп тойғаным булманы. Мин бәхетле, сөнки мин уңышлымын, ғаиләмә, йәмғиәткә, халҡыма кәрәкле кешемен.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Кешенең нәфсеһе артҡан һайын, ул үҙен бәхетһеҙерәк тоя. Барлыҡ татыулаштыра, юҡлыҡ талаштыра, тип тә әйтәләр. Етешмәгән саҡтарыбыҙ ҙа булды, әммә беҙ был хәлгә фәлсәфәүи күҙлектән ҡарай белдек шикелле.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Хәҙер беҙҙең, йәш ваҡыттағыса, ҙур ихтыяж да, шундай бай йәшәргә ине, тигән теләк тә юҡ. Тағы ла, күрәһегеҙ, беҙҙең йортта алтын әйберҙәр юҡ, көмөш ҡалаҡтар ғына бар.

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Минең, ҡатын-ҡыҙ булараҡ, алтын әйберҙәр йыйырға маҡсатым да, теләгем дә юҡ һәм булманы.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Тормош юлымда һәр ваҡыт яҡшы кешеләр осрап тороуы менән дә бәхетлемен. Уларҙың араһында төрлө милләт кешеләре булды.

Ғөмүмән, ниңә беҙгә ҡайғырып ултырырға һуң? Тормошобоҙҙа күпме ыңғай үҙгәрештәр булды. 60-сы, 70-се йылдар менән сағыштырғанда тормош бик ныҡ алға китте. Тик бер башҡорт мәктәбе булған Өфө, бер башҡорт мәктәбе лә булмаған Сибай өсөн дә был үҙгәрештәр һүҙ менән генә әйтеп биргеһеҙ. Хәҙер ҡалаларыбыҙҙа милли рухлы икенсе, өсөнсө быуын милли интеллигенция вәкилдәре ныҡҡа арҡа терәне. Бер ҡасан да булмаған хәл: бына 1-се курс студенты, башҡорт егете кикбоксинг буйынса донъя чемпионы булып ҡайтты. Премьер-министр Раил Сарбаевтың, Сибайҙа олимпия үҙәге төҙөргә кәрәк, тигән фекере менән тулыһынса килешәм. Хәҙерге йәштәр техник яҡтан белемле, йылғырҙар, уларға мөмкинлек кенә бир: донъябыҙҙы күҙ асып йомған арала яҡшы яҡҡа үҙгәртәсәк улар. Сибайҙағы был үҙгәрештәр барыһы ла юғары уҡыу йорттары асылыу һөҙөмтәһе. Ошо Сибай ҡалаһы миҫалында башҡорт милләте үҙенең потенциаль мөмкинлеген күрһәтте. Беҙҙең институтты тамамлағандар араһында ғына бөгөн республикала тиҫтәгә яҡын прокурор эшләй. Беҙҙә бер төркөмдә 25 студент уҡыһа, шуларҙың 10-15-ләбе мотлаҡ рәүештә артабан уҡыуын дауам итергә теләй. Үҙемә килгәндә, былтыр ғына минең етәкселектә өс кеше кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы, шул уҡ ваҡытта ике китабым баҫылып сығыу алдында тора.

▸ **Еңғәй, беҙ Сәфәрғәли ағайҙы асыуын буйына һеңдерә белгән, сабыр, аҡыллы, йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат яткан ир-уҙаман булараҡ беләбеҙ. Уның был сифаттары ҡайҙан килә, тип уйлайһығыҙ?**

**Вилүрә Зиннәт ҡыҙы:** Ысын ир кеше шулай булалыр, тип уйлайым. Уның шундай булыуында ҡәйнәм менән ҡайнымдың роле ҙур булғандыр, тим. Ҡайным үҙе лә ихтирамға лайыҡ кеше булды. Улар улына халыҡсан тәрбиә бирә алғандар. Сәфәрғәлинең арҡа һөйәге ныҡ. Арҡа һөйәге булмағандарҙы йә бушаҡ булғандарҙы теге яҡҡа ла, был яҡҡа ла ауҙарып була. Ҡайным менән ҡәйнәмә, яҙмышыма рәхмәтлемен, шундай кеше менән осраштырғанына, ҡауыштырғанына. Сәфәрғәли һәр бер хәлдә нисек бар - шулай итеп, һәүетемсә ҡабул итә белә. Ҡыҙып китмәй, көтөлмәгән ҡылыҡтар яһамай. Самолетҡа һуңлаһа ла, ҡайғырмай: "Тимәк, шулай булырға тейеш булған", - тип әйтә лә ҡуя. Ул ҡабаланмай, шул уҡ ваҡытта һуңламай ҙа. Бәләкәй генә бала ярҙам һорап мөрәжәғәт итһә лә, ул баланы өлкән кешеләй күреп, ярҙам итә. Даланлы ул. Әсәйем: "Кейәүебеҙ һәр саҡ аш бешеүгә генә килеп төшә", - тип әйтә торғайны.

**Сәфәрғәли Искәндәр улы:** Өфөлә йәшәгәндә, ниндәй генә шарттарҙа торһаҡ та, беҙҙән бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәне. Татлыбайҙан да, Ишбирҙенән дә туғандар, ғөмүмән, туған булмаған яҡташтар, таныштар һәр саҡ беҙҙә булды. Беҙ берәүҙе лә тарһынманыҡ. Һәр бер килгән кешене яҡты йөҙ менән ҡаршы алып, алдына аш-һыу ҡуйып, ҡайһыларын поезға тиклем оҙатып ҡала торғайныҡ. Дауаханала ятҡан яҡташтарыбыҙға ла хәл белергә йөрөнөк. Туғандарыбыҙҙы, яҡташтарыбыҙҙы театрҙарға ла күп йөрөттөк. Апайҙар, еңгәйҙәр, инәйҙәр сәскәле күлдәктәр кейеп, театрға барғас, ундағы ҙур көҙгөнән үҙҙәрен тәүге тапҡыр баштан-аяҡ күреп, эй ҡыуаныр инеләр. Бындай саҡтарҙа минең, башҡорт кешеһе булараҡ, ирлек намыҫымды һаҡлашҡаны өсөн Вилүрәгә рәхмәтлемен.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Йәнтүриндәрҙең ғаиләһендә алтын әйберҙәрҙең ни өсөн булмауын мин үҙемсә аңланым. Беренсенән, бер-береһенә алтындай ир һәм ҡатын, атай һәм әсәй була алған ғаилә башлыҡтары өсөн нимәгә кәрәк ул алтын? Икенсенән, был ғаилә ағзаларының үҙ-ара мөнәсәбәтендә бушлыҡ, өңөрәйеп торған урындар юҡ. Психологтар иҫәпләүенсә, күп осраҡта кеше ана шул бушлыҡтарҙы ялтыр әйберҙәр менән тултырып, башҡалар алдында камил булып күренергә тырыша. Өсөнсөнән, алтын ашыҡтай балалары булған ғаиләгә нимәгә кәрәк ул ялтырауыҡ? Һәр хәлдә, Йәнтүриндәр ғаиләһе менән аралашҡанда мин ошолар хаҡында уйландым. Тулы ҡанлы тормош менән йәшәүсе бәхетле башҡорт ғаиләләре күберәк булһын ине.**

Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.

# ҠОЙОН ҠОЙРОҒО ОҘОН...

Урал МОСТАФИН

*(Повестың гәзит варианты)*



Килеүен килгәс, ҡайтырға ла ваҡыты етә. Гүзәлдең бер килгәндә бер-ике сәғәткә булһа ла инәйен күреп китеү теләген Батыр ҙа хупланы: “Ярар, бигерәк һәйбәт! Көн оҙон, төштән һуң барырбыҙ ҙа кис поезға шунан ултыртып оҙатырмын. Алыҫ ер түгел, яҡтыла ҡайтып етермен, атым шәп”.

Көнө буйы тирә-яҡты гиҙҙеләр, тәбиғәттә йөрөп арып, ялҡып буламы һуң? Умарталыҡҡа инәйек, тип өгөтләп ҡарағайны, Гүзәл барыбер яҡын да барманы. Батыр умарталар араһында иркен йөрөй, ҡорттары һырып алалар ҙа, әллә уны еҫкәйҙәр, әллә ялайҙар, әллә хәбәрҙәрен һөйләйҙәр инде, эргәһендә гөж киләләр ҙә, тағы үҙ йомоштары менән таралышып, осоп китәләр. Уларға ҡарап торһаң, ҡыҙыҡ. Умарталарҙан һайлап кәрәҙҙәр алды. Өйгә ҡайтҡас, уларҙы машинкаһына теҙеп ҡуйып, бал айырып күрһәтте. Ике банкаға бал тултырҙы, бер кәрәҙҙе бөтөн көйө уртаға бүлеп, шыптырлаҡҡа төрҙө.

- Береһе инәйгә күстәнәс, береһен алып ҡайтып, ҡыҙҙарыңды һыйларһың, - тип, ике пакетҡа һалып ултыртты.

Кискә ҡарай юлға сыҡтылар. Тимер юл буйлап яҡын ара күренһә лә, тура юлды белмәгәнгәме, ауылға барып еткәнсе, хәтһеҙ ваҡыт үтте. Ауылға барып ингәс, Гүзәл ҡайҙа барырға, ҡайҙа бороларға ҡулын һоноп күрһәтеп барҙы. Хәйер, бер генә урамлы ауылда ҡайҙа аҙашаһың, тура барыуҙан башҡа сара юҡ. Инәйе ауылдың икенсе осондараҡ йәшәй икән. Өйгә инһәләр, бер кем юҡ. Инәйе күрше-тирәһенә сыҡҡандыр, ишеге шар асыҡ ине. Төпкө өйгә үткән Батыр стенала эленгән быялалы рамдарҙағы фотоларға уҡталды. Унда Гүзәлдең туғандары ла барҙыр, ә ул быға тиклем уның үҙенән башҡа бер кемен дә күреү түгел, белмәй. Гүзәл уның эргәһенә килеп, ҡайһы фотоларҙа кемдең кем икәнен таныштырҙы:

- Әсәйем, атайы-ы-ым, һеңлем...- Тулҡынланмаһа, һүҙҙәрҙе ҡәҙимге асыҡ әйтә ала ул. Әгәр бер һүҙ күңелен борсоһа, шул һүҙҙә тотлоға башлай.

- Шайтан арбаһы шатырлағанға, күршеләргә берәйһе килдеме икән, тиһәм, ҡунаҡтар үҙемдә икән даһа. - Һөйләнә-һөйләнә бер апай килеп инде. - Үҙемдең ҡыҙым килгән икән. Был мәлдә нимә менән килдең һуң, әллә берәй хәл булдымы ҡапылда?- тип хәүефләнә башлағайны, Гүзәл:

- Юҡ, инәй, бер нәмә лә булманы, борсолма, - тине, ҡәҙимге аңлайышлы.

Инәйе, үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттемме икән, тигән кеүек, бер ҡыҙына, бер ят егеткә аптырап ҡарап торҙо. Ҡыҙының һөйләшендәге шул әҙ генә айырманы ла һиҙгәс, быға хәтлем ныҡ ҡайғырып, алйып йөрөгәндәр инде.

-Ҡыҙым, ҡалай матур һөйләшәһең! Уй, Хоҙайым, доғаларымды ҡабул иткәнһеңдер, күрәһең, күҙ тейеп кенә ҡуймаһын! - Шул ерҙә ҡыҙын ҡосаҡлап, арҡаһынан һөйә-һөйә илап та алды. "Хоҙай Тәғәләм ярҙам итерен белә инем" тигән кеүек, был ҡыуанысты тәбиғи ҡабул итте. Оҙаҡ хисләнеп, күҙҙәрен шәмәртеп тә ултырманы. Ябай әҙәм балаһы ошоға тиклем йыйылған ҡайғы-хәсрәттәрен шул һаран ғына әс бөртөк күҙ йәштәре менән түкте лә ҡуйҙы. Ҡыҙын ҡосаҡлап ултырған көйө, хәлде ҡыҙыу сағында асыҡларға кереште. - Ә был егет кем була?

- Мин Батыргәрәй исемле егет булам. Өфөлә институтта уҡыйым.

- Ҡайһы яҡтыҡыһың, атай, әсәйҙәрең бармы, иҫән-һауҙармы? - Төпсөнгән һорауҙарына төплө яуап алғас, күңеле тынысланды шикелле, егетте башҡа һынап, тикшереп торманы. Тормоштоң әсе-сөсөһөн татыған сабыр холоҡло ябай ауыл кешеһе шул ябай ғына белешеүҙәре менән кемдең кем, ҡайҙан, ниндәй тоҡомдан, ғаиләнән, ниндәй ҡылыҡ-холоҡло булыуын билдәләрлек етешле мәғлүмәттәрен алды ла, үҙе тәҫмөрләүенсә йүнлеме, йүнһеҙме кеше икәнлеген баһалап та ағаһы кеүек яҡын күрәләр инде, тип ҡуйҙы.

- Ипле, аҡыллы егет күренәһең, имен генә булығыҙ, бәлә-ҡазаһыҙ йөрөгөҙ, - тип, ошо ҡыҫҡа ғына телмәрендә зарын, өмөтөн, баһаһын, ризалығын да әйтеп, фатихаһын бирҙе шикелле зирәк аҡыллы апай. Башҡа бер нәмә төпсөнмәне, ҡыҙы менән ипле генә үҙ гәмдәре, үҙ белгәндәре тураһында һөйләшеп ултырҙылар. Батыр ашап, эсеп алғас, уларҙың әңгәмәһенә ҡамасауламайым, иркенләп һөйләшһендәр, тип, тышҡа сығып китте. Ул йөрөп килеп, өйгә ингәс, Гүзәл:

- Инәй, мин бөгөн ҡайтам, ағайым киске поезға оҙатып ҡуя,- тигәйне, инәһенең йөҙө хәүефләнә бирҙе лә, тиҙ асылды.

- Ярар, балалар, бергә булығыҙ, имен йөрөгөҙ! Һаҡлар, яҡлар кешең булыуҙан һәйбәте юҡ был донъяларҙа. Япа-яңғыҙ, тым-тырағай ғына йөрөп ҡалмаланы ла ҡуйҙы. Баһаһы ыңғай булғандыр, егеткә "балам" тип өндәшә башланы. Гүзәл, инәйем, тиһә лә, Батырҙың ата-әсәһенән байтаҡҡа йәшерәк күренә үҙе.

- Сәй ҡуяйым. Ҡунаҡ килерен көткән кеүек, яңы картуф ҡаҙып индерҙем, шуны бешерәйе-е-ем... - Үҙалдына көйләп кенә һөйләнә-һөйләнә, ғәҙәти эшенә кереште.

Батыр һаман баяғы фотоларҙы ентекләп өйрәнде. Әллә таныш йөҙҙәр эҙләне, әллә тынлыҡты биләне. Фотоларҙа ғаиләләре, туғандары ишле күренә. Йыш осрашып тораларҙыр, сөнки өлкән быуын менән йәштәр, йәнә, йәш кенә балалар бергә төшкән фотолар күп. Алсаҡ, мөләйем йөҙлө кешеләр, татыу, берҙәм туғандарҙыр, тип ҡыуанды. Алып килгән күстәнәстәре менән инәйен ҡыуандырып, сәй эстеләр. Таныҡҡа тәмләп, һары майға ҡушып, яңы картуф ашанылар.

- Ҡыҙым, аҡса йыям, дауаланырға йөрөйөм, ти торғайның. Йөрөй башланыңмы әллә? Һөйләшеүең бик матур, онотоп ҡуймаһаң ярар ине.

- Эйе, дауаланам әле лә. Ағайым ярҙам итә, өйрәтә, - тип, Батырға ымланы.

- Ярай, ағайың булғас, ағайың булһын да ҡуйһын, һәйбәт кеше булһа, булды.

Батырға элек тә "ағай" тип өндәшкәне бар ул. Тик, исемен әйтеүе ауырмы, әллә шаяртып ҡына шулайтып әйтәме, тип уйлай торғайны Батыр, хәҙер инәйенә лә шулайтып әйткәс, ысынғыҙ, Аллам һаҡлаһын, - тип, үҙен тынысландырҙымы, егет менән ҡыҙға аҡыл өйрәттеме әллә, үҙенең тормошонан әллә ниндәй хәл-ваҡиғаларын иҫенә төшөрөп, үҙенә генә әйтте микән.

Батыр Гүзәлде поезға ултыртҡанда шаяртып ҡына:

- Ҡара һин, ҡыҙыҡай, башыңды тағы әллә ниндәй ят ағайҙың тубығына һалып йоҡлап ҡуйма,- тигән булды. Гүзәл уның бармаҡтарын усында ҡыҫып, тәненә нығыраҡ һыйынып йылмайҙы ғына. Көҙ етте. Уҡыуҙар башланды. Гүзәл логопед менән шөғөлләнеүен дауам итте. Элек әйтә алмаған һәр бер яңы һүҙгә теле асылыуына бала кеүек ҡыуанды. Күберәк әйтеп ҡалырға тырышҡан кеше кеүек, Батырға шул һүҙҙе ҡабатлап-ҡабатлап өндәште. Теле асыла барыу менән бергә, шул уҡ тиҙлектә ҡыҙҙың кәйефе, үҙен тотоуы, донъяға ҡарашы ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе.

- Гүзәл, әйҙә Яңы йыл ялдарында ауылға ҡайтып, минең туғандарым менән танышып киләйек. Минең тыуған еремде күрерһең, - тине бер көн егет ҡыҙға.

Гүзәл ҡурҡҡан кешеләй, ҡулдары менән битен ҡапланы. Тулҡынланыуынан кәрәк һүҙҙәрен әйтә алмаҫмын типме, ашығып ҡағыҙға яҙып бирҙе: "Юҡ, әлегә бара алмайым." Нисек кенә өгөтләмәне, файҙаһы булманы. Асыуланып ҡарағайны, Гүзәл бөтөнләй үҙенә йәшенде, илар хәлгә етеп, кәйефе боҙолғанын күргәс, хәлен аңланы. Эйе, атай, әсәһе, туғандары нимә тиерҙәр? Аңларҙармы? Батырҙы туғандары алдында ауыр хәлгә ҡалдырыу ҡурҡынысы Гүзәлдең аңына ла һыйманы, йәне ризалашманы.

- Ярай, ярай, ҡайғырма, тынысла. Мин һинең эргәндә булам бит, бергә булғанда, бер кемдән дә ҡурҡмайһыңдыр, тип әйткәйнем,- тине лә, ул турала башҡа һүҙ ҡуҙғатманы.

Яңы йыл каникулдарына ул бер үҙе генә ҡайтты. Ауылда тормош үҙ яйына бара, ҡалалағы бола унда әле барып етмәгән кеүек. Һәр кем үҙ донъяһын көтөү менән мәшғүл. Шул уҡ мәлдә ауыл халҡының йәшәү шарттары хәтһеҙ ауырлашҡаны күҙгә ташлана, сөнки бөтәһен дә үҙгәртеп ҡороуға һылтап, эшсе кешенең ихтыяждарына иғтибар юҡ ҡына түгел, ҡолас ташлап тороп ҡул һелтәгәндәр, кеше хоҡуҡтары тупаҫ тапала, йәшәү, эш шарттары уңайлыҡтары тураһында һүҙ ҙә ҡуҙғатыусы юҡ, булһа ла, бер кем тыңлау түгел, ыжламай ҙа.

Иртәгә китәм тигән көндә әсәһе:

- Нишләп, улым, клубҡа ла сыҡманың? Йәш кенә уҡытыусы ҡыҙҙар килде мәктәпкә. Барып, күреп, танышһаң ни була?

- Юҡ, әсәй, клубҡа йөрөргә мин ҡарт инде,- тип кенә ҡотолмаҡ булды.

- Тиңдәштәрең әллә ҡасан башлы-күҙле булып, икешәр-өсәр бала үҫтерә. Быйыл, Алла бирһә, уҡыуыңды бөтәһең, һинә лә ваҡыты еткәндер, нимә уйлайһың үҙең? Был яҡтарға ҡайтаһыңмы әллә ҡырға ебәрәләрме?

- Юҡ, бер ҡайҙа ла ебәрмәйҙәр. Үҙем ошоға тиклем йәйгеһен эшләп йөрөгән лесхозға барырға уйлайым. Өйрәнгән ер, йәшәр урыны бар, эшемде лә беләм. Теге яҡҡа ла, был яҡҡа ла яҡын, поезд менән ҡайтып йөрөүе лә уңайлы.

- Ә "теге яғы" ҡайһы яҡ һуң ул?- тип әләктерә һалып алды һиҙгер йөрәкле әсә.

- Әсәй, ризалыҡ бирһәгеҙ, уҡыуымды тамамлап, эшкә урынлашһам, кәләш әйттерербеҙ тигәйнем былай ҙа. Йөрөгән ҡыҙым мин практика үткән районда, ауылы мин эшкә бараһы ергә яҡын ғына, үҙе баш ҡалала тегеү фабрикаһында эшләй, - тип әйтә алды бер тынала.

- Әй әттәгенәһе-е-е... Телһеҙ тегеүсе ҡыҙ менән йөрөй улың, тиҙәр ине шул. Бисәләр ғәйбәтләр, тип ышанмаһам, ысын шулаймы әллә? Бына һинә ғибрәт, бына ыстырам! Һуҡырын тапманыңмы, баш ҡалала имен ҡыҙҙар юҡмы? Ауылда тегенә белгән донъя көтөрлөк ҡыҙҙар бөткәнме?

Баш ҡалала уҡыған, эшләгән ауылдаш ҡыҙҙар, егеттәр уларҙы бергә күргәне бар. Батыр береһенән дә ҡасманы, йәшенмәне, осрағандарын Гүзәл менән ихлас таныштырҙы. Ҡара һин уларҙы! Араларында һемтәнләп, кемдең кем икәнен төпсөнөп, еҫкәнеп йөрөүсеһе лә табылған бит әле.

- Әсәй, тукта әле! Әллә кемдәр ғәйбәт итеп һөйләгән хәбәргә көйөнгәнсә, мине тыңлап ҡара, исмаһам. Эйе, ул ҡыҙыҡай әҙерәк тотлоғоп һөйләшә, ләкин дауаланып йөрөй, өйрәнә, тырыша, хәҙер ҡәҙимгесә асыҡ һөйләшергә өйрәнде.

- Ҡуй, ҡуй, балам! Зәғиф, зәғиф инде! Бәпәйҙәрегеҙ булһа, әсәһенән башҡа уларҙы кем һөйләшергә өйрәтер? Үҙе һөйләшә белмәгән әсә балаһын нисек өйрәтһен? Ейәндәр ҡыуанысы күрә алмаҫбыҙмы икән, улым, һинән? - тип, иламһырай-иламһырай, үҙенекен ҡыуҙы.

- Беҙ үҙ-ара һөйләшеп аңлашабыҙ бит һуң. Уның башҡаларҙан бер ере лә кәм түгел!

- Телһеҙ менән йәшәргә, башҡаларҙан һинең ҡайһы ерең кәм?

- Әсәй, бәлки, ул минең яҙмышымдыр?

- Ваҡытында үҙ тиңеңде табып күҙле-башлы булмаһаң, шулай һуҡыр, һаңғырау, телһеҙҙәре генә ҡала инде! - Йәшкәҙәп иларға кереште.

Әсәһенең был тиклем өҙгөләнеүенә аптыраған Батыр нимә тип әйтергә лә белмәне. Алдан белеп, эстән генә ҡайғырып, көйөнөп йөрөгән икән әсәһе. Алай ҙа Гүзәлде көсләшеп алып ҡайтмаған! Яңы саҡ шуны асыҡ аңланы. Һиҙгер икән шул күп рәнйеүҙәр кисергән ҡыҙҙың йөрәге. Күпте өндәшмәй генә күтәргәндер инде, бахырҡай.

Өйҙәрендә һуңғы кис күңелһеҙ үтте. Иртәгеһенә, китә торған көндә, кисәге һөйләшеү тураһында хәбәр ҡуҙғатманылар. Батыр өйҙәренән күңелһеҙ генә хушлашып сығып китте. Хәҙер ҡалайтыр инде? Нисек ата-әсәһе менән аңлашыр? Былай ҡаршылыҡҡа юлығырмын, тигән уй башына ла килмәгәйне. Ҡаршылыҡ та сит-боттан түгел, ә үҙенең иң кешелекле, кеселекле әсәһенән! Балаһы хәҙер үҙ һүҙен һүҙ итәм тип, әсәһе менән көрәшһенме инде? Әсәһен еңәм тип, еңмешләнһенме? Ҡалаға килгәс, тәүге осрашыуҙарында уҡ Гүзәл уның күңелһеҙләнгәнен һиҙҙе.

- Берәй хәл булдымы әллә? Атай, әсәйеңдәр иҫән-һауҙармы?

- Юҡ, Гүзәл, юҡ! Хәүефләнмә, бөтәһе лә имен-һауҙар, барыһы ла һәйбәт. Имтихандар, диплом әҙерләү әҙерәк йонсотто, - тип кенә аңлатты үҙенең көйһеҙләгән. Ул яңы саҡ Гүзәл уның үҙе менән генә иркен, ҡурҡмай һөйләшкәнен аңғарҙы. Гүзәл үҙенә ныҡ ышанғанлығынан, уның эргәһендә асыҡ, талғын һөйләшә алғанын аңланы, башҡалар менән элекке кеүек уҡ артыҡ аралашып бармай икән дә баһа. Икәү ара һөйләшеүҙәренә күнегеп, һөйләшендә ҡолаҡҡа ныҡ салынған етешһеҙлектәрен дә ишетмәҫкә өйрәнеп киткән икән.

**(Дауамы. Башы 44-47-се һандарҙа).**

ЭШЛЕКЛЕЛӘР ҠОРО

**Эшлекле ҡатын-ҡыҙ, ысынында иһә, нәзәкәтле, интеллектуаль һәм физик яҡтан әүҙем, ҡарарҙарҙы үҙе ҡабул иткән, әммә бөтәндәрҙең кәйефен яҡшы тойған сағыу шәхес. Ул тәүәккәл, маҡсатҡа ынтылыусан, үҙенә ныҡ ышана, тәңкитте, кисәтеүҙәрҙе, хатта мыҫҡыл итеүҙәрҙе ҡабул итеп, үҙен лайыҡлы тота белә. Ул бер социаль ролдән (эшлекле ҡатындан) икенсе ролгә (ҡыҙ, әсәй, ҡатын) тиҙ генә күсә ала, иренең, балаларының аңлауына һәм ярҙамына ышана. Эшлекле ҡатын-ҡыҙ үҙенә һәм уратып алған кешеләргә тап үҙ эше менән шөғөлләнеүен һәр ваҡыт иҫбатлау юлында". Эшлекле ҡатын-ҡыҙға, ғәҙәттә, бына ошондайыраҡ ҡылыҡһырлама бирелә. Ә башҡорт эшлекле ҡыҙ-ҡатыны кем ул? Эштә, ғаиләлә үҙен нисек тота? Ул ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Был һорауҙарға "Пышка" ойошмаһы директор урынбаҫары Рита АБДРАХМАНОВАның сығышы аша яуап табырһығыҙ. Учалы районы Мулдаш ауылы ҡыҙыРитаның эшһөйөүсәнлеге, ойоштороу һәләте һәм әүҙемлеге баш ҡаланы яуларға һәм яраҡкан эшен табырға ярҙам иткән. Һүҙ - Рита Иҙелбай ҡыҙына:**



# НӘЗӘКӘТЛЕ ЗАТТАН ҮҘЕ...

## әммә кәртәләрҙе емереп үҙа

### Күңел юғарыға талпынған ҡош

Мин һәр ваҡыт әҙләнеүҙәр юлында булдым, үҙемде яңынан-яңы яҡтан асҡым килде. Мәктәптә уҡығанда уҡ мин студент буласаҡмын, төҙөлөш отрядына йөрөйәсәкмен, шунан ауылға ҡайтып, уны күтәрергә ярҙам итәсәкмен, тип уйлай торғайным. Мәктәптән һуң Башҡорт дәүләт аграр университетында ветеринар медицина факультетын тамамлап, бер уҡ мәлдә бухгалтер һөнәрен дә үҙләштереп, ауылға ҡайттым. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланды. Eң һыҙғанып эшләргә, ауыл тормошона үҙемсә йән өрөргә тырыштым. Өй һалып сыҡтыҡ. Хәтеремдә, бәләкәй саҡта ҡыҙҙар менән бер-беребеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырышҡан булып, өй уйнайбыҙ. Ҡыш көнө өйҙә боҙҙан эшләйбеҙ, йәйен ҡыуыш ҡорған булабыҙ. Мин өйөмдә бүлмәле-бүлмәле итеп эшләйем. Ҡыҙҙар минең яһалма өйөмә ҡарап, "Эй, Рита, ҙурайғас һинең өйөң матур булыр инде", - ти торғайнылар. Бәлки, мин йә архитектор, йә дизайнер булырға тейеш булғанмындыр. Был һәләтем әлеге эшемдә ныҡ ярҙам итә. Мин ауылда өй һалып сыҡҡанымыҙҙа ла барыһын да үҙемсә биҙәп, бүлмәләр бүлдереп, ҡоролма шкафтар эшләттем. Хатта икмәк мейесен үҙемсә уйлап сығарҙым. Аҙаҡ беҙҙән күреп, йәштәр ҙә өйҙәрен беҙҙеңсә ҡора башланы. Мин бөтә нәмәне тиҙ һәм алдан эшләргә ятам. Өләсәйем дә: "Эшләгәнеңде кеше күреп ҡалырға тейеш түгел", - тип әйтә торғайны. Шул да мейелә һеңеп ҡалғандыр инде. Уйлағанын тураһында күп һөйләп тороу килешмәй, ниәтләгәнһең икән, оҙаҡҡа һуҙмай, эшлә лә ҡуй.

Тора-бара ауылда үҙемде шәхес булараҡ тормошҡа ашыра алмауыбыҙ һиҙеп ҡалдым, бында минең мөмкинлектәрем сикләнгән кеүек тойолдо. Өфөгә, шул уҡ аграр университетҡа килеп, иҡтисадсы-юрист һөнәрен үҙләштерҙем. Төрлө һөнәр үҙләштереүем юҡҡа булманы. 2000 йыл аҙағында хәҙер инде республикала киң түгел, ә башҡорт кухняһы мөғжизәләре менән бар Рәсәйҙә танылыу яулаған "Пышка" ойошмаһында эшләй башланым.

### Эшем тураһында

Был компанияла мин бухгалтер-оператор булараҡ эш башланым, аҙаҡтан склад мөдире итеп тәғәйенләнеләр. Әлеге көндә генераль директор урынбаҫары вазифаһын башҡарам. Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: беҙҙең компанияла карьера буйынса үҫеү мөмкинлеге сикләнмәгән, тырышһаң, күрәләр, аҡсаһын да түләйҙәр. Аҡсаны егәрле булһаң, ҡайҙа ла эшләргә мөмкин инде ул. Бөгөн аҡса юҡ, эш юҡ, тип әйтеп ултырыусыларға аптырайым. Аҡса етмәй икән, ике-өс урында эшлә - тир түкмәйенсә бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай. Ә ваҡытмы? Теләк булһа, табыла ул.

Мин компанияла яңы проекттар өҫтөндә эшләйем, шулай уҡ тышҡы бәйләнештәр менән шөғөлләнәм. Франчайзинг буйынса эш алып барабыҙ. Йәғни, төп компания булараҡ, үҙебеҙҙең брендты технологиялары менән ҡуша икенсе хужаларға һатабыҙ. Әле Өфөлә 62 "Пышка" ойошмаһы эшләп килә, шуның эсендә 42 ойоштороусы бар. Шулай уҡ Ишембай, Салауат, Түбәнге Новгородта сауҙа нөктәләребеҙ асылды. Быйыл тағы ла бер ҙур ҡаҙанышҡа өлгәштек: август айында Мәскәү ҡалаһында франшиза буйынса кулинария-кафе асып ҡайттыҡ. Унда беҙҙең ҡыҙыл эремсек, гөбәҙиә, ваҡ бәлеш, ләүәш, билмән, өләштәр ҙур һорау менән ҡулланыла.

Әйткәндәй, "Пышка"ның башҡортса исеме "Кабартма". Был исемде тауар билдәһенең хужаһы Рәсимә Азнар ҡыҙы өләсәһенең ҡаҙ майында бешерелгән ҡабартмаһын күҙ алдына килтереп, яратып ҡушҡан. Ғөмүмән, өләсәйҙәребеҙ ҡулдары менән бешерелгән башҡорт аштары кемдең генә хәтерендә һаҡланмаған икән! Ул беҙҙәң үҙебеҙҙең ҡулланылыштан да төшөп ҡалмаған, тиергә була. Көнкүрештә беҙ барыбер үҙебеҙҙең аштарға өҫтөнлөк бирәбеҙ бит. Бешерә белмәгәндәр, әммә үҙ милли аҙығын өҫтөн күргәндәр өсөн былтыр "Башҡорт кухняһы" тигән китап сығарҙыҡ. Боронғо һәм хәҙерге башҡорт аш-һыу рецептары яҙылған, һүрәттәр менән байытылған бик матур китап килеп сыҡты. Ул бүләк өсөн бик һәйбәт. Был китапҡа ингән бөтә аш-һыу төрөн дә беҙҙең сауҙа нөктәләренән һатып алырға мөмкин. Беҙҙә өс меңдән ашыу аҙыҡ төрө әҙерләнә. Ғөмүмән, "Пышка" компанияһы тәҡдим иткән продукция юғары технологиялар менән әҙерләнеүе, уларға төрлө тәм биреүсе өҫтәмәләр ҡушылмауы менән дә сифатлы һанала. Киләсәктә Ислам талаптарына ярашлы хәләл ризыҡтар етештереү ниәте лә бар.

### Әсәйем шулай итеп тәрбиәләне

Атайыбыҙ йәшләй мәрхүм булып ҡалғас, әсәйебеҙ дүрт баланы яңғыҙы тәрбиәләп үҫтерҙе. Әсәйем ғүмер буйы Мулдаш ауылында фельдшер пункты мөдире булып эшләне, ҡатын-ҡыҙҙар советын етәкләне. Ул эшсәнлеге, үҙенә талапсанлығы менән ауылда ихтирамлы кеше ине. Бөтәһе лә уға йомошон да, кәңәшен дә һорап килде. Унан бер саҡ: "Әсәй булыуы ҡыйынмы ул?"- тип һорай ҡуйҙым. Ул иһә: "Балаларың тыңлаһа, әсәй булыуы ҡыйын түгел," - тип яуап биргәйне. Беҙ бәләкәйҙән эш араһында үҫтек, хеҙмәт аша тәрбиә алдыҡ. Атай булмаһа ла, беҙ һәр ваҡыт етеш йәшәнек. Әсәй беҙҙе бер нәмәнән мәхрүм итмәне, һорағанды һатып алып бирҙе. Өләсәйем дә ныҡ иртәсел һәм тынғыһыҙ кеше булды. Йәй башланһа: "Ана, бөтә кеше еләккә китеп бөттө, ә һеҙ һаман йоҡлап ятаһығыҙ", - тип, беҙҙе иртә таңдан торғоҙоп алып сығып китә ине. Ул һәр ваҡыт: "Эшләгәнең кеше өсөн булһа ла, өйрәнгәнең үҙең өсөн," - тип ҡабатлар ине.

Быны мин әле булһа иҫтән сығармайым һәм шул принцип менән йәшәйем. Беҙҙәге тынғыһыҙлыҡ, талапсанлыҡ һәм намыҫсанлыҡ ошоларҙан киләлер инде. Мин ни тиклем ауыр булһа ла, бер ваҡытта ла эсемдәген тышҡа сығармайым, эштә лә һыр бирмәйем, сабырмын. Үҙеңде яҡшы яҡтан күрһәтәм, тиһәң, әйткән һүҙеңә тоғро ҡалырға, эшеңә яуаплы ҡарарға кәрәк. Шулай үҙеңә ҡарата ыңғай фекер яулағандан һуң, коллектив эсендә абруйың үҫә, һинә ҡарата ышаныс арта, кешегә лә һүҙең үтә.

Мин һәр ваҡыт бөтә нәмәнең үҙәгендә ҡайнарға, мәғлүмәтле булырға тырышам. Үҙ-үҙеңде шәхес булараҡ тулыландырыу, камиллаштырыу өсөн эштә генә аралашыу етмәй, әлбиттә. Беҙҙең бит әле эске күңел донъяһы бар, уны рухи аҙыҡ менән байытып торорға кәрәк. Шуға ла эш араһында ваҡыт табып, спектакль, концерттарға йөрөйөм, иптәштәрем менән берәй ергә барып ял итеп киләм. Тап ошондай ерҙәргә барған саҡта үҙеңде гүзәл зат итеп тояһың да инде. Тағы ла шул: ауылдан килгән кешегә ҡалала осраған тәүге ҡаршылыҡ рус телендә аралашыу ҡатмарлығы булһа, икенсеһе - үҙ-үҙеңә ышаныс етмәү. Беҙҙе атай-әсәй һәр ваҡыт тыйып, оялсан һәм баҫалҡы итеп үҫтергән, шуныһы тормошта бер аҙ ҡамасаулай. Тыйыу кәрәк, әммә ул һине артыҡ сикләргә лә тейеш түгел. Беҙгә үҙ-үҙебеҙҙе баһалай, эшләгән эште күрһәтә белергә, ҡыйыуыраҡ булырға өйрәнергә кәрәк.

### Ир - баш, ә ҡатын уның рухи идарасыһы

"Ир - баш, ҡатын - муйын" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер инде. Ир һүҙен йығып булмай, һәр ваҡыт уға ҡолаҡ һалаһың, әммә үҙеңсә эшләп ҡуяһың. Ирҙәр физик яҡтан көслө булһа ла, улар һәр ваҡыт әсәй, ҡатын-ҡыҙ хәстәренә мохтаж. Улар бала кеүек бит. Бөгөн беҙ гүзәл затты ир-аттарға ҡарағанда көслөрәк рухлы, көслө ихтыярлы итеп күрәбеҙ. Ә ни өсөн шулай килеп сыҡты һуң? Миңә ҡалһа, ирҙәрҙе үҙгәртеп ҡороуҙар заманы боҙҙо. Ауылдан ғына алып әйткәндә лә, унда ирҙәр күп эшләй торғайны, ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеүсе ине. Колхоз-совхоздар тарҡалып, эшһеҙлек заманы киткәс, тик физик эш башҡарып өйрәнгән ир-ат ҡапылғара баҙап ҡалды. Ә ҡатын-ҡыҙ бындай осраҡтарҙа һығылмалыраҡ, улар нисек тә булһа, берәк әмәлен табып, аҡса эшләй. Бөгөн ирҙәрҙең мәшәүләнеп, эскелеккә бирелеүенең төп сәбәбен ана шул физик көс етешмәүҙә күрәм мин. Унан һуң ҡатын-ҡыҙ үҙе лә: "Ана, һин аҡса таба алмайһың, һин ир түгелһең", - тип ирен кәмһетеп, кәрен төшөрөп ебәрҙе. Беҙҙең ирҙәрҙе игәп, битәрләп, еңеп булмай, бынан уларҙың ҡулдары тағы ла ныҒыраҡ төшә. Киреһенсә, уларҙың бәләкәй генә уңышын да зурлап, маҡтап-майлап ебәреп, үҙеңдә ышаныс үҫтереп, рухын күтәрергә кәрәк. Беҙ, ҡатындар, үҙ өҫтөбөҙгә күпте алырға күнеккәнбеҙ шул. Күп осраҡта иреңә һүҙ теймәһен өсөн генә лә уның йөгөн үҙебеҙ йөкмәйбеҙ. Мин тормош иптәшем Илдарға рәхмәтлемен, ул мине аңлап, һәр яҡтан ярҙам күрһәтә.

### Улыма әйттем...

Улым Илнур Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында туғыҙынсы класта белем ала. Балаға бәләкәй саҡтан маҡсат ҡуйырға, үҙенең донъяға ҡарашын тәрбиәләргә өйрәтергә кәрәк. Ул төрлө яҡлап һәләтен үҫтереп ҡарарға тейеш. Унан һуң беҙ улыбыҙға һәр ваҡыт үҙ тарихыңды, тамырыңды, нәҫеләңде, мәҙәниәтеңде, телеңде, әҙәбиәтеңде белергә тейешһең, тип әйтә киләбеҙ. Башҡортостанда йәшәп тә, милли ҡиммәттәреңде белмәһәң, һин кем булып сығаһың инде? Кешелә тыуған еренә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо йәшәргә тейеш. Һин ҡайҙа ғына йөрөһәң дә, ҡайҙа ғына эшләһәң дә үҙ халҡыңа ярҙам күрһәтергә тейешһең, тип өйрәтәм. Туғандарым, таныштарым араһында ҡатнаш никах ҡорғандар бар, уларҙың яҙмышы нисек тамамланғанын күреп, улыма башҡорт ғаиләһе ҡорорға, тормош иптәшен үҙ милләтеңдән булырға тейешлеге хаҡында ла иҫкәртә киләм. Йәш саҡта милләт айырмаһы һиҙелмәһә лә, өлкәнәйә килә яратыу хисе юғала, ә бына үҙ милләтеңде юҡһыныу тойғоһо артҡанданарта ғына, йәштәр ошоно аңлаһын ине. Һәр кем үҙ теленә тоғро ҡалырға, үҙ халҡын яратырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ һәр ваҡыт тормошта үтәлмәгән бурыстар, ҡул етмәгән эштәр, әле өлгәшелмәгән яңы маҡсаттар хаҡында һүҙ сыҡҡанда ваҡыт етмәүгә һылтанабыҙ. Һәр нәмәлә тәртип, теүәллек, сама һәм яуаплыҡ күҙәткәндә ваҡыт менән идара итеүе артыҡ ауыр ҙа түгелдер ул. Аҡылы, рухы, ихтыяры менән көслө Рита Абдрахманова тап ана шулай эш итә лә инде. Ул тынғыһыҙ эшлекле донъяла бәләкәй генә туҡталыштар яһап, ғаиләһен ҡарарға ла, күңел торошона күҙ һалырға ла, милләт киләсәген ҡайғыртырға ла ваҡыт таба. Афарин!**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

**Үҙенең тыуған ырыуы Кесе Табын ерлегендә генә түгел, бөтә Йомран Табын, Дыуан Табын, Ҡумрыҡ Табын, Күрпәс Табын, Кәлсер Табын ырыуы халҡы араһында киң билдәлелек, оло абруй яулаған указлы мулла, үҙ заманының алдынғы ҡарашлы мөғәллиме, ауыл ҡото, төбәгебеҙ ырыҫы Латипов Мөхәмәтша Ҡаһарман улы (1889 - 1972) халыҡ хәтерендә һәм тыуған ауылы Сәйетбаба тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырған арҙаҡлы дин әһелдәренең береһе.**

# МӨХӘМӘТША МУЛЛА

## Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыҡ - бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләрен онотҡан халыҡ - намыҫһыҙ

### Сәйетбабаның рухи остазы

Борон-борондан бер хәҡиҡәт йәшәй: кешеләр бер төбәккә тупланып, ҙур ҡәүем булып ойошоп йәшәп китһен өсөн уға иң беренсе аң-белем биреү үҙәге, йәғни мәсет, мәктәп, мәҙрәсәләрҙең булыуы - тәү шарт. Йәнә ҡанунлашҡан ерле ғөрөф-ғәҙәттәр булыуы, күмәкләшеп һөнәрселек менән шөғөлләнеү, хеҙмәттәшлек итеү берләштерә әҙәм балаһын. Йәш сағынан дини ғилем алыу менән бер рәттән, төплө донъяуи белемгә эйә булыуға өлгәшкән, эшлекле, уңған Мөхәмәтша Латыпов ауыл халҡына белем, дин таратып ҡына ҡалмай, хәҙистәргә, ғөрөф-ғәҙәттәргә таянып, ололар һүҙен тотоп, дуҫ, берҙәм, татыу йәшәргә өйрәтә. Тарих, география, арифметика, әҙәбиәт фәндәрен яҡшы үҙләштергән дин әһеле йылдар үтеү менән Сәйетбаба халҡының рухи остазына әүерелә.

Бер өҙләкһеҙ алтмыш йыл буйы ауылдың көнсығыш өлөшөндә, йәғни, Өйәнең аръяҡ мәсетендә имам-хатип хеҙмәтен башҡарыуы, үҙ мәсете янындағы мәҙрәсәлә яңы ысул менән дәрестәр биреүе хаҡында оло йәштәгеләр әле лә иҫләп һөйләй. Ауылдың абруйлы ағинәйе, Табын ырыуының мәшһүр әүлиәһе булған Сабир хәҙрәттең ейәнсәре (Ғәбделхәй улының ҡыҙы) Ибраһимова Клара күңелендә дин әһелдәренә ҡарата оло ихтирам һәм бай мәғлүмәт һаҡлана. Күргән-белгәнен һис онотмаған асыҡ зиһенле инәй хәтер йомғағын һүтеп, ошоларҙы бәйән итте: "Сәйетбабала беҙ белә-белгәндән ике указлы мулла булды. Ауылдың аръяғында - Мөхәмәтша мулла, бирьяғында - Әбйәлил мулла. Халыҡты тотоусы, әҙәп-тәүфиҡҡа, тыуған ергә тоғролоҡ һаҡларға өйрәтеүселәр ҙә улар ине. Ауылдың руханиҙары йыш ҡына Ҡөрьән мәжлестәренә йыйылып булған. Сабир хажи (1854- 1931), Әбйәлил мулла (1879 - 1966), Шәмсетдин хажи, араларында иң йәше булған Мөхәмәтша мулла, йыш ҡына бергә йыйылып, Ҡөрьән уҡығандар. Беләйһе ҡаты ауырып китһә, күмәкләп Ҡөрьән сығып, имләр, өшкөрөр булғандар. Аҙаҡ уларға Хәлил, Хатип, Сәйфулла муллалар ҡушылған", - тип, ауыл кешеләренең яратҡан был изге шәхестәрен оло ихтирам менән иҫкә алды Клара апай.

### Мөхәмәтша мулланың бала сағы

Кесе Табын ырыуына ҡараған Сәйетбаба ауылында ҡаһһәрҙәр нәҫеле Латиповтар ғаиләһендә Мөхәмәтша икенсе бала булып донъяға килә. Атаһы Ҡаһарман, әсәһе Ғәфүрә, улар ете балаға ғүмер бирә: Мөхәмәтзакир, Мөхәмәтша, Хәнифә, Әхмәтша, Тайба, Әхмәҙей, Ғәбделбарый. Мөхәмәтша бөтәһе араһында бәләкәйҙән зирәклеге, отҡорлоғо менән айырылып тора. Бишалты йәшенән үҙенән өс йәшкә оло Мөхәмәтзакир ағаһына эйәреп, Сирай мулланың мәҙрәсәһенә һабаҡҡа йөрөй башлай. Малай барыһын аптыратып, тиҙ арала хәреф таный, ижекләп уҡый башлай. Бер көндә сабый ике-өс ҡыҫҡа сүрәне яттан һөйләп күрһәткәс, остазы тамам аптырай:"Собханалла, машалла, булыр бала биләүҙән, - ти. - Эй, Раббым, был уғланды үҙең һаҡла, һоғобоҙ тейә күрмәһен", - ти. Баланың зирәклеген, сослоғон күреп, уға ҙур ғилемлек юрай. Бер нәмәгә ҡарамай, уланды уҡытырға кәрәклекте әйтә.

Әүлиәлек һәләте менән танылыу тапҡан бирьяҡ мәсетенең имам-хатибы Сабир хәҙрәт тә: "Улыбыҙ ябайҙарҙан түгел. Ул был ергә Аллаһы Тәғәләнең тәғәйенләнеше менән ебәрелгән зат. Юғарынан уға оло бурыс йөкләтелгән булыр. Уның тәҡдиренә ауылдың иң һуңғы указлы муллаһы булыу яҙылған, - ти. - Мөхәмәтшаны күмәкләп уҡытыу хәстәрен күрәйек, йәмәғәт".

1901 йылда, ауылдың арҙаҡлы мөғәллимдәре әйткәндә тыңлап, Ҡаһарман ағай улын шул замандарҙа алдынғы һаналған Үтәк мәҙрәсәһенә уҡырға алып бара.

### Үтәк мәҙрәсәһендә уҡыуы

Сәйетбабанан илле-алтмыш саҡрымдарҙа ятҡан боронғо башҡорт ауылы Үтәк үҙ заманы өсөн мәҙәни үҙәк һымағыраҡ була. Һатлыҡ улы Хәбибназар етәкләгән был мәҙрәсә ете бинала урынлаша, унда өс йөҙҙән ашыу шәкерт уҡый. Мәҙрәсәлә



шәкерттәргә ғәрәп, фарсы, рус телдәрен, дин ғилемен, "Келам" исемле китаптан Ҡөрьән әйтелеше ҡағиҙәләрен уҡыталар. Унан тыш, бында донъяуи фәндәргә лә ҙур иғтибар бирелә: математика, тарих, астрономия, география, биология өйрәтелә.

Белемгә һыуһап килгән Мөхәмәтша тәүге көндәрҙән үк тырышып уҡып, мәҙрәсәнен алдынғы шәкерттәренең береһе булып китә. Мәҙрәсәлә уҡыуының икенсе йылы, йәғни 1902 йылда, бабаһы мәҙрәсәһенә уҡырға Мөхәмәтшанан бер йәшкә кесе Әхмәтзәки Вәлидов (1890 - 1970) килә. Ике һәләтле, ҡыҙыҡһыныусан шәкерт уртаҡ телде бик тиҙ таба һәм алты йыл буйы бергә уҡыу дәүерендә улар айырылмаҫ дуҫтарға әүерелә. Мөхәмәтша мәҙрәсәлә остаздары һәм Зәкиҙең йоғонтоһо аҫтында фарсы, ғәрәп, иҫке төрки телдәрен, тарихты өйрәнеүгә иждиһат итә. Математикаға, географияға һәләте ҙур була. Үҙ-үҙен, милләтен, ата-бабаларын ихтирам иткән һәр кеше, мотлаҡ, тыуған еренең тарихын белергә тейеш, - тип өйрәтә Хәбибназар остаз.

Үтәк мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгән сағында уҡ остазының йоғонтоһо аҫтында Мөхәмәтша Сәйетбаба ауылының тарихын яҙа башлай. Нәҫел-нәсәбенән һорашып, боронғо китаптарҙан эҙләп, үҙ нәҫеленең шәжәрәһен төҙөй. Аҡбирҙе бей - Аҡсабай - Ҡалсан - Байшөгөр - Зыянбирҙе - Сүбәк - Бабаш - Сәйетбаба - тағы ла бер Сүбәк - Ҡылыс Арыҫлан - Ҡанһөйәр - Ибраһим - Һашим - Рафиҡ - Латип - Ҡәһәрмән - Мөхәмәтша. Айырыуса уны үҙ нәҫеленең етенсе быуынына ҡараған Ҡылыс Арыҫлан тигән шәхес ҡыҙыҡһындыра. Урыҫтар башҡорт ерҙәрен көслөк менән талаптартып ала башлауына протест белдереп, Ҡылыс Арыҫлан үҙе эшләгән туптан Табын сиркәүенең манараһы менән көмбәҙен атып төшөрә. Дарыны ул үҙе яһаған була. Дары яһау серҙәрен башҡорттар быуындан-быуынға йәшереп, сер итеп тотҡан.

Мөхәмәтшаның тыуған ауылы, уның хикмәтле кешеләре, тарихы тураһында бер туҡтауһыҙ яратып, ҡыҙыҡ итеп һөйләүе һабаҡташы Әхмәтзәкиҙә Сәйетбаба ауылы тарихы менән ҡыҙыҡһыныу уята. Үтәк мәҙрәсәһен тамамлар алдынан буласаҡ ғалим "Сәйетбаба тарихы" тигән китабын яҙа. Һуңғы йылдарҙа үҙҙәренең ырыуы тарихын өйрәнеүсе Мөхәмәтша мулланың улы Латипов Таһир йәш сағында был китапты үҙ күҙҙәре менән күрә, хатта ҡулына алып, тотоп ҡарай. Шуныһы үкенеслә була, совет заманында уҡып белем алған егет ғәрәп хәрефтәре менән иҫке төркисә яҙылған китапты уҡый алмай. Быны күреп, атаһы: "Һеҙ барыбер уҡый алмаҫһығыҙ", - тип, үлер алдынан бөтә дини китаптарын, шул иҫәптән Зәки Вәлидиҙең "Сәйетбаба тарихы" китабын да Өфөләге Аҡмәсет архивына тапшыра.

### Зәки Вәлиди менән арҡаҙаш булыуы

Мөхәмәтша мулланың шәхесен тәрәнерәк өйрәнеү маҡсатында әҙерәк алға китеп, шуны әйтеү кәрәк: йәш сағында уға ошондай бөйөк шәхес менән осрашыуы, һабаҡташ булыуы менән ул ғүмере буйы ғорурланып йәшәй. Аллаһы Тәғәләгә һәм яҙмышына рәхмәтле була. Ошо дуҫлығы арҡаһында властар алдында яманатлы булыу, "Зәкиҙең шпионы" ярлығын тағыу, күп тапҡырҙар ҡулға алынып, яуапҡа тарттырылыу, михнәттәр күреү ҙә был дуҫлыҡ хисен күңеленән һүрелтә һәм юя алмай.

Совет власы дингә ҡарашын әҙерәк йомшартҡас, Мөхәмәтша мулла, ниһайәт, иркен тын ала. Ул йыш ҡына яратҡан улы Таһирға йәшлек дуҫы Зәки Вәлиди тураһында һағынып һөйләр була. "Атайым халыҡ дошманы тип нарыҡланған бөйөк шәхес тураһындағы ысын хаҡлыҡты урман-ҡырҙарға сыҡҡанда шым ғына һөйләй торғайны, - ти Таһир Мөхәмәтша улы. - Айырыуса олоғайғас, һис бер теленән төшөрмәне. "Иҫәндә ныҡ һаҡла. Зәки, халҡым, тип йән атҡан ысын мәғәнәһендәге аҫыл зат булды", тине.

### Мөхәмәтша - указлы мулла

1910 йылда Үтәк мәҙрәсәһен тамамлап ҡайтҡас, Мөхәмәтша Латипов указ алыр өсөн тағы бер нисә ай Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҡып йөрөй. Указ, йәғни, беҙҙенсә, диплом алыу өсөн рус телен белеү мәжбүри талап ителә. Курсты уңышлы үтеп, 1911 йылда указ алып, йәғни, указлы мулла булып, Сәйетбабаға ҡайта һәм ауылдың яңы мәхәлләһенә имам-хатип һәм уның эргәһендәге мәҙрәсәгә мөғәллим итеп тәғәйенләнә. Ошо уҡ йылды ауылдың Ғәрифә исемле бер сибәркәйенә өйләнеп ебәрә.

Тормошо бар яҡлап та түңәрәкләнгән йәш мулла башкөлләй эшкә тотона. Алдынғы мәҙрәсәләрҙе күреп, фәһем алып йөрөгәндәге уй-хыялдарын тормошҡа ашыра башлай. Үҙе тарихтан, географиянан, хисаптан уҡыта. Мәҙрәсәһе башланғыс синыфтар программаһына ғына иҫәпләнгән булһа ла, Өфө, Стәрле, Һамар, хатта Мәскәүҙән һәр төрлө яңы уҡыу әсбаптары алдыра. Географияны уҡытыу өсөн картаһы һәм глобусы ла була. Мөхәмәтшаның тырышлығын, булдыҡлылығын күреп, ауыл байҙары, айырыуса ҡайныһы Фазлиәхмәт бай уға төрлә яҡлап ярҙам итә. "Минең Хәбибназар остаздығы һымаҡ ҙур мәҙрәсә һалдырғым килә", - ти Мөхәмәтша мулла ҡайныһы Фазлиәхмәткә. Тәҡүә кейәүен үҙ улындай күреп яратҡан бай уның был изге уйын хуплап ҡаршы ала. "Афарин, кейәү, изгелегебеҙ ерҙә ятып ҡалмаҫ, мин дә ярҙам итермен, тырыштырайыҡ, иншалла", - ти. Улар ауыл ҡарттары менән бергәләшеп, мәҙрәсәне ауылдың ҡайны еренә һалдырыу тураһында уйлашалар. Мөхәмәтша мулла һәм үҙе ең һыҙғанып нигеҙ ташы әҙерләргә Мәндем йылғаһы буйындағы таш кисә торған ҡаялыҡҡа сығып китә. Әгәр ҡорона керә башлағандан ата-бабаларҙан ҡалған килемле һөнәргә, ташсылыҡ һөнәренә өйрәнгән була ул. Шулай дәртләнеп йөрөп ятҡан саҡта ғына 1914 йылда илдә Герман һуғышы башланып китә. Ғәрләтеп йәшәргә, эшләргә тип дәртләнеп, пландар ҡороп йөрөгән егерме

биш йәшлек егетте һуғышҡа алалар.

## Герман һуғышы һәм унан һуңғы йылдар

Мөхәмәтша Латипов Карпат тауҙарында барған һуғыштарҙа ҡатнаша. Полк муллаһы була. 1914 йылда ул ҡаты яралана. Оҙаҡ ҡына госпиталдә ятып дауаланғандан һуң, ике һалдат уны ауылына оҙатып ҡуя. Һуғыштан ул инвалид булып ҡайта. Батша власы уға ҙур пенсия тәғәйенләй. Октябрь революцияһына тиклем алған пенсияһына ул йорт һалып инә, һарай-ҡура тирәһен рәтләй, малын ишәйтә.

Илдә революция еңеп, совет власы урынлашҡас, Мөхәмәтша Ҡаһарман улын саҡыртып, муллалығынан ваз кисергә һәм совет мәктәбе уҡытыусыһы булырға ҡушалар. Дингә, Аллаһы Тәғәләнең барлығына, берлегенә бөтә йөрәге менән ихлас инанған мулла тәҡдимгә риза булмай. "Башҡа яҡтарҙа минең һымаҡ муллаларҙы аҫыпкиҫеп бөттөләр. Ауылым халҡы мине ҡулға алып, төрмәгә ебәреүҙән һаҡлап алып ҡалды", - тиер булған Мөхәмәтша мулла. Намаҙ уҡыған һайын Сәйетбаба халҡына рәхмәт уҡып, имeнлек теләп, доға ҡылған. Атаһына мәрхәмәтлек күрһәтеүҙәре өсөн балалары ла оло быуын кешеләренә рәхмәтле. "Ауылым халҡының ныҡлығы, берҙәмлеге оло маҡтауға лайыҡ, - ти Өфө ҡалаһында врач булып эшләгән улы Таһир. - Ғәрәсәтле репрессия йылдарында бер кем өҫтөнән ялыу, донос кеүек нәмәләр яҙылмағандыр, моғайын. Сөнки "халыҡ дошманы" тип ғәйепләнгән, атыуға хөкөм ителгән кеше ишетелмәне".

## Ислам диненә тоғролоҡ

Ауылдаштарының ихтирамын тойған Мөхәмәтша мулла ниндәй генә ҡыҫымдар булмаһын, үҙенең дини эшмәкәрлеген ташламаҫҡа тейешлекте аңлай. Яңғыҙы ғына намаҙ уҡып ҡалмай, өйөнә башҡаларҙы ла саҡыра, намаҙға баҫтыра. Йома намаҙын ҡалдырмай, вәғәздәр һөйләй. Халыҡты йыйып, Ураҙа, Ҡорбан байрамдары үткәрә. Ауылда дин тыйылыуға ҡарамаҫтан, никахлап өйләнеү, бала тыуғас, аҙан ҡысҡырыу, мәңгелек донъяға, әхирәткә күсеүселәргә йыназа уҡыу йолалары бөтмәй. Хөрмәтле руханиҙы өйҙән-өйгә, ауылдан-ауылға саҡырып йөрәтәләр. Сикһеҙ баҫалҡы, диненә тоғролоҡло, ябай һәм кешелекле, кеселекле мулла барлыҡ дини йолаларҙы еренә еткереп башҡара. Сабир хәҙрәттең юрағаны юш килә, ысынлап та, Мөхәмәтша муллаға ауылдың һуңғы указлы муллаһы булыу бәхете яҙа.

Ир бөтмәһә, ил бөтмәҫ, тигән ололар. Бөгөнгө көндә Сабир хәҙрәттең мәсете тергеҙелеп, унда Шәйәхмәтов Ғиндулла ағай имам булып хеҙмәт итә. Ауылдың Өйә арьягына ла Мөхәмәтша мулланың элекке мәсете нигеҙенә яңыһын ҡороп ултыртыу кәрәк ине. Әйҙә, туҡһан биш йыл үткәс булһа ла олуғ шәхесебеҙҙең изге хыялы. Мәндем ҡаяһы ташынан нигеҙ ҡороп, кирбестән ныҡлы, ике быуат ултыртырлыҡ итеп мәсет төҙөү теләге тормошҡа ашһын.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

ТӘҮБӘ




**23-сө һабаҡ: "Бородино яланы". Ул айҙар һәм йылдар буйы эскәндән һуң үлектәр һәм мәйеттәр менән тулған күңелең, булмышың...**

Эскелектең кеше һаулығы өсөн зыянлы булыуы тураһында бик күпте һәм оҙон-оҙаҡ итеп һөйләргә булыр ине. Барыбер ҙә уның шәхесте әхлаҡи яҡтан тарҡатыуы - килтергән зыяндарының иң ҙурылыр, тип уйлайым. Эсергә яратыусы кеше ҡырылмаһа-ҡырҡ өлөшкә бүленә, тарҡала һәм әкиәттәге суртан, ҡыҫала һәм аҡҡош кеүек, йөгөн төрлө яҡҡа тартҡылап, билдәле бер йүнәлештә алып китә алмаҫлыҡ һөйрәүсегә түгел, үҙе үк "һөйрәлеүсегә" әүерелә.

Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Сөнки араҡы менән бергә кешенең булмышына, уның тәбиғәтенә бөтөнләй ят булған ҡапма-ҡаршылыҡлы ҡылыҡфиғелдәр, сифаттар килеп инә. Килеп инә лә, улар үҙ-ара тартҡылаша, дәғүәләшә, һуғыша башлай. Шәхес тарҡалыуы күренеше лә ошо дәғүәләшеүҙең һөҙөмтәһелер.

Бик булмаһа, яу яланын күҙ алдына килтерегеҙ: унда бер-береһенә дошман булған ике ҡапма-ҡаршы көс ауыһыҙ йән ҡыйыша икән, ти. Унда снарядтар, гранаталар шартлай, миналар ярыла, пулялар һыҙғыра... Агония хәлендәге һуғышсыларҙың, йән бирә алмай ыңғырашыуы ишетелә, ҡысҡырыуҙар, аҡырыу-баҡырыуҙар, һүгенеү һүҙҙәре ҡолаҡты яра. Тик шуны ла белегеҙ: былар барыһы ла һеҙҙең булмышығыҙҙа, тәнегеҙҙә һәм йәнегеҙҙә бара. Һеҙ, гүйә, үҙегеҙ - Куликово, Бородино яландары, Курск дуғаһы, Сталинград ҡалаһы, Брест нығытмаһы.

Һуғышта дәғүәләшеүсе яҡтарҙан тыш, йән ҡыйыш барған урын да ауыһыҙ йәрәхәтләнә. Әҙәмдәрҙең ҡаны ла тап шул ерҙәге тупраҡҡа тама. Сәскәләре тапала, үләндәре иҙгеләнә, тупрағы яндырыла. Хәҙер инде һуғыш үткән яу яланын күҙ алдына килтерегеҙ. Ҡот осҡос хәл бит ул күренеш. Ҡоҙғондар мәйеттәрҙең күҙен соҡоп ала, һыуынмаҫ, ҡатмаҫ борон, уларҙың ҡанын эсеп ҡалырға ынтылыу күренеше генә лә тәндә генә түгел, йәндә лә ытырғандыра. Йыртҡыс ҡоштарҙың осло суҡыштары, гүйә, һинең күҙенә төбәлгән, һинең мейе күҙәнәктәреңдә ҡаната, һине талай төҫлө.

Дөрөҫөн әйткәндә, һеҙҙең булмышығыҙға араҡы килтергән һәләкәтте лә тап ошо күренеш менән генә сағыштырырлыҡ бит. Эскән кешелә бер үк ваҡытта ниндәй көстәр үҙ-ара ҡапма-ҡаршы һуғыша һуң? Изгелек менән яуызлыҡ, киң күңеллелек менән күңел тарлығы, миһырбанлыҡ менән сәйерлек, яғымлылыҡ менән тупаҫлыҡ, самимилыҡ менән яһиллыҡ, илаһилыҡ менән шөкәтһеҙлек, тәбиғилек менән яһалмалыҡ, аҡыл менән йоҙроҡ, сәм менән ҡыҙыулыҡ, йөрәк менән күңел, ысынбарлыҡ менән хыял, баҫалҡылыҡ менән ҡыҙмасалыҡ, һалҡын ҡанлылыҡ менән дыуамаллыҡ, ихтыяр менән сабырһыҙлыҡ, намыҫ менән әшәкелек, ҡыйыулыҡ менән ҡурҡаҡлыҡ, хәҡиҡәт менән ялған, алсаҡлыҡ менән аҫтыртынлыҡ, батырлыҡ менән бахырлыҡ, дуҫлыҡ менән дошманлыҡ, сафлыҡ менән хаинлыҡ, йомартлыҡ менән һаранлыҡ, ябайлыҡ менән ыштанһыҙлыҡ, мәрхәмәтлек менән енәйәт, мөхәббәт менән нәфрәт, аҡ менән ҡара, көн менән төн, һыу менән ут, яҡтылыҡ менән ҡараңғылыҡ, плюс менән минус, йәшәү менән үлем, рух менән меҫкенлек, моң менән зауыҡһыҙлыҡ, талант менән талантһыҙлыҡ, Моцарт менән Сальери, тыйнаҡлыҡ менән нәфсе, күңдәмлек менән яһилыҡ, аңлынлыҡ менән көндәшлек, фәрештә менән Ғәзраил, бәйғәмбәр менән Иблис, башҡортлоҡ менән маңҡортлоҡ...

Ah-ah!.. Эсергә яратыусы башҡорт кешеһе асылда үҙенең маңҡорт булғанлығын белмәй йөрөймө икән, улай булғас? Уға был турала кисекмәҫтән еткерегеҙ, үҙ асылына ҡайтырға әле һуң түгел! Үҙ телен, мәҙәниәтен белмәгән, рухынан тайпылған, асылын юғалтҡан башҡорт та шул уҡ маңҡорт бит. Ә эсергә яратыусы башҡорт - ул ихтыярһыҙлыҡ сифаттары буйынса маңҡорт. Йәғни "араҡы ассимиляцияһына" бирелеүсе, эсергә яратыусылар ойошҡан милләт ағзаһы! Эйе, эскелектең, араҡының милләте юҡ, әммә күпләп эскән, араҡы яратҡан милләт вәкилдәре бар. Тимәк, эсергә яратыусы кеше үҙ теләге менән үҙ милләтенән ваз кисеүсе һәм эскеселәрҙең "маңҡорт милләтенә" яҙылыусы булып сыға.

Кеше ни тиклем оҙаҡ һәм туҡталмай эсһә, юғарыла һанап кителгән ҡапма-ҡаршы сифаттарҙың икенсе урында торғандары - киреләре еңә бара. Еңә бара, кеше шайтан фиғеленә инә бара... Һөҙөмтәлә "һуғыш яланы булған" урын, йәғни кешенең булмышы, асылы танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Иң һуңынан кеше үҙенең антиподына, үҙ-үҙен үлтереүсеһенә әүерелә.

Араҡының үҙегеҙ өсөн килтергән һәләкәтле тәьҫирен бөтөн тулылығында аңлап еткермәйһегеҙ икән, бер тәжрибә үткәрергә тәҡдим итәм. Тәжрибә ябай ғына. Оҙаҡ ваҡыт эсеп йөрөп, өҫтөгөҙҙән һалмай кейгән күлдәгегеҙҙе йыйы һыуға ебетергә ҡуйығыҙ ҙа, бер аҙҙан уны есҡәп ҡарағыҙ әле. Унан нимә еҫе килә тип уйлайһығыҙ? Эйе, ул еҫ алдында үлек еҫе хушбуй һымаҡ ҡына булып тойолор. Ҡырҡыу, әсе, бер үк ваҡытта туп-тура мейегә ауыр тәьҫир итеүсе еҫ тәнегеҙҙән тир аша сыҡҡан токсиндар ғына түгел шул. Ул еҫтәр һеҙҙең булмышығыҙҙағы, асылығыҙҙағы һәм тәбиғәтегеҙҙәге ҡасандыр тик һынғай сүрәттә самими һаналған сифаттарығыҙҙың оло һуғыш үткәндән һуң ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғәнәләргә әүерелеүенән барлыҡҡа килгән аңҡыу, йәғни **"Асылығыҙҙың үлек еҫе"**.

Үҙенең булмышын, тәнен һәм йәнен донъялағы ҡапма-ҡаршы көстәр һуғышыусы "Бородино яланы"на әүерелдергән кешенең алдында аныҡ маҡсаты ла, уны бойомға ашырырлыҡ көс-ғәйрәте, дәрт-дарманы ла булмай. Уның барлыҡ көсө, йәшәү энергияһы баяғы көстәрҙе һуғыштырыуға, шул һуғыштан һуң ҡалған яланды тәртипкә килтереүгә сарыф ителә. Бәхетһеҙлек бына ҡайҙа ул!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Ҡыуанысыңды кешеләр менән уртаҡлаш

Үҙен, ниһайәт, эскесе тип танығанда, Эдвардҡа илле ике йәш була. Күптәр кеүек үк, ул да был хәлдән ҡотолоу өсөн берҙән-бер сара - "Аноним эскеселәр" тигән ойошмаға мөрәжәғәт итеү юлы ҡалыуын аңлай. Шулай ҙа был юл иткес аҙымға ул үҙенең ҡаршылығын еңеп, ҙур көс менән бара. Беҙҙең беребеҙ ҙә үҙенең енелеүен танырға яратмай, әммә Эдвард физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да тулыһынса бөлгән хәлдә була. Уны эскесе булыуын бүтәндәр белеп ҡалыуы хәүефләндерә, ысынында иһә, танышбелештәре уның тураһында күптән хәбәрҙар була.

Бер нисә аҙна аноним эскеселәр йыйылышына йөрөгәндән һуң, Эдвардтың башындағы томан бер аҙ тарала башлай. Ул һәр ваҡыт "Дауаланыр өсөн һеҙ тәүҙә ташларға тейешһегеҙ", - тигән сәйер әйтемде ишетә. Унан һуң, бында уға кәрәкле һөҙөмтәгә өлгәшкәс, был уңышын бүтәндәр менән дә уртаҡлашырға тейешлеген әйтәләр. Әммә, үкенескә ҡаршы, Эдвард үҙен генә уйлаусы кеше һәм тулыһынса үҙенә йомолған була. Ул: "Юҡ инде. Нисек кенә булмаһын, был сиремдән ҡотолоу менән бүтәндәрҙән алыҫ торасаҡмын", - тип уйлай.

Беҙ башҡалар менән уртаҡлашыр урынға, нимәнелер үҙебеҙҙә йәшереп тотабыҙ икән, бының менән уның ҡимммәтен генә төшөрәбеҙ. Изге Францисканың: "Үҙеңде онотҡанда ғына үҙеңде табаһың", - тигән һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыу ҡамасауламаҫ ине. Беҙ үҙебеҙҙең "мин"ебеҙҙе аша атлап, киң күңеллелек күрһәтәбеҙ икән, биргәндәребеҙ үҙебеҙгә кире әйләнеп ҡайтасаҡ.

Әммә ул үҙенә файҙа килтерә торған әйберҙе ҡабул итергә теләмәй икән, беҙ нисек итеп кемгәләр кемдер булып китергә ярҙам итә алабыҙ? Моғайын, иң яҡшы юл - бүтәндәр өлгөһөнә эйәреүҙер ул. Әгәр беҙ башҡа берәү өсөн изгелек ҡылырға әҙерлегебеҙҙе күрһәтәбеҙ икән, моғайын да, беҙҙе уратып алған кешеләр ҙә беҙҙән үрнәк алыр. Бында, кем һөйөүҙе ҡабул итә белмәй, шул уны бүләк итә лә белмәй, тигән парадокс килеп сыға ла инде. Беҙ барыбыҙ ҙа Илаһи мөхәббәтте тирә-йүндәгеләр менән саф күңелдән бүлешә алыр өсөн, уны ҡабул итеү һәләтенә лә эйә булырға тейешбеҙ, сөнки беҙ үҙебеҙҙә булмаған әйберҙе бирә алмайбыҙ. Бәхеткә өлгәшер өсөн ысын күңелдән кешеләрҙә ҡыуандырығыҙ - һәм һеҙ уның әжерен тулыһынса алырһығыҙ.

Эдвардҡа килгәндә, ул бүтәндәр менән бүлешә белеү һәләте арҡаһында ваҡыт үтеү менән үҙгәргән. Ул үҙенең тәжрибәһе, көсө, өмөтө, ваҡыты һәм мөхәббәте менән бүлешә белгән кешеләрҙең берәүһенә әүерелгән. Ул кешеләрҙең йомарт ҡулы һәм асыҡ күңеле менән бүләк иткәнде бүтәндәргә бирергә өйрәнгән. Быуа өҫтөнә ырғытылған таш ҡулсалар барлыҡҡа килтергән кеүек, беҙ яҡшылыҡтың кешенән кешегә күскән хәрәкәтен дә күҙәтә алабыҙ. Ә бүтәндәр файҙа алғанда, беҙгә лә унан өлөш тейә.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

ҠАЙҘА БАРАБЫҘ, ЙӘМӘҒӘТ?

# РӘСӘЙҘӘ ЭСКЕЛЕК МЕНӘН ТҮГЕЛ,

## айыҡлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк!

**Илебеҙҙә эскелеккә ҡаршы көрәш буйынса яңы проект ҡабул ителде. Быны менән Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев үҙе шөғөлләнә. Был милли проект шундуҡ бәхәстәр, уның аҙағынаса тормошҡа ашырыласағына шикләнеүҙәр тыуҙырҙы. Проблеманың асылы хаҡында профессор Владимир ЖДАНОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Владимир Георгиевич, ни өсөн французлар ҙа, итальяндар ҙа түгел, ә рус халҡы, Рәсәй эскегә һабыша?**

- Спиртлы эсемлекте организмда алкогольдегидрогеназ тигән махсус фермент тарҡата. Был фермент меңәр йыллап виноград ашаған көньяҡ халыҡтарында бар. Виноград ашҡаҙан-эсәк юлында әсегәс, алкоголь һәм уны нейтралләштереүсе фермент эшкәртеп сығарыла, шуға ла эҙемтәләре күҙәтелмәй. Төньяҡ халыҡтарында алкогольдегидрогеназ бөтөнләй тиерлек эшкәртелмәй. Бына ни өсөн чукча, ханты, ненецтарға биш тапҡыр йөҙәр грамм ҡойоп бирәләр ҙә, алтынсыһын эскәндә инде ул алкоголикка әүерелә. Уларҙа был ферменттарҙың эҙе лә юҡ. Бына ошо сәбәпле, Американағы индеецтар, аҙ һанлы унар тиҫтә төньяҡ халҡы юҡҡа сыҡты ла инде. Беҙ, рустар ҙа, туҡланыу структураһы буйынса төньяҡ халыҡ иҫәпләнәбеҙ. Был фермент беҙҙә бик аҙ. Әгәр ҙә эсеүҙе туҡтатмаһаҡ, беҙҙе индеецтар яҙмышы көтә.

Әйткәндәй, рустар ғына ҡырылмай. Мин донъя буйлап күп йөрөйөм. Бөтә аҡ тәнле халыҡ эсә, һәм барыһы ла әкренләп Ер йөҙөнән юғала бара. Кемдәр арта һуң? Айыҡ ҡытайҙар, индустар, мосолмандар, ғәрәптәр... Мин күптән түгел Германияла немец ғаиләһендә йәшәнем, уларҙың балалары мәктәптә уҡый. Кластарында немецтарға ҡарағанда төрөк балалары күберәк. Аҡ тәнле кешеләр Ер шарында бары тик 8 процент ҡына ҡалған һәм был һан кәмей бара. Айыҡ ғаиләләрҙә һигеҙәр-унар бала, эскәнендә - берәү.

**▸ Был фермент шул уҡ немецтарҙы һаҡламаймы ни?**

- Ҡатын-ҡыҙҙың түл күҙәнәге тәбиғәт тарафынан бөтә нимәнән дә яҡшы һаҡлана. Бары тик алкоголь һәм радиация ғына унда дефекттар барлыҡҡа килтерә. Парижда мин йәшәгән ҡунаҡханаға экскурсияға килгән ауыл мәктәбе балалары урынлашты. Шуларҙың яртыһы - тыуымыштан аҡылы зәғиф балалар! Ни өсөн? Ата-әсәһе шарап эсә. Был бахыр балаларҙы "байрам балалары" тип йөрөтәләр. Французлар эске арҡаһында ер йөҙөнән юғала бара. Баландың айыҡ, сәләмәт, бәхетле киләсәген тәьмин итеүҙең берҙән-бер юлы - айыҡ ата-әсә булыу. Шул саҡта һинең балаңа: "Улым, алкоголь беҙҙең милләтте бөтөрөүсе, иҫәргә әүерелдереүсе ҡурҡыныс ағыу", - тип әйтергә тулы әхлаҡи хоҡуғың буласаҡ.

**▸ Ә бына һыра һуң, уның менән, ғәҙәттә, һыуһынды ҡандырырға яраталар?**

- Һыра - иң ҡурҡыныс алкоголле эсемлек. Уның составында өстән алып ун бер процентҡа тиклем алкоголь бар, был бик күп. Һыраның төп бәләһе - уның составындағы алкоголь процентгарында ғына ла түгел. Мин 2004 йылда Грецияла үткән Олимпиаданы иғтибарлап күҙәтеп барҙым. Унда реклама сығымдарын донъяға билдәле һыра компаниялары ҡапланы. Һыра рекламалары артынан шундуҡ импотенциянан дауалаусы таблеткалар рекламаһы китте. Был осраҡлымы? Беҙ был һорауҙы тикшерҙек. Һыраны ҡайнатҡан ваҡытта, хатта составында алкоголь булмаһа ла, ҡомалаҡ ҡушалар. Ә ҡомалаҡ - киндер ғаиләһенә ингән наркотик үҫемлек. Ҡомалаҡты ҡайнатҡан ваҡытта һыра иретмәһенә фитоэстрогендар бүленеп сыға. Күптәр ир-егет ҡатын-ҡыҙҙан нимәһе менән айырылып тороуын беләме икән? Эйе, ир-егет малай булып, ә ҡатын-ҡыҙ ҡыҙыҡай булып тыуған өсөн. Әммә төп айырма: ир-егет организмында тестостерон тигән ирҙәр гормоны, ә ҡатын-ҡыҙҙа - эстрадиол тигән ҡатын гормоны булыуҙа. Ошо гормон арҡаһында ирҙәрҙә тауыш та, холоҡ та, һәләттәр ҙә ирҙәрсә. Ҡатын-ҡыҙҙа эстрадиол етәкселек иткәнгә күрә, улар нәзәкәтле, йомшаҡ тауышлы, тар яурынлы, бала тыуҙырыу өсөн таз һөйәге киң була. Быларҙы мин нимә өсөн һөйләйем? Ир кеше һыра эскәс, ашҡаҙанында химик реакция барлыҡҡа килә. Фитоэстрогендар эстрадиол ҡатын-ҡыҙ енес гормонына әүерелә. Һәм ул әкренләп ирҙән ҡатынға әйләнә башлай. Тауышы нәҙегәйә, яурындары тартыла, ҡорһағы, түштәре үҫә, характерында ирлек сифаты юғала, ҡатын-ҡыҙға ҡарата ҡыҙыҡһыныуы кәмей, ә ҡайһы берәүҙәрендә хатта ирҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килә. Егет 17-20 йәштән үк һыра менән мауыға башлай икән, импотенцияға юлыға, тигән һүҙ. Европала һыранан барыһына ҡарағанда Чехия зыян күрҙе. Ҡатын-ҡыҙ һыра эскән ваҡытта уның ашҡаҙанында ла шул уҡ фитоэстрогендарҙың эстрадиолға әүерелеү реакцияһы бара. Ҡатын-ҡыҙ енси гормоны концентрацияһы саманан тыш арта башлай һәм мөләйем ҡыҙ агрессив, асыулы ҡатынға әүерелә.

Бөгөн һыраны балаларыбыҙ ҡулланыуы бик хәүефле күренеш. Беҙҙең кибеттәрҙә контролһеҙ рәүештә, кем булыуына ҡарап тормайынса, һыра һәм алкоголле коктейль һаталар. Был беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙҙы эскегә һабыштырыр, бөтөрөр өсөн йүнәлтелгән ҡорал. Был ысын мәғәнәһендә, хатта Бөйөк Ватан һуғышына ҡарағанда ла ҡурҡыныс һуғыш. Миңә йыш ҡына: "Һеҙ ғүмерегеҙ буйы эскелек менән көрәшәһегеҙ", - тип мөрәжәғәт итәләр. Мин бер ваҡытта ла эскелек менән көрәшкәнем булманы. Эскелек менән көрәшеү мәғәнәһеҙ һәм аяуһыҙ шөғөл. Мин ғүмерем буйы айыҡлыҡ өсөн көрәшәм. Былар икеһе ике төрлө әйбер. Айыҡлыҡ өсөн көрәшеү - ул беҙҙең балаларыбыҙ эсмәһен өсөн барыһын да эшләү. Статистикаға күҙ һалғайным: 2004 йылда иң юғары үлем осрағы Ярославль өлкәһендә - мең кешегә 20,7 үлем тура килә. Ә иң түбәне, хатта үлтерелгәндәрҙе иҫәпкә алып, Чечен республикаһында: унда мең кешегә 3,8 осраҡ тура килә. Шулай булғас, ысын мәғәнәһендә ҡайҙа һуғыш бара һуң? Ярославль өлкәһендә Чечняға ҡарағанда ете тапҡырға кеше күберәк үлә.

Бөгөн 44 илдә "ҡоро закон" күҙәтелә. Был алкоголь героин, марихуана кеүек наркотик иҫәпләнгән мосолман, ғәрәп илдәре. Мысырҙа урамда эскән килеш йөрөгән өсөн 60 тапҡыр таяҡ менән һуҡтыралар. Урлашыуға ҡаршы ла ҡаты закон йәшәй бында. Был илдәрҙә "ҡоро закон" иман менән нығытылған. Ул ҡәтғи рәүештә алкоголь ҡулланыуҙы тыя. Тағы ла 85 ил айыҡлыҡ тураһында закон индергән. Европалағы иң айыҡ ил Норвегияла 30 мең кешегә алкоголь эсемлектәр менән һатыу итеүсе бер магазин тура килһә, Рәсәйҙә 240 кешегә бер сауҙа нөктәһе тура килә.

**▸ Ә Галилей ҡанындағы тәүрат мөғжизәһе хаҡында ни әйтерһегеҙ?**

- Был эскеселәрҙең билдәле алымы: йәнәһе, Христос үҙе һыуҙан шарап эшләгәс, ҡой ҙа эс! Беҙ был һорауҙы тикшерҙек һәм ошондай һығымтаға килдек: православие, ислам кеүек үк, айыҡ дин. Иисус үҙе эскәнме? Христос, Тәүратта әйтелгәнсә, назарей, йәғни тәүрат монахы итеп тәғәйенләнгән. Назарей уставында ул алкоголь ҡулланыу ғына түгел, виноград һәм ҡайһы бер емештәрҙе ашарға хоҡуғы булмаған, тип яҙылған, сөнки был емештәр алкоголь бүлеп сығарып, уның Аллаһы Тәғәлә менән даими бәйләнешен өҙә алған. Баҡтиһәң, ул заманда Тәүрәт яҙылған телдә шарап виноград һуты тигәнде аңлатҡан. Тимәк, Христос һыуҙы алкоголгә түгел, ә изге виноград һутына әйләндергән. Бары тик атеистар ғына сиркәүҙә шарап менән таҙарыналар, тип уйлай.

Һүҙемде тамамлап, шуны иҫкәртәм. Гитлер яулап алынған көнсығыш территорияһына оккупация сәйәсәте нигеҙен формалаштырып: "Славяндар өсөн бер ниндәй ҙә гигиена ла, прививка ла юҡ. Уларға араҡы менән тәмәке булһа, булды", - тип яҙған. Шуға ла һәр рюмканы күтәргән ваҡытта фюрер васыятын башҡарып тороуығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Ул үҙе күрә алмаған славяндарҙы араҡы һәм тәмәке менән генә юҡ итергә мөмкин булыуын аңлаған. Ватандаштар, беҙ һеҙҙең менән аңыбыҙға килеп, был ҡурҡыныс проблеманы хәл итә алмайбыҙмы ни? Беҙ быны үҙебеҙ, ғаиләбеҙ, балаларыбыҙ өсөн булһа ла эшләргә тейеш.

**Евгения ЧЕРНЫХ.**
**"Комсомольская правда".**

## *Ҡотлайбыҙ!*

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - Дыуан районы Иҫке Хәлил ауылынан **Зилара Низамованы**, Федоровка районы Яңы Яуыш ауылынан **Ишморат Маликовты**, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан **Рәүиә Айытҡолованы**, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан **Юнир Күскилдинды**, Татыр-Үҙәк ауылынан **Динислам Ғирфановты**, Сиҙәм ҡасабаһынан **Миңлебикә Ишмырҙинаны**, Йәнтеш ауылынан **Айҙар Иштановты**, Бөрйән районы Яңы Мөсәт ауылынан **Рима Бүләкованы**, Исламбай ауылынан **Ғәйшә Бирҙеғолованы**, Баймаҡ районы Һаҡмар ауылынан **Зөһрә Арғынбаеваны**, Урғаҙа ауылынан **М. Йәрмөхәмәтовты**, Ярат ауылынан **Рәсимә Назарованы**, Ғүмәр ауылынан **Шәрифйән Ноғомановты**, Өфө ҡалаһынан **Римма Аҡҡолованы**, **Ҡазыйхан Һаҙиевты**, Мәләүез ҡалаһынан **Рәфис Ильясовты**, Ишембай районы Яңы Әптек ауылынан **Зәйтүнә Вәлиеваны**, Бәләбәй районы Алексеевка ауылынан **И. Сәлихованы**, Әбйәлил районы Исхаҡ ауылынан **Сәфинә Солтанованы** ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Көн һайын бәләкәй генә булһа ла уңыштарға өлгәшеп, еңеүҙәр яулап, Хоҙай Тәғәлә мәрхәмәттәренә өлгәшеп йәшәргә яҙһын һеҙгә. Күңел тыныслығы бер ҡасан да ташламаһын, сәләмәтлек һәм бәхет алдағы көндәрҙә лә тоғро юлдашығыҙ булһын!

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## ТАУЫҠ ҺӘМ ҠОШ-ҠОРТ ӨСӨН "КРЕПКОВИТ"

- Уның составында кальций, фосфор, натрий һәм көкөрт, шулай уҡ "лигногумат".
- Ул организмда матдәләр алмашыныуын яҡшырта, иммунитетты һәм стресс хәлдәренә ҡарата тотороҡлоҡто нығыта.
- Рахит, аяҡ һәм быуындар һыҙлауы, остеопороз кеүек сирҙәрҙе бөтөрә, һөйәк туҡымаһын нығыта һәм ҡауырһын торошон яҡшырта.
- Йомортҡа ҡабығының ныҡлығына һәм ҡатылығына, йомортҡа һалыуға булышлыҡ итә.
- Йомортҡаларҙың инкубация үҙенсәлектәре яҡшыра, себеш сығарыу арта.
- Ҡош-ҡорт себештәре тиҙерәк үҫә һәм үҫешә.
- "Крепковит"ты бер тауыҡҡа - 3 г, өйрәктәргә - 5-7 г, ҡаҙҙарға - 8-11 г.

**Почта бүлексәләренә мөрәжәғәт итегеҙ!**
**Сертификацияланған. Реклама хоҡуғында.**
**www.vhoz.ru**

## МАЛ АҘЫҒЫНА ӨҪТӘМӘ

Ауыл ерендә мал һәм ҡош-ҡорт аҫраусыларҙың күбеһе **"ЗДРАВУР"** аҙыҡ өҫтәмәләрен файҙалана. Улар малдың һәм ҡош-ҡорттоң продуктлылығын күтәрә, уларҙың һаулығын яҡшырта, ҡәҙимге мал аҙығын үҙләштереүҙе яҡшырта. Әммә **"ЗДРАВУР"** өҫтәмәләре ҡушылған аҙыҡты ашаған малдың һәм ҡош-ҡорттоң йомортҡаһы, һөтө һәм ите тәмлерәк һәм беҙҙең организм өсөн файҙалыраҡ икәнен һәр кем белмәй әле. Был ысынлап та шулай. Беренсенән, сәләмәт малдар сәләмәт продукция бирә. Икенсенән, рациондағы туҡлыҡлы матдәләрҙең һәйбәт балансы арҡаһында мал проукцияһы диетик йәһәттән дә тулы ҡанлы була. Өсөнсөнән, фәнни тикшереүҙәр раҫлауынса, витамин-минераль премикстар арҡаһында йомортҡала, һөттә һәм иттә еңел үҙләштерелеүсе витаминдар һәм микроэлементтар (шул иҫәптән А, Е витаминдары, В төркөмө витаминдары, цинк, йода һ.б.) тупланыуы арта. Шул уҡ ваҡытта **"ЗДРАВУР"**ға антибиотиктар, гормондар һәм кеше һаулығына зыян килтерерҙәй башҡа өҫтәмәләр ҡушылмай.

**Өҫтәмәләрҙе почта бүлексәләрендә һатып алырға мөмкин. Сертификацияланған. Реклама хоҡуғында. www.vhoz.ru**

✔ *Булат Рафиҡов тигән оло һүҙ оҫтаһы әҙәбиәт һөйөүсегә үҙенең күңел донъяһын аса, борсолоу-хәүефтәре менән уртаҡлаша, уларҙы тормошҡа, киләсәгенә битараф булмаҫҡа, уяулыҡҡа саҡыра.*



КИТАБЕННАС

# ФАНТАСТИКА ЯРАТҠАНДАРҒА

## Булат Рафиҡовтың "Һуңғы ахмаҡлыҡ" йыйынтығы тураһында

**Сит ил фантастары машина "рух"ын йәки машина эсендәге "илаһ"ты шаҡтай тәрәндән күрһәтеүгә өлгәште. Был йәһәттән тәнҡитселәр Совет йәки Рәсәй фантастарының уларҙан ныҡ ҡалышыуын билдәләй. Шулай ҙа бик матур өлгөләр бар. Башҡорт әҙәбиәтендә иң беренсе булып бына ошондай "йән" эйәһен танылған яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат Рафиҡов балалар өсөн яҙған "Лоулла" повесында һүрәтләне. Булат Заһрый улының фантастик әҫәрҙәре компьютер революцияһынан күпкә алда ижад ителһә лә, тап машина "рух"ын, шулай уҡ уның аҡыл эйәһе булған кеше затына үҙенсәлекле, хатта ки сетерекле мөнәсәбәтен сағылдырыуы менән иғтибарға лайыҡ.**

Фантастика тураһында һүҙ йөрөткәндә, әҙиптең арауыҡты тойоу йәки уны күреү үҙенсәлеген күҙ уңынан ысҡындырырға хаҡыбыҙ юҡ, сөнки сикһеҙ арауыҡ менән бәйләнешкә инеү, йәғни хыялда уның моделдәрен тыуҙырыу һәр яҙыусының һәләтенән килә торған эш түгел. Шуныһы ла бәхәсһеҙ, был арауыҡ (ғәләм, йыһан) фәнни ҡараштан айырыла һәм автор фантазияһы менән байытыла. Булат Рафиҡовтың "Лоулла", "Йыһан азаматтары", шулай уҡ "Һуҡайлының һуңғы байрамы" төрлө планета кешеләренең үҙ-ара бәйләнешен тасуирлай. "Һуңғы ахмаҡлыҡ" повесынан күпкә элек яҙылған был әҫәрҙәрендә ер кешеһенең берҙәм маҡсатҡа ынтылышы, ошо маҡсаттың планета-ара мөнәсәбәттәрҙе үҙгәртеү көсөнә эйә икәнлеге күрһәтелә, әҙәм балаһының мөмкинлектәренә, тимәк, киләсәгенә ышаныс төп лейтмотивты тәшкил итә.

Яуызлыҡ һәм яҡшылыҡ - бына ошо ике көстөң мәңгелек көрәше тасуирлана "Һуҡайлының һуңғы байрамы"нда. Ҡасандыр ерҙә хакимлыҡ ҡылған генералдың ике йөҙ йыл эсендә тамсы ла үҙгәрмәүе, ысынлап та, һағайтырлыҡ. "Был ваҡиға яуызлыҡтың йәшәүгә үтә һәләтлелеге, үҙен һаҡлау өсөн төрлө ысулдар таба алыуы тураһында фәлсәфәүи һығымталар яһарға этәрә", - ти Көн Азамат.

Йәшел планетала йәшәүселәрҙең: "Ҡояш байып, ҡояш сығыуы!" - тип әйтеүҙәре йәшәйештең мәңгелек әйләнешен аңлатҡандай. Һәм был инде Һуҡайлы планетаһының киләсәге яҡтыраҡ, мәҙәниәтлерәк була барыр, Һуҡ тип аталған ырыу ерендә йәшәп ятҡан генерал өсөн был һуңғы байрам булғандыр, ә һуҡайлыларҙы берлек, берҙәмлек байрамдары алда көтәләр, тигән өмөт уята.

Йыйынтыҡҡа исем биргән "Һуңғы ахмаҡлыҡ" повесында Ер менән идара итергә һәләтен юғалтҡан системаның йөмғиәтте һәләкәткә илткән сәбәптәре күрһәтелә. Шуларҙың береһе - кеше психикаһы менән тәжрибә яһау арҡаһында йыһанда барлыҡҡа килгән яңы заттар. Хакимдарға оҡшамаған кешелек сифаттарын юҡ итеү, ихтимагисәйәси тормоштағы көрсөктөң төп сәбәбен асыҡларға теләмәү көтөлмәгән һөҙөмтәләргә килтерә. Проблемаларҙан ҡотолоу урынына хаким эйәләре үҙҙәренең яһалма һауыттарҙа йәшәүсе яңы хужаларын ярата. Эргәндә торған зат ысын кешеме, әллә уның игеҙәгеме? Кешелек үҙ-үҙен танымау хәленә төшә бара. Һөргөндән ҡайтып төшөүсе Тимер Сәйер хәлдәр комиссияһы рәйесе итеп тәғәйенләнә. Бында уны игеҙәге Иптәш көтөп тора. Иптәш - һарылар араһындағы берҙән-бер ыңғай зат. Ул Тимергә хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Ни өсөн берҙән-бер? Миненсә, төп герой үҙ-үҙенә, булмышына хыянат итмәгән герой. Уның күңеле үлмәгән, эҙләнә, яңылыша, ләкин бар булмышы менән хәҡиҡәткә ынтыла, унда намыҫ һәм ихласлыҡ һүнмәгән. Бына шуға ла Тимерҙе икегә бүлһәләр ҙә, барыбер төп асылы менән бер бөтөн булып ҡала. Ирекһеҙҙән, кешелек яҙмышы өсөн яуаплылыҡты үҙ иңенә алырға мәжбүр булыуы, нигеҙҙә, шуға бәйләнгән. Бер заманда ла кеше яуаплылыҡтан ҡасмаҫҡа тейеш.

Китап уҡыусылар ҙа авторҙың геройҙары менән ахыры булмаған йыһанды гиҙәсәк, хыялдарында ла барып етә алмаҫ планеталар менән танышасаҡ. Рәссам тасуирлаған икһеҙ-сикһеҙлек аңыбыҙға ғәйәт аңлайышлы бер төшөнсә булып килеп инәсәк. Ысынбарлыҡта, Булат Рафиҡов тигән оло һүҙ оҫтаһы әҙәбиәт һөйөүсегә үҙенең күңел донъяһын аса, борсолоу-хәүефтәре менән уртаҡлаша, уларҙы тормошҡа, киләсәгенә битараф булмаҫҡа, уяулыҡҡа саҡыра. Фантастика жанрының матур өлгөләре булған был повестар һәр кемдең күңеленә хуш килер.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОЛО МӨҒЖИЗӘЛӘР АЛДЫНАН...

## бәләкәйҙәрен күрергә өйрән

**Өс кеше - тылсымға эйә аҡыл эйәһе, абруйлы бай һәм аҡыл эйәһенең уҡыусыһы - урам буйлап килә икән.**

**- Ишетеүемсә, һин тылсымға эйәһең, - тигән бай аҡыл эйәһенә. - Минә мөғжизә күрһәтһәң, Аллаңа ышанырмын.**

**- Бөгөн ҡояш ҡалҡтымы? - тип һораған ҡарт.**

**- Әлбиттә!**

**- Бына һиңә мөғжизә. Донъябыҙҙың бер мөғжизәһе.**

**- Юҡ... Минә ысын мөғжизә күрергә кәрәк! Ҡояшты ҡапла, таштан һыу сығар... Ҡара әле! Ана, ҡыуаҡ аҫтында яраланған ҡуян ята. Дауала уны!**

**- Ҡатының бала тапҡан, тип ишеткәйнем?**

**- Эйе. Хәҙер малайым бар.**

**- Был бит ысын мөғжизә! Тормоштоң бер мөғжизәһе.**

**- Юҡ, минең үҙ күҙҙәрем менән ысын мөғжизәне күргем килә!**

**- Әле уныш йыйыу мәле. Ҡара әле, япраҡ ҡына ҡап-ҡара булып ятҡан бынау баҫыуҙа дөгө һәм бойҙай ҡалай уңған?**

**- Йылдағыса инде!**

**- Бына һиңә өсөнсө мөғжизә!**

**- Мин дөрөҫ аңлата алманым шикелле. Минең бар теләгәнем...**

**- Һин барыһын да бик яҡшы аңлаттың. Мин үҙем күрһәтә алғанды һиңә күрһәттем. Эҙләгәнеңде тапмаһаң, ғәфү ит. Ярҙам итә алмайым.**

**Быны ишеткәс, бай боролған да киткән. Бер сама ваҡыт үткәс, аҡыл эйәһе ҡыуаҡ эргәһенә барып, баяғы ҡуянды ҡулына алып, яраларына өргән. Ҡуян шундуҡ терелгән. Уҡыусыһы аптырашынан:**

**- Остазым, бындай мөғжизәләрҙе һин көн һайын башҡараһың. Ни өсөн был рәхимле кешегә бераҙһен генә булһа ла күрһәтмәнең?**

**- Уға мөғжизә түгел, спектакль кәрәк ине. Батша булыр өсөн тәүҙә принц булырға кәрәк. Аҡыл эйәһе булыр алдынан уҡыусы тормошон татып ҡарау мотлаҡ. Ҙур мөғжизәләр күреү теләгән тормошҡа ашырыр алдынан бәләкәстәрен күрергә өйрәнергә кәрәк. Уларҙы бит беҙгә һәр яңы атҡан таң үҙе менән алып килә...**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### Аш-һыу өсөн тәмләткес

Башлы һуғанды, кишерҙе, петрушка тамырын турап, һыуҙа, йә һурпала бығтырырға. Ондо табаға һалып ҡыҙҙырғас, аҡ май ҡушып, ҡуйы ҡаймаҡ хәленә еткереп, һыуытырға. Ошо массаға бер аҙ һыу өҫтәп, шыйыҡлатырға ла, бығтырылған йәшелсәләрҙе һалып ҡайнатып алырға һәм томат пастаһы һалып болғатырға.

### Билмән, һурпа өсөн тәмләткес

Томат пастаһын ҡайнатҡас, борсаҡлы борос, кориандр, ҡәнәфер, лавр япрағы, шәкәр ҡомо, ҡырғыстан алма ҡушырға. Бөтәһе лә самалап алына.

### Бығтырылған сөгөлдөр

Һыу менән үҫемлек майын кәстрүлгә һалып, шунда туралған сөгөлдөр, кишер, һуған, тоҙ, шәкәр ҡомо ҡушып бығтырғас, томат пастаһы, лимон һуты, лавр япрағы өҫтәргә.

### Шалҡан менән картуф салаты

Шалҡанды ҡырғыстан үткәрергә лә иҙелгән картуф, ваҡ итеп туралған башлы һуған, тоҙ, үҫемлек майы ҡушып болғатырға. Быны өсөн 500 грамм картуф, бер шалҡан, бер баш һуған, тоҙ, үҫемлек майы кәрәк.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

# *ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Ҡырмыҫҡалы районы Үтәгән ауылында йәшәүсе ҡәҙерле әсәйебеҙ

**Зәкирә Бәхтегәрәй ҡыҙы ИСКӘНДӘРОВАны**

күркәм юбилейы - 75 йәше менән ихлас ҡотлайбыҙ! Һине тыуған көнөң менән тәбрикләп, йөрәк түренән сыҡҡан иң йылы, изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ. Тәбиғәттең аҡ маныҡҡа күмелгән сағында тыуғанға күрә, күңелдәрең аҡ һәм саф, булмышың ихлас һинең. Бар ғүмерең кешеләргә ярҙам итеүгә бағышланып, ауылдаштарыңа, туғандарыңа йөрәгеңдең йылыһын, күңелеңдең нурын тигеҙ бүлдең. Һинең алсаҡлығыңа, тормошто яратыуыңа, һәр көндән йәм табып йәшәй белеүеңә, көслө рухыңа һоҡланабыҙ. Донъялағы бөтә яҡшылыҡты йыйған оло йөрәгең, сабыр холҡоң, бөтәбеҙгә лә хәстәрлекле булғаның өсөн һиңә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ!

Аллаһы Тәғәләнең мең рәхмәте яуһын һиңә, күңел тыныслығыңда, иҫәнлектә-һаулыҡта оҙон-оҙаҡ йәшәргә насип итһен. Ярҙамсыл күңелең һәр саҡ сая килеш ҡалһын, балаларыңдың игелеген күреп, ейән-ейәнсәрҙәреңдең һөйөүен тойоп, бөгөнгөләй нур сәсеп йәшәүеңде теләйбеҙ. Шатлыҡ-ҡыуаныстарға күмелеп, киләсәктә лә туғандарыңа, балаларыңа тормош терәге, кәңәшсе булып, ҡәҙер-хөрмәттә атайыбыҙ менән бергә-бергә татыу оҙаҡ йылдар донъя көтөргә яҙһын. Һиңә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, тормош юлыңда һәр ваҡыт уңыштар, күңел күтәренкелеге, йән тыныслығы юлдаш булыуын теләйбеҙ.

*Күңелдәрең Һинең - ҡунаҡ йорто,*
*Тартынмай ин, уҙ иң түренә.*
*Ул кин, йыһанға тиң,*
*Унда урын иркен - шатлығыма, серемә.*
*Күңелдәрең Һинең йәш ҡоралай,*
*Шом, хәүефте алдан һиҙенә,*
*Ҡайғыларға ҡалһам, ҡап урталай,*
*Бүлеп алыр уны үҙенә.*
*Күңелдәрең Һинең - яҙғы ташҡын,*
*Ашҡына ла, ярһып ашҡына.*
*Был ташыуҙар ҡайтһа, нишләрмен, тип*
*Хафаларға ҡалаһың йыш ҡына.*
*Күңелдәрең Һинең - таңғы ысыҡ,*
*Ҡунғаны юҡ уға кер заты.*
*Шуға сафтыр, шуға яҡтылыр ҙа,*
*Йәшәүеңдең маҡсат-мораты.*
*Күңелдәрең Һинең - ҡайнар ҡояш,*
*Йәй монары унда һәр ваҡыт,*
*Йылытырһың, әгәр өшөй ҡалһам,*
*Шуға килəм һиңә һәр ваҡыт.*
*Күңелдәрең Һинең быҙбый талы,*
*Уралымдың ҡурай моңдары.*
*Мөлдөрәмә тулы ҡәсә кеүек,*
*Түгелергә генә тора ул.*

**Иң изге теләктәр менән ҡыҙың Айгөл, кейәүең Әхтәр, улың Айрат, киленең Зифа, ейән-ейәнсәрҙәрең.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, әлемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририят: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 5071